БИРСКИЙ ФИЛИАЛ ФЕДЕРАЛЬНОГО ГОСУДАРСТВЕННОГО
БЮДЖЕТНОГО ОБРАЗОВАТЕЛЬНОГО УЧРЕЖДЕНИЯ
ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ
«БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ УНИВЕРСИТЕТ»

# СОВРЕМЕННЫЙ УРОК – 2016

М а т е р и а л ы
Всероссийского конкурса методических разработок

Выпуск 1

БИРСК
2016

МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ И НАУКИ
РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ

БИРСКИЙ ФИЛИАЛ ФЕДЕРАЛЬНОГО ГОСУДАРСТВЕННОГО
БЮДЖЕТНОГО ОБРАЗОВАТЕЛЬНОГО УЧРЕЖДЕНИЯ
ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ
«БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ УНИВЕРСИТЕТ»

# СОВРЕМЕННЫЙ УРОК – 2016

М а т е р и а л ы
Всероссийского конкурса методических разработок

Выпуск 1

БИРСК
2016

УДК 372.8
ББК 74.26
С – 56

Печатается по решению
редакционно-издательского совета
Бирского филиала Башкирского
Государственного университета

Рецензенты:

**Белобородова Н.С.,** доктор педагогических наук, профессор БФ БашГУ;
**Петишева В.А.,** доктор филологических наук, профессор БФ БашГУ;

Автор-составитель:
**Каскинова Г.Н.,** кандидат филологических наук, доцент кафедры филологии **БФ БашГУ**

**Современный урок**. Материалы Всероссийского конкурса методических разработок. Выпуск 1. – Бирск: Бирск.фил. Баш. гос. ун-та, 2016. – 177 с.

В сборник вошли конспекты уроков, внеклассных и воспитательных мероприятий; разработки занятий в дошкольном образовательном учреждении.

Конспекты составлены с учетом современных тенденций развития школьного образования и соответствуют требованиям ФГОС.

Сборник рассчитан на специалистов-филологов, работников сферы образования, а также самый широкий круг читателей.

Все статьи сборника прошли рецензирование, сохраняют авторскую редакцию, всю ответственность несут авторы.

© Составитель Г.Н. Каскинова, 2016
©Бирский филиал Башкирского
государственного университета, 2016

# ПРЕДИСЛОВИЕ

Кафедрой филологии Бирского филиала Башкирского государственного университета с целью повышения престижа учительской профессии, выявления талантливых педагогов, внедрения современных технологий и методик обучения на уроках башкирского языка и литературы, истории культуры Башкортостана, внеклассных мероприятиях, классных часах проводился Всероссийский конкурс методических разработок уроков и внеклассных мероприятий “Современный урок – 2016”.

География участников достаточно широка: это Самарская область, г. Уфа, г. Нефтекамск, г. Янаул, г. Учалы, г. Ишимбай, г. Сибай, г. Бирск и Бирский район, Благовещенский, Бураевский, Белорецкий, Давлекановский, Зилаирский, Караидельский, Хайбуллинский районы Республики Башкортостан.

Организаторы конкурса выражают благодарность всем участникам, желают крепкого здоровья и успехов во всех начинаниях!

ЙӨКМӘТКЕҺЕ


*ЗАМАНСА БАШҠОРТ ТЕЛЕ ДӘРЕСЕ*

*Ғайсина М.М. Яҙ етте. Омонимдар................................................................ 7*

*Кәбирова А.Ф. Уртаҡ ҡылым................................................................ 10*

*Муллағәлиева Л.Р. “Мостай Кәримдең “Үлмәҫбай” поэмаһы (I бүлек). Ике һәм бер составлы һөйләмдәр................................................................13*

*Рәжәпова Н.Ә. Ҡышлаусы ҡоштар. Ҡылымдың барлыҡ һәм юҡлыҡ формалары................................................................ 21*

*Фәтҡуллина Р.М. “Атай-әсәй, туғандарым” темаһына методик ҡулланма................................................................ 25*

*Хәсәнова Л.Д. Ф. Рәхимголованың «Беҙҙең әсәй» шиғыры. Алмаштар. Зат алмаштары................................................................ 34*

*Шәйхинурова М.М. Башҡорт балы................................................................ 37*

*Яҡупова Т.М. Сафуан Әлибайҙың “Ҡышҡы урман” шиғырын өйрәнеү................................................................ 41*

*ЗАМАНСА БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ДӘРЕСЕ*

*Ғәлләмова Г.Ғ. Салауат Юлаев шиғриәтенә дәрес-сәйәхәт................................................................ 48*

*Дәүләтҡолова С.С. Зәйнәб Биишеваның“ Дуҫ булайыҡ” повесы буйынса йомғаҡлау дәресе................................................................ 51*

*Дәүләтҡолова С.С. Башҡортостандың халыҡ шағиры М.Кәримдең тормош һәм ижадына арналған дәрес-уйын................................................................ 54*

*Иҫәнбаева Г.А. Мостай Кәримдең «Айгөл иле» драмаһын өйрәнеү................................................................ 58*

*Йомағужина Н.Ф. «Аҡмулла – һәр заманда хаҡ мулла»................................................................ 63*

*Камалова Ф.Ф. Булат Рафиҡовтың «Хыялый шыршы» әкиәтен өйрәнеү................................................................ 71*

*Камалова Ф.Ф. Аҡмулла – һәр заманда хаҡ мулла................................................................ 74*

*Кәбирова А.Ф. Әнүр Вахитовтың “Ир ҡанаты –ат була” әҫәрен өйрәнеү................................................................ 83*

*Фаршатова Ә.Ә. Рауил Бикбаев. “Даламды һағынғанда”................................................................ 89*

*Хәмиҙуллина З.Э. Аҡмулланың аҡ юлынан................................................................ 97*

*Әғәҙуллина Р.Ғ. Талха Ғиниәтуллиндың “Әсә һәм бала” хикәйәһендә әсә менән бала мөнәсәбәттәре................................................................ 100*

*ЗАМАНСА КЛАСТАН ТЫШ САРА*

*Йылҡыбаева Г. У. Шаттар, тапҡырҙар клубы уйыны................................................................ 105*

*Йомағолова Г.К. “Мин түгелмен тыуған ерҙең тик осраҡлы ғына ҡунағы...»................................................................ 109*

*Сәйетгәрәева Ә.Ф., Солтанова Ф.Х., Латипова Р.Р. Хәтирәләргә ҡайтып................................................................ 116*

*БАШҠОРТОСТАН МӘҘӘНИӘТЕ ТАРИХЫ БУЙЫНСА ЗАМАНСА ДӘРЕС*

*Ғәлиева Д.Р. "Нағыш фәлсәфәһе" темаһына дәрес өлгөһө................................................................ 119*

*Хуснуллина Р.Д. Просветительство в поэзии Акмуллы................................................................ 121*

*Чулпанова А. Р., Кунц Т.В. «Бесстрашные защитники неба»................................................................ 125*

БАЛАЛАР БАҠСАҺЫНДА ЗАМАНСА ДӘРЕС

Абдуллина Р.Ә. Ҡуян беҙҙә ҡунаҡта ........................................................................................................ 138

Кәримова Г.К. Баҡыр тау батшалығына сәйәхәт ..................................................................................... 141

Әлбәкова З.Й. «Фатима инәйҙә ҡунаҡта» ................................................................................................ 146

Сөләймәнова М.Х. “Минең матур бармаҡтарым...” ................................................................................ 150

Сәйетханова Г.Ф., Мәсәлимова В.В. Башҡортостан – тыуған ерем, ғәзиз республикам ........................ 154

# ЗАМАНСА БАШҠОРТ ТЕЛЕ ДӘРЕСЕ

***Ғайсина М.М.,***

Учалы ҡалаһының

5-се һанлы урта мәктәбе

## ЯҘ ЕТТЕ. ОМОНИМДАР.

(5-се класс, рус төркөмө)

**Маҡсат:**

1. **Шәхси сифаттарҙы үҫтереүсе**:
   Тыуған ергә, тәбиғәткә иғтибарлы булыу, ҡәҙерен белеү, һаҡлау сараларын күреү, тәбиғәтте яратырға өйрәнеү.
2. **Предмет буйынса белем биреүсе:**
   Тема менән танышыу, өйрәнеү, дөрөҫ итеп һөйләмдәр төҙөү, һөйләү телмәрен үҫтереү.
3. **Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштереүсе**:
   Үҙ аллы белем алырға, яңы мәғлүмәтте тупларға һәм ҡуллана белергә өйрәтеү, телмәр үҫтереү, ижади фекерләргә өйрәтеү, үҙ аллы һәм төркөмдәрҙә эшләү һәләтен үҫтереү.
   Күҙалланған һөҙөмтәләр:
   **Метапредмет-ара:** тексты уҡыу, аңлау, үҙ фекереңде әйтә белеү, төркөмдәрҙә эшләргә өйрәнеү.
   **Шәхсән:** алған белемде тормошта дөрөҫ ҡулланырға, һаҡланыу сараларын белеү, киҫкен ситуацияларҙа юғалып ҡалмау.
   **Премет-ара:** тәбиғәт, география, халыҡ ижады өлгөләре.
   **Эш алымдары**: Дөрөҫ итеп һөйләмдәр төҙөү, яҙ билдәләрен белеү, йомаҡтар сисеү, ҡағиҙә уйлау, тасуири уҡыу, төркөмләп эшләү.
   **Уҡытыусы эшмәкәрлеге**: уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген ойоштороу, эшкә йүнәлеш биреү, тикшереү, дөйөмләштереү, һығымталар яһау.
   **Уҡыусылар эшмәкәрлеге**: дәрескә маҡсат ҡуйыу, тормошҡа ашырыу, уҡытыусы менән берлектә эшләү, үҙ фекереңде белдереү, һығымта яһау.
   **Дәрес төрө**: яңы белем алыу.

**Йыһазландырыу:** слайдтар, һүрәттәр, видеосюжет.

Дәрес барышы:

1. Ойоштороу.

– Дәрескә телдәрҙе төҙәтеп алыу, артикуляцион күнегеү башҡарыу.

Тә-тә- тә – ултырабыҙ дәрестә,

Са-са-са – һөйләшәбеҙ башҡортса.

Ый-ый-ый – уҡыусы шиғыр уҡый,

Ыш-ыш-ыш – беҙ шундай тыныс. (слайд №1).

**2. Уңыш ситуацияһы тыуҙырыу.**

Видеосюжет ҡарау. (слайд №2).

– Нимә тураһында сюжет ҡараныҡ. (Яҙ).

Яҙ билдәләрен әйтеү. Һөйләмдәр төҙөү.

Бөгөнгө көндө һүрәтләү.

3. **Психологик комфорт тыуҙырыу**.

– Ҡояш ниндәй? Бына беҙгә матур ғына ҡояш ҡарап тора,ул бөгөн беҙҙе йылытып, беҙҙең эшләгәнебеҙҙе ҡарап торор. (Слайд №3).

4. Йомаҡ сисеү.

Мин –яҙ айы,
Табып ҡара.
Хәҙер – мин аш,
Ҡабып ҡара. (Май-май).
Мин йыл миҙгеле
Мине белмәйме икән?
Ручка биреп һиңә эш ҡушһам,
Эшләрһеңме икән? (Яҙ-яҙ). (Слайд №4).

5. – Нимә ул омонимдар? (Балаларҙы тыңлау, ҡағыҙә сығарыу). (Слайд №5).

– **Дәрестең маҡсатын билдәләү**. (Балалар билдәләй. Төркөмдәргә бүлеү).

– Ә һәр төркөмдөң башлығы булырға тейеш, ул һеҙгә бөгөн баһалар ҡуйыр.

– **География фәне менән бәйләү**. (Слайд№ 6).

**Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу.**

6. Дөрөҫ итеп һөйләмдәр төҙөү. (Һәр төркөм эшләй). . (Слайд №7, 8, 9, 10).

7. Ял итеү минуты. Физкультминутка. (Хәрәкәттәр менән башҡарыу).

Ошолай уяна сәскә,
Йылы яҙғы иртәлә.
Йән яғына ҡаранып,
Үрелә ул ҡояшҡа.

8. Шиғыр өҫтөндә эш. . (Слайд№11).

Ҡарғалар ҡыуҙы ла ҡарҙы,
Йәшәртте текә ярҙы,
Улар: “Яр! Яр!”- тип теләгәс,
Ағастар япраҡ ярҙы.
(Р. Ниғмәтуллин).

– Әңгәмәләшеү, тасиури уҡыу күнекмәләре үткәреү, омонимдар табыу. 1-се төркөм һүҙ аша, 2-се төркөм берәр һүҙләп, 3-сө төркөм берәр юллап, 4-се төркөм хор менән уҡый.

– Шиғыр буйынса әңгәмәләшеү.

9. Ял итеү минуты. “Яҙ” йырын йырлау. (Слайд №12).

10. – Ә хәҙер ошо эште башҡарайыҡ. (Һүрәт урынына һүҙҙәр ҡуйыу, дөрөҫ итеп уҡыу, тәржемә итеү. (Слайд №13, 14, 15, 16).

11. – Яҙ тураһында ниндәй һынамыштар беләһегеҙ. Һынамыштар әйтеү, мәғәнәһен аңлатыу.

**Проблемалы һорау ҡуйыу.**

– Яҙғы боҙ яҫтыҡ ҡалынлыҡ булһа ла ышанма, – ти халыҡ.

– Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ? (Әңгәмә үткәреү). (Слайд №17).

– Ни өсөн яҙғы боҙға ышанырға ярамай. Ниндәй ҡағиҙәләр бар? (Слайд №18).

– Яҙғы боҙ өҫтөнән йөрөргә ярамай.

Боҙ киткәндә йылғаға яҡын барырға ярамай. Яҙын боҙ өҫтөндә балыҡ тоторға ярамай. Ҡыйыҡ башынан төшкән ҡарҙан, боҙбармаҡтарҙан һаҡ булырға кәрәк! Яҙғы ташҡында иғтибарлы булыр кәрәк!

**12. Йомғаҡлау. Рефлексия.**

– Бөгөн беҙ дәрестә нимә тураһында һөйләштек?

–Ҡуйылған маҡсатҡа ирештекме?

Төркөмдәрҙең эшен баһалау.

– Яҙ мизгеле иң матур мизгелдәрҙең береһе. Тәбиғәттең ҡышҡы йоҡоһонан уяныуы һәр кешегә яҡшы тәьҫир итә, кешеләрҙең кәйефе күтәрелә. Әммә бөгөн беҙ дәрестә әйткән ҡағиҙәләрҙе онотоорға ярамай.

13. **Өйгә эш.** (Слайд №19).

Ә хәҙер, уҡыусылар, минең сайтҡа кереп өйгә эште нисек эшләргә икәнен ҡарайыҡ. http://mansia76.ucoz.com/index/filmdar/0-51

Йәки: https://www.youtube.com/watch?v=SJymy8iPVh4 (ютуб)

Яҙ тураһында шиғыр яҙып ҡарау.

*Бына ... ...*
*Килә беҙгә яҙ!*
*Бөтә .... .....*
*Өләш әле, наҙ!*

***Кәбирова А.Ф.,***

Сибай ҡалаһының 12-се урта дөйөм

белем биреү мәктәбе

# УРТАҠ ҠЫЛЫМ

**(Башҡорт теленән 6-сы класта үткәрелгән дәрес өлгөһө)**

Тема: Уртаҡ ҡылым.

Маҡсат: 1) Уртаҡ ҡылымдың мәғәнә үҙенсәлектәрен аңлатыу һәм телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү. Яһалышын практик үҙләштереү. Дуҫлыҡ, дуҫтар төшөнсәһен аңлатыу.

2) Дуҫтарға ихтирам , хөрмәт тәрбиәләү.

3) Телмәрҙе үҫтереү, һүҙлек байлығын байытыу.

Йыһазландырыу: кроссворд, мәҡәлдәр, тест һорауҙары, һүрәттәр, диапроектор, презентация.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу.

Һаумыһығыҙ, уҡыусылар. Бөгөн беҙгә ҡунаҡтар килгән. Әйҙәгеҙ, улар менән һаулыҡ һорашайыҡ.

– һаулыҡ һорашыу.

II. «Психологик атмосфера» тыуҙырыу.

– Уҡыусылар, һеҙ бөгөн мәктәпкә ниндәй кәйеф менән килдегеҙ? Кәйефегеҙҙе күрһәтегеҙ әле. Ошо яҡшы кәйеф менән дәресте башлап ебәрәйек. Бер-беребеҙгә ҡарата һәр ваҡыт шулай мөләйем, иғтибарлы, ихтирамлы булығыҙ. Йылы һүҙҙәрегеҙҙе йәлләмәгеҙ. Тылсымлы һүҙҙәр кешенең күңелен күтәрә, йәшәргә көс өҫтәй. Хәйерле иртәләр, хәйерле төндәр һәм көндәр теләй белһәгеҙ, яҡындарығыҙҙың да, дуҫ-иштәрегеҙҙең дә күңеле күтәрелер. Ә изге күңелдән теләгән теләк һәр саҡ ҡабул була. Дәрестә иғтибарлы булығыҙ, белемдәребеҙҙе, үҙебеҙҙе яҡшы яҡтан күрһәтәйек.

III. Өйгә эште тикшереү.

1. Беҙ үткән дәрестә ниндәй тема үткән инек?(исем ҡылым )

2. Исем ҡылым темаһы буйынса белемдәрҙе тикшереп алайыҡ. Бының өсөн һеҙгә тест һорауҙарына яуап бирергә кәрәк.

Тест.

1. Исем ҡылымдар нимәне белдерә?

а) эште, хәлдең, хәрәкәттең исемен.

б) эште, хәлде, хәрәкәтте.

в) эштең, хәлдең, хәрәкәттең билдәһен.

2. Исем ҡылымдар ниндәй ялғауҙар менән яһала?

а) күплек ялғауҙары менән

б) –ма/-мә ялғауҙары менән

в) –у/-ү,-ыу/-еү,-оу/-өү ялғауҙары менән
3. Исем ҡылымдар нимәләр менән үҙгәрәләр?
а) заман, зат, килеш, һан менән
б) һан, эйәлек заты, килеш, барлыҡ-юҡлыҡ менән;
в) зат, заман, һөйкәлештәр менән.
4. Исем ҡылымдар һөйләмдең ниндәй киҫәге булып йөрөй?
а) эйә менән хәбәр булып;
б) эйәрсән киҫәктәр булып
в) бөтә киҫәктәре лә булып.
5.Ҡайһы юлда исем ҡылымдар яҙылған?
а) барырға, ятырға, йөрөргә, эшләргә;
б) барыу, ятыу, йөрөү, эшләү;
в) барған, ятҡан, йөрөгән, эшләгән.
3.Тестарҙы алмаштырышып бер-береһенең эшен тикшереү.

| Баһалау | Дөрөҫ яуаптар: |
|---|---|
| 0 – 5 | 1.а 2. в 3.б 4.в 5.б |
| 1 – 4 | |
| 3 – 3 | |

IV. Яңы тема өҫтөндә эш.
1) Кроссворд аша теманы асыҡлау. Һеҙгә кроссворд бирелә. Ошо кроссвордты дөрөҫ сисһәгеҙ, бөгөнгө дәрестең темаһын белербеҙ. Бының өсөн ошо һорауҙарға яуап бирергә кәрәк.
1. Һине аңлаусы, һәр саҡ һиңә ярҙам итеүсе кеше? (дуҫ)
2. Дуҫ ҡыҙ? (әхирәт)
3. Бер йәштәге балалар? (тиңдәш)
4. Бер класта уҡыусы ҡыҙ йә егет? (класташ)
5. Беҙ өйрәнгән һүҙ төркөмө? (ҡылым)
Һығымта: Бөгөнгө тема ҡыҙыл шаҡмаҡтар эсендә яҙылған: («Уртаҡ ҡылым»)
2) Дәрес маҡсаты менән таныштырыу.
а) дәфтәрҙәргә число, тема яҙабыҙ.
б) Бөгөнгө дәрестә беҙ уртаҡ ҡылымдар менән, уларҙың мәғәнәһе, яһалышы менән танышырбыҙ, уларҙы һөйләмдәрҙән табырға өйрәнербеҙ һәм кешеләр араһындағы иң изге мөнәсәбәт – дуҫлыҡ, дуҫтар тураһында һөйләшербеҙ.
Бергәләп уҡытыу:
*«Донъя тигәнең үҙеңә дуҫтар табырға, дуҫ менән дуҫты ла айыра белергә үҙенән-үҙе өйрәтә.*

Ғ.Хөсәйенов.

– Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, башҡорт әҙәбиәтенең аҡһаҡалы Ғайса Хөсәйеновтың һүҙҙәре беҙҙе нимәгә өндәй?
Һәр кем үҙенә дуҫтар табырға тейеш.
4. Теманы аңлатыу.
а) Ошо һүҙҙәрҙән ҡылымдарҙы таптырыу.

б) Табырға, белергә һүҙе нимәне аңлата? Дуҫты табырға кәрәклекте, белергә тейешлекте, өндәүҙе, маҡсатты йәки эшләүҙән тыйылыуҙы белдерә.

Бындай һүҙҙәр уртаҡ ҡылымдар тип атала. Улар затта, һанда үҙгәрмәй торған ҡылым төркөмсәләре. Уртаҡ ҡылымдарҙы таблицала ошолай күрһәтергә мөмкин.

| | | | |
|---|---|---|---|
| Уртаҡ ҡылым | -ырға/-ергә<br>-рға/-рғә<br>-орға/-өргә | -маҫҡа<br>-мәҫкә | тейеш<br>кәрәк<br>мөмкин |

в) Ошо таблицаны ҡулланып үҙегеҙ ҡағиҙә сығарып ҡарағыҙ әле.

Уртаҡ ҡылымдар барлыҡта –ырға/-ергә, -орға/-өргә, -рға/-рғә ялғауҙарына тамамлана, юҡлыҡта –маҫҡа/-мәҫкә. Ни эшләргә? һорауына яуап була.

г) Дәреслектән ҡағиҙәне уҡытыу.

д) Кем ул дуҫ? Дуҫтар ни өсөн кәрәк?

Ошо һорауҙарға яуап алыр өсөн дәреслектәребеҙгә күҙ һалайыҡ.

5. Дәреслек менән эш. (128-се битте астырыу, 12-се күнегеү).

а) Уҡытыу, төшөп ҡалған хәрефтәрҙе асыҡлау.

б) Нимә ул дуҫлыҡ? Ул нимә эшләргә ярҙам итә? Дуҫлыҡтың ниндәй ҡағиҙәләре бар?

в) тексты абзацтарға бүлеү.

г) икенсе абзацтан ҡылымдарҙы таптырыу.

д) ниндәй ялғауҙар ярҙамында яһалғандар?

| | | |
|---|---|---|
| ирешергә | ышанырға | таянырға |
| табырға | иғтибарлы булырға | ала белергә |
| еңеп сығырға | ҡыҙыҡһынырға | булырға |
| эшләргә | белергә | ҡалмаҫҡа |
| итергә | ярҙам итергә | ҡотолорға |
| таянырға кәрәк | | ярҙам итергә |
| йәшәргә | | |

е) Дәфтәргә уртаҡ ҡылымдарҙы яҙып алыу.

ж) Телдән юҡлыҡта әйттереү.

Һығымта:

Шулай итеп, уртаҡ ҡылымдар юҡлыҡ менән үҙгәрәләр.

2. 213-сө күнегеүҙе эшләү.

а) “Уҡырға булдым” һүҙбәйләнешен 2-уҡыусы таҡтала барлыҡта, юҡлыҡта үҙгәртә.

| **Барлыҡта (берлектә)** | **Юҡлыҡта** |
|---|---|
| уҡырға булдым | уҡымаҫҡа булдым |
| уҡырға булдың | уҡымаҫҡа булдың |
| уҡырға булды | уҡымаҫҡа булды |

**Күплектә**

| | |
|---|---|
| уҡырға булдыҡ | уҡымаҫҡа булдыҡ |
| уҡырға булдығыҙ | уҡымаҫҡа булдығыҙ |
| уҡырға булдылар | уҡымаҫҡа булдылар |

б) Көлөргә һүҙен телдән үҙгәрттереү.
в) Һығымта:
Уртаҡ ҡылымдар затта үҙгәрҙеме? (юҡ)
Шулай итеп, уртаҡ ҡылымдар затта үҙгәрмәйҙәр, ярҙамсы һүҙҙәр генә үҙгәрә.
6. Рәттәргә бүлеп эш биреү.
а) Нигеҙ ҡылымға ялғау өҫтәп яҙырға.

| I | II | III |
|---|---|---|
| эшлә | бир | шатлан |
| уйна | бейе | бүлеш |
| ышан | һаҡла | уҡы |
| таян | көл | өйрән |
| ҡыҙыҡһын | ҡыуан | аңла |

б) Был ҡылымдарҙы кемдәргә ҡарата ҡулланып була?
(дуҫтарға, иптәштәргә)
в) Кемдәр менән бергә эшләргә мөмкин?
г) Ә һеҙ дуҫтарығыҙ менән бергә ниндәй эштәр эшләйһегеҙ?
д) Һығымта: Эйе, дуҫтар менән шатлыҡ-ҡайғыны ла бүлешергә, ауыр саҡта уларға таянырға ла мөмкин.
7. Ял минуты
Беҙ торабыҙ бейергә,
Таянабыҙ бөйөргә.
Тыпыр-тыпыр баҫырға,
Күңелдәрҙе асырға.
8. Ижади эш.

*Беҙ Илшат дуҫым менән башҡорт теле түңәрәгенә йөрөргә булдыҡ. Унда башҡорт теленең тарихы, мәҙәниәте тураһында китаптар менән танышырға, иншалар яҙырға өйрәтәләр.*

*Ай һайын бер төркөм "Әй, матур тел" тигән стена гәзите сығарырға тейеш. Үҙебеҙ шиғыр-хикәйәләр яҙырға, уларҙы баҫтырып сығарырға тырышабыҙ. Гәзитте сығарыуға башҡорт теле түңәрәгенә йөрөүселәрҙең барыһы ла ҡатнаша.*

(Уҡытыусы уҡыу барышында уҡыусылар уртаҡ ҡылымдарҙы яҙа баралар. Бер уҡыусы уҡый, ҡалғандары урындан тикшерә.)

Йөрөргә булдыҡ, танышырға, яҙырға, сығарырға, ижад итергә
9. Мәҡәлдәр менән эш.
Уҡытыусы: Дуҫлыҡ – киң төшөнсә.Ул кемдәр араһында булырға мөмкин?

Яуап. Ул кешеләр араһында ла, халыҡтар араһында ла, хайуандар араһында ла була. Дуҫлыҡ тураһында шағирҙарыбыҙ бик күп шиғырҙар, әҫәрҙәр ижад иткән. Халыҡ үҙ фекерен мәҡәлдәрҙә сағылдырған.
Уҡыусылар: Ә һеҙ дуҫлыҡ тураһында ниндәй мәҡәлдәр беләһегеҙ?

*Дуҫы күпте яу алмай. Йөҙ һум аҡсаң булғансы,йөҙ дуҫың булһын. Дуҫ булһаң, дуҫ ҡәҙерен онотма.*

10. Һүрәттәр менән эш.
А. Картинаны ҡарау.
Ниндәй миҙгел һүрәтләнгән?
Б. Һүрәткә ҡарап һөйләмдәр төҙөтөү.
В. Картинаға ҡарап шиғыр юлдарын тултырып яҙыу.

*Көн дә өйҙә эш бөткәс,*
*Киләбеҙ беҙ ………….*
*Саңғы менән елдәрҙе,*
*Ҡоштай осоп ……….*

Был шиғыр юлдарында ла уртаҡ ҡылымға миҫалдар бар.
Әйҙәгеҙ, табайыҡ. Шыуырға,ҡыуырға.

1. Йомаҡ-хикәйә уҡыу, яуабын асыҡлау.

*Рәшит көнө буйына сәкән һуҡты, өйөнә ҡайтҡас һөйләшә торған тутыйғошо менән булашты. Ә иртәгеһенә «ике» билдәһе алып ҡайтты. Өйҙә уны тутыйғошо: «Ашарға! Уйнарға!» – тип ҡаршы алды. Рәшиттән әсәһе : «Ни өсөн «ике» алып ҡайттың?» – тип һораны. Рәшит яуап биргәс, ул: «Эй улым, улым! Ана тутыйғошоң да белә бит уны!» – тине.*

Рәшит дәрестә нимәне белмәгән?
Был һүҙҙәр текста йәшеренгән. Кем иғтибарлы, ул табыр. Йәгеҙ, эҙләп ҡарайыҡ әле.
12. Йомғаҡлау. Рефлексия.
а). Дәрес аҙағына яҡынлашты. Нимәләргә өйрәндек икән?
Бының өсөн бер-берегеҙгә һорауҙар биреп ҡарағыҙ.
– Ниндәй ҡылымдар уртаҡ ҡылымдар тип йөрөтөлө?
– Уртаҡ ҡылымдар ниндәй мәғәнәләрҙе белдерәләр?
– Уртаҡ ҡылымдар нимә менән үҙгәрәләр?
– Уртаҡ ҡылымдар нисек яһалалар?
– Уртаҡ ҡылымдарға миҫалдар килтерегеҙ.
Шулай итеп, һығымта яһайыҡ.

-  Зат, һан менән үҙгәрмәйҙәр.
-  Улар нигеҙ ҡылымға –ырға/ергә, орға/өргә, –рға/ ргә ялғауҙары ҡушылыу менән яһала.
-  Һөйләмдә кәрәклек, мөмкинлек, тейешлек, маҡсат, бойороу мәғәнәләрен белдерә.

Б. Нимә ул дуҫлыҡ?
Дәрестә уртаҡ ҡылымдан башҡа тағы ла нимәләр тураһында һөйләштек?
Нимә ул дуҫлыҡ?

Эйе, балалар. Беҙ бөгөн дәрестә дуҫтар, дуҫлыҡ тураһында һөйләштек. Дәрестә әйтелгән дуҫлыҡҡа ҡағылышлы сифаттарҙы тәрбиәләргә тырышығыҙ, яңы дуҫтар булдырығыҙ. Бар дуҫлығығыҙҙы, дуҫтарығыҙҙы һаҡлағыҙ.

13. Баһалау.

14. Өйгә эш. Уртаҡ ҡылымдарҙы ҡулланып «Минең дуҫым» темаһына инша яҙырға.

***Муллагәлиева Л. Р.,***
*Борай ауылының 2-се һанлы гимназияһы*

## М остай Кәримдең "Үлмәҫбай" поэмаһы (I бүлек). Ике һәм бер составлы һөйләмдәр

**Маҡсаттар:**

- М.Кәримдең биографияһын, үтелгән әҫәрҙәрен хәтергә төшөрөү, "Үлмәҫбай" поэмаһының I бүлеген өйрәнеү. Бер һәм ике составлы һөйләмдәр тураһында төшөнсә биреү.
- Образға ҡылыҡһырлама биреү, бер һәм ике составлы һөйләмдәрҙе айыра, телмәрҙә ҡуллана белеү һәләттәрен үҫтереү. Бөтә төр универсаль уҡыу эшмәкәрлектәрен үҫтереү.
- Туған телгә һөйөү тәрбиәләү. Илебеҙҙе һаҡлап, дәһшәтле һуғышта еңеп сыҡҡан батырҙарға ихтирам, хөрмәтләү хистәре тәрбиәләү.

**Йыһаз:** Мультимедиа проекторы, интернет селтәренә тоташҡан компьютер, (уҡытыусы сайты, скайп менән эш).

### *Дәрес барышы*

**I. Ойоштороу мәле**

-Һаумыһығыҙ! Хәйерле иртә теләп, бер-беребеҙгә ҡарап йылмайып, дәресебеҙҙә ижади уңыштар теләйек.

**II. Маҡсат һәм бурыстар билдәләү, мотивация тыуҙырыу**

Алдарығыҙға иғтибар менән ҡараһағыҙ, унда башҡорт орнаменты төшкән ҡағыҙҙар күрерһегеҙ. Уларҙы һеҙгә ошо серле һандыҡ килтергән. Дәрес буйына әле ул һеҙгә үҙенең хикмәттәрен, серҙәрен күрһәтәсәк.

Бына уларҙың тағы ла береһе - хат. Мин һеҙгә уҡыйым, кем йәки нимә тураһында һүҙ барғанын аңлаһағыҙ, ҡулығыҙҙы күтәреп яуап бирерһегеҙ.

"Фронтҡа китәм, иптәштәр", тип,
Ижадын ташламаған,
Ҡурҡыныс һуғыш ҡырында
Шиғырҙар ижад иткән.

Ҡаты итеп яраланып,
Госпиталгә эләккән.

"Өсөнсө көн һыҙлай был ярам", - тип,
Шиғыр яҙған хаста сағында.

Иҫән сыҡкан утлы һуғыш юлын,
Һыҙлаһа ла тәрән яраһы.
Иле өсөн, башҡорт халҡы өсөн
Хоҙай һаҡлағандыр күрәһең.

Урыҫтағы Пушкин, Толстой кеүек,
Ҡырғыҙҙағы Сыңғыҙ Айтматов,
Татарҙағы Туҡай, Таҡташ, Йәлил,

**Мостай Кәрим** - беҙҙең ғорурлыҡ.

•Кем тураһында һүҙ бара?

•Тимәк, беҙ бөгөн кемдең ижадын өйрәнәсәкбеҙ?

•Эйе, дөрөҫ, Башҡортостандың халыҡ шағиры М.Кәримдең ижадын. Һеҙгә шағирҙың тағы ла бер шиғырынан өҙөк уҡып ишеттерәм. Ошо шиғыр буйынса бөгөн ниндәй темаға һүҙ алып барыуыбыҙ асыҡланасаҡ.

Атасаҡ таң, киләсәк яҙ өсөн,
Яҙын япраҡланыр гөл өсөн,
Тыуыр балам, йырланыр йыр өсөн,
Йыр өсөн һәм тыуған ер өсөн-
Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!

•Дәрестә һүҙ нимә тураһында барасаҡ?

**II. Әҙәбиәттән белемде актуалләштереү, яңы тема менән үтелгән тема араһында бәйләнеш булдырыу**

1) М.Кәрим, уның ижады тураһында түбән кластарҙа үтелгәндәрҙән нимәләр әйтә алаһығыҙ? Ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ?

Бөтә был мәғлүмәттәрҙе йомғаҡлап, М.Кәримдең тормош, ижад юлы буйынса үҙенең проект эше менән уҡыусы сығыш яһай (алдан эш бирелгән).

*Уҡытыусының йомғаҡлауы.* Башҡортостандың халыҡ шағиры М.Кәрим әҙәбиәттең барлыҡ жанрҙарында ла ижад иткән: шиғриәттә, прозала һәм драматургияла.

2) Бөгөн М.Кәримдең "Үлмәҫбай" поэмаһының I бүлеге менән танышасаҡбыҙ.

Дәфтәрҙәрҙе астыҡ, число, теманы яҙып ҡуябыҙ.

•Беҙҙең алда ниндәй маҡсаттар тора?

•Нимә һуң ул поэма?

**III. Проблемалы ситуация тыуҙырыу**

**1)** Поэманың исеменән үк кем тураһында һүҙ барғанын әйтә алаһығыҙмы?

• Поэманың I бүлеге менән танышайыҡ. Ысынлап та шулаймы икәнен асыҡларбыҙ. Дәреслектең 125-се битен астыҡ. Уҡыу барышында ошондай

һорауҙарға яуап уйларға кәрәк. Поэмала кем тураһында һүҙ бара? Кем ул Үлмәҫбай? Уға ниндәй сифаттар хас? Ни өсөн автор геройға Тимеркәй түгел, Дамир түгел, ә Үлмәҫбай, тип исем биргән? Ошо һорауҙарға яуап биргәндә, әйткәндәрегеҙҙе иҫбатлап, дәлилләп барырға кәрәк. (Мәҫәлән: уңған, уңғанлығы уның ҡайҙарҙа күренә?)

**IV. Яңы белемде тәүге тапкыр үҙләштереү**

***1)Уҡытыусы уҡыуы, уҡыусыларҙың I бүлекте үҙ аллы уҡыуы, уҡыусыларҙан уҡытыу.***

**2)** ***Әҙәбиәттән яңы теманы үҙләштереү буйынса тәүге тапҡыр эшмәкәрлек.***

Һорауҙарға яуап биреү
-Кем ул Үлмәҫбай?
-Уға ниндәй сифаттар хас?

- •Батыр (ҡыйыу, ҡурҡыу белмәҫ, ҡуш йөрәкле…)
- •Етеҙ (шәпле, тиҙ…)
- •Хәйләкәр (тапҡыр,..)
- •Төплө
- •Йор телле

- Ни өсөн автор геройға Үлмәҫбай тип исем биргән?
- Был образ ниндәй? (йыйылма образ)

- Еңеү көнөн тап беҙ уҡыған Үлмәҫбайҙар килтергән дә инде. Күп ҡорбандар, күп көс түгеп яулаған улар беҙгә был Еңеүҙе. Ил буйынса улар бер, ике, өс түгел, йөҙләгән, меңләгән, миллионлаған булғандар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың һаны йылдан-йыл кәмей. Ләкин улар бар әле беҙҙең арабыҙҙа.

- Беҙ улар алдында мәңгелек бурыслы. Бөгөн беҙ уларға нисек ярҙам итә алабыҙ?

- Ҡулыбыҙҙан килгән ярҙам: байрамдар менә ҡотлау, ярҙам күрһәтеү, хәлдәрен белеп тороу. Аҙ ғына булһа ла күңел, йөрәк йылыһы менән уртаҡлашыу.

***3) Метапредмет бәйләнеш тыуҙырыу***

Уҡыусылар, рус әҙәбиәтендә лә тап ошондай ҡурҡыу белмәҫ, етеҙ, йор телле һалдат тураһындағы поэма бар. Ул да булһа Александр Твардовскийҙың “Василий Теркин” поэмаһы. Мин һеҙгә ошо поэманан тап “Үлмәҫбай” поэмаһының беҙ уҡыған өлөшөнә оҡшаған урынынан уҡып күрһәтәм.

Бьется Теркин,
В драке зоркий,
Утирает кровь и пот.
Изнемог, убился Теркин,
Но и враг уже не тот.

В самый жар вступает драка.

Немец горд.
И Теркин горд.
Раз ты черт,
Так сам я - черт!

Ты не знал мою натуру,
А натура - первый сорт.

Кто одной боится смерти -
Кто плевал на сто смертей.
Пусть ты черт. Да наши черти
Всех чертей
В сто раз чертей.

Бей, не милуй. Зубы стисну,
А убьешь, так и потом
На тебе, как клещ, повисну,
Мертвый буду на живом.

Ах, ты вон как! Драться каской?
Ну не подлый ли народ!

- Шундай итеп тасуирланған был образ. Һуғыш тынып торған арала гармунын тартып ебәрә, бөтә һалдаттар уның эргәһенә йыйыла.

**V. *Ял итеү минуты***

- Беҙ ҙә унан ҡалышмайыҡ. Матур дәртле башҡорт көйөнә бейеп ял итеп алайыҡ. Арағыҙҙа бейеүселәр күпме? Бынан һуң тағы ла артып китер, тип ышанам.

(Хәрәкәттәр күрһәтеү)

**VI. *Башҡорт теле һәм әҙәбиәте темалары араһында бәйләнеш тыуҙырыу.***

-Поэманы тәрәнерәк өйрәнәйек әле. Дәреслектәрҙең 126-сы битен астыҡ. Мин һеҙгә текстағы ошо һөйләмдәрҙе яҙып алдым (таҡтала). Улар ябаймы, ҡушмамы?

Һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ, грамматик нигеҙҙәренең аҫтарына һыҙығыҙ. (Таҡтала бер уҡыусы эшләй.) Нимә ул грамматик нигеҙ?

- Яҡшы.

- Күркәләнеп сығып киттем.
- Штабҡа илтәләр.
- Яуапты тапҡыр ҡайтарам.
- Бына күрәһеңме быны?

(Һөйләмдәр презентацияла)

- Хәҙер был һөйләмдәргә иғтибар итәбеҙ. Уларҙың да грамматик нигеҙен табайыҡ.

- Мин күркәләнеп сыҡтым.
- Һалдаттар штабҡа илтәләр.
- Мин яуапты тапҡыр ҡайтарам.
- Бына һин күрәһеңме быны?

**VII. *Яңы теманы билдәләү***

Ошо ике төркөм һөйләмдәр бер-береһенән нимә менән айырылалар?

- Беренсе төркөм һөйләмдәр бер составлы, унда тик эйә составы ғына күрһәтелгән. Икенсе төркөм һөйләмдәр ике составлы, унда эйә составы ла, хәбәр составы ла белдерелгән.

-Уларҙы нисек атап була?

- Бер составлы.

- Ике составлы.

- Тимәк, башҡорт теленән тема нисек яңғыраясаҡ? Дәфтәрҙәргә яҙып ҡуйҙыҡ. Алға ниндәй маҡсаттар ҡуябыҙ?

**VIII. *Башҡорт теленән яңы теманы тәүге тапкыр үҙләштереү***

1) *Бер составлы һөйләмдәрҙән генә торған текст менән таныштырыу*

Мин һеҙҙең иғтибарығыҙға текст тәкдим итәм.

(Слайд)

*Еңеү көнө*

*9 Май. Совет һалдаттары Берлинда. Рейхстагта Еңеү байрағы. Шатлыҡ ҡатыш күҙ йәштәре. Аллы-гөллө сәскәләр. Дәртле йыр-моң. Көтөп алған Еңеү көнө.*

- Һөйләмдәрҙе ҡарайыҡ әле: ҡайһы баш киҫәк составы ғына бар бында.

- Оҡшанымы һеҙгә был текст? Уҡыусылар, был кескенә текста нимә тураһында һүҙ бара? Бына ошонда күренә инде бер составлы һөйләмдәрҙең телмәрҙәге роле. Уларҙың тәьҫир итеү көсө ныҡ. Сөнки баҫым иң кәрәкле һүҙҙәргә генә төшә.

2) ***Төркөмдәрҙә эшләү***

- Мин һеҙгә тик бер составлы һөйләмдәрҙән генә торған текст төҙөргә тәҡдим итәм. Эште өс төркөмгә бүленеп башҡарабыҙ. Беренсе төркөм - “Һуғыш”, икенсеһе – “1941-се йылдың яҙы”, өсөнсөһө “Еңеү көнө” темаларына текст яҙа.

**IX. *Яңы белемде үҙләштереү кимәлен билдәләү.***

*1) Уҡытыусы сайтындағы тестарҙы эшләү*

Яҡшы, беҙ һеҙҙең менән “Үлмәҫбай” поэмаһының I бүлеген уҡыныҡ, “Ике һәм бер составлы һөйләмдәр” темаһын үттек. Темаларҙы ни кимәлдә үҙләштереүегеҙҙе белер өсөн, сайтымдағы ошо тесты эшләп алайыҡ. Һәр кем үҙ аллы эшләй, аҙаҡтан парҙар менән алышып тикшерәбеҙ.

**X.** ***Рефлексия***

-Дәрестә ҡайһы эш төрҙәрен башҡарыуы һеҙгә уңайлы булды, ҡайһылары ҡатмарлы тойолдо?

Алдығыҙҙағы башҡорт орнаменты төшөрөлгән ҡағыҙҙар менән билдәләй барырһығыҙ. Эшмәкәрлегегеҙ еңел барһа - түңәрәген, был эш төрө ҡыйынлыҡтар тыуҙырһа - дүрт мөйөшлөһөн һәм ҙур ауырлыҡтар тыуҙырһа, өс мөйөшлөһөн күтәрәһегеҙ.

•“Үлмәçбай” поэмаһы өçтөндә эшләү (уҡыуығыҙ, һорауҙарға яуаптарығыҙ, рус телендәге поэма менән танышыу)

•Ял минуты

•Башҡорт теленән тема үтеү (һөйләмдәрҙең грамматик нигеҙен билдәләү)

•Төркөмдәрҙә эшләү – текстар төҙөү

•Тест эшләү

**XI. Өй эше биреү, инструктаж**

Өс төрлө кимәлдәге өй эше тәҡдим ителә:

•Үлмәçбайҙың һүрәтен төшөрөргә, шәхси сайтымдағы онлайн-тестар бүлегендәге һылтанма буйынса тестар эшләргә.

•Үлмәçбайға телдән ҡылыҡһырлама бирергә, шәхси сайтымдағы онлайн-тестар бүлегендәге һылтанма буйынса тестар эшләргә.

•Бер составлы һөйләмдәрҙән Үлмәçбай тураһында хикәйә төҙөргә, шәхси сайтымдағы онлайн-тестар бүлегендәге һылтанма буйынса тестар эшләргә.

-Ҡатнашыуығыҙ, активлығығыҙ өсөн рәхмәт.

***Рәжәпова Н.Ә.,***

Ишембай ҡалаһының

1-се һанлы гимназияһы

# ҠЫШЛАУСЫ ҠОШТАР. ҠЫЛЫМДЫҢ БАРЛЫҠ ҺӘМ ЮҠЛЫҠ ФОРМАЛАРЫ

*( 6-сы класта яңы материалды өйрәнеү дәресе)*

**Маҡсат:**

1) ҡылымдың юҡлыҡ формаларының яһалыу юлдарын өйрәнеү;

2) яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү, уҡыусыларҙың бәйләнешле яҙма һәм һөйләү телмәрен үҫтереү;

3) ҡоштарға ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** карточкалар, дәреслек, проектор.

**Дәрес барышы:**

**1. Ойоштороу моменты.**

– Хәйерле көн теләп, ҡаршылайыҡ
Тыуыр таңды, килер көндәрҙе.
Именлектәр менән йәшәйек,
Гүзәллеккә күмеп тыуған ерҙе.
– Һаумыһығыҙ, уҡыусылар!
– Кәйефтәрегеҙ нисек?
– Ҡояшлы иртә кеүек!
Башҡорт телен, дәүләт телен
Өйрәнергә тип килдек!

- Яҡшы теләктәрегеҙ өсөн рәхмәт, уҡыусылар. Ошо матур кәйеф менән дәресебеҙҙе башлайбыҙ. Дәрестә бал ҡорттарылай эшсән булығыҙ, сәсән булмаһағыҙ ҙа – телле булығыҙ. Бөтәгеҙгә лә ижади эш сәғәте теләйем.

**2.Психологик минутлыҡ**. Уҡыусылар уҡытыусы артынан ҡабатлайҙар.
Хәйерле иртә, күҙҙәр,
Һеҙ уяндығыҙмы? (күҙ һүрәте слайды)
Хәйерле иртә, ҡулдар,
Һеҙ уяндығыҙмы? (ҡул һүрәте слайды)
Хәйерле иртә, аяҡтар,
Һеҙ уяндығыҙмы? (аяҡ һүрәте слайды)

Хәйерле иртә, ҡояш,
Мин уяндым! (ҡояш һүрәте слайды)

- Ҡулдар менән ҡояшҡа ынтылабыҙ. Беҙ эшләү өсөн ҡояштан көс, дәрт алабыҙ. Ә хәҙер бер-беребеҙгә ҡарап йылмаяйыҡ, уңыштар, хәйерле көн теләйек.

1) **Артикуляцион күнегеү**.

а) хәрефтәрҙе ҡабатлау.
Ҡа-ҡә, ҡо- ҡө
Ға –ғә, ҡо –ғө
Һа – һә – һо –һө
Ҙа – ҙә –ҙо –ҙө.
б) Бөгөн нисәнсе число?
Һауа торошо ниндәй?

**3.Мотивация.**

– Уҡыусылар, мин һеҙгә йомаҡ әйтәм, һеҙ уларҙың яуаптарын әйтерһегеҙ.
**1.** Бар белгәне ҡар ҙа ҡар
Бер туҡтауһыҙ ҡар даулар.
Ниндәй ҡош мохтаж ҡарға?
Ни булһын инде……..( ҡарға). ( Ҡарға һүрәте )
**2.** Көнө буйы туҡ та туҡ,
Ағастан ҡорт табып туҡ.
Ағасты йырған ҡортҡа
Иң ҙур дошман – …….( тумыртҡа). **(** Тумыртҡа һүрәте )
**3**. Ҡайһы район һауала оса? (Күгәрсен**).** ( Күгәрсен һүрәте )
**4.** Көндөҙ йоҡлай, төндә илай. (өкө).(Өкө һүрәте )

**4.Дәрестең маҡсатын, йөкмәткеһен билдәләү. Актуалләштереү**

– Шулай итеп, уҡыусылар, бөгөнгө дәрестең темаһы ниндәй булды? (Ҡоштар тураһында)

– Ҡышларға ҡалған ҡоштарҙы нисек атайҙар? (ҡышлаусы)
– Һеҙ ниндәй ҡышлаусы ҡоштарҙы беләһегеҙ? (уҡыусыларҙың яуабы) Һүрәттәр теҙеү.
– Ә хәҙер бөгөнгө дәрестең яңы һүҙҙәре менән танышып үтәйек.

**Һүҙлектәр менән эш. ( һүҙҙәрҙе таҡтаға яҙырға).**
**Һүҙлек эше.**

Ҡышлаусы ҡоштар –зимующие птицы
Ярҙамға мохтаж – нуждается в помощи
Икмәк валсығы – крошка хлеба
Ҡыҙылтүш – снегирь
Тумыртҡа – дятел
Турғай – воробей
Күгәрсен – голубь

Ҡарабаш турғай – синица
Өкө – сова
Һайыҫҡан – сорока.
**Һүҙҙәрҙе тикшереү (слайдтағы һүҙҙәр менән)**
Һүҙҙәрҙе уҡыу, хор менән уҡыу. Бер-ике баланан уҡытыу (бер уҡыусы ҡош исемдәрен – русса, икенсеһе – башҡортса уҡый).
Һүҙҙәрҙе һүҙлектәргә яҙыу**.**
**(Ҡош тауыштарын тыңлау, ҡоштарҙы таныу.)**
***Һүрәттәр (слайд) буйынса ҡош исемдәрен әйтеү.***
**5. Ғәмәли эштәр**. Әңгәмә.

- Ҡышлаусы ҡоштарға ҡыш көнө бик ауыр. Ә ни өсөн уларға ауыр?

( һыуыҡ, аҙыҡ табыуы ауырлаша).

- Һеҙ ҡоштарға ярҙам итәһегеҙме? (ем, икмәк валсығы, көнбағыш, сало бирергә, тағараҡтар элергә).

**Дәреслек буйынса эшләргә** (70- се бит, 186- сы күнегеү)
Тексты уҡытыусы уҡый.
Сылбырлап уҡыу.
Тәржемә итеү.
----Һорауҙарға яуаптар биреү.

1) Башҡортостанда нисә төр ҡош йәшәй?
**2)** Ҡоштарға нимә эшләргә кәрәк? (тағараҡ һүрәте )
3) Иң мөһиме нимә һалырға кәрәк? (ем, икмәк һүрәте )

2. **Проект эше** (уҡыусылар ҡоштар тураһында мәғлүмәттәрҙе алдан әҙерләп килтерәләр).

**Уҡыусылар үҙ проекттарын яҡлайҙар (сығыш яһау).**
**Ял минуты.**

Ҡоштарҙы һаҡлағыҙ! Ҡыш килһә, асыға, (атлайҙар)
Бойоға күгәрсен (сүгәләйҙәр).
Турғай ҙа елкенеп, (ҡул болғайҙар)
Ем эҙләй күрәһең.
Уларға шаярып,
Атмағыҙ йәйәнән! (бармаҡ янайҙар)
Һаҡлағыҙ уларҙы
Үлемдән, бәләнән!

– Ял итеп алдыҡ. Ә хәҙер эшкә күсәбеҙ. Иғтибар менән таҡтаға ҡарайбыҙ. Бирелгән һүрәттәрҙә һеҙ ниндәй айырмалы яҡтарын күрәһегеҙ?








– Бөгөн, уҡыусылар, ҡылымдың **юҡлыҡ формаһына** туҡталып үтәбеҙ.
– Нимә ул ҡылым? ( глагол).
– Һорауҙары?( ни эшләй?)
– Нимәне белдерә?( предметтың эш-хәрәкәтен).

Ҡылымдың юҡлыҡ формаһы (отрицательная форма). **Слайд.**

-ма,- мә. Мәҫәлән: уҡы – уҡыма, кил – килмә.

– Ҡайһы ваҡытта -ма, -мә ялғауы ҡушыла?(Әгәр ҙә һүҙҙең тамырында ҡалын һуҙынҡы булһа, юҡлыҡ формаһына ла ҡалын ялғау ҡушыла. Әгәр һүҙҙең тамырында нәҙек һуҙынҡы булһа, юҡлыҡ фораһында ла нәҙек була).

– Ә урыҫ телендә ҡылымдың юҡлыҡ формаһы нисек белдерелә?

**7. Теманы нығытыу.** Карточка менән эш. (Бирелгән ҡылымдарҙы юҡлыҡ формаһында үҙгәрергә).

1**.** Числоны яҙыу.

2. Класс эше**.**

3. Күнегеүҙе үтәү (1 -2 баланан таҡтала эшләтеү).

Эштәрҙе тикшереү (бирелгән ҡылымдар (юҡлыҡ формаһында) менән һөйләмдәр төҙөргә)

**8. Уйын – ярыш** (класс 2 төркөмгә бүленә)

1-се төркөм йылы яҡҡа китеүсе, 2-се төркөм ҡышлаусы ҡоштарҙың исемдәрен ағастарға элеп сыға (еңеүсе билдәләнә).

Һығымта: йылы яҡҡа китеүсе, ҡышлаусы ҡоштар тураһында ҡабатлау.

Ниндәй генә ҡош булмаһын, улар беҙгә бик күп файҙа килтерә. Ҡоштар игенгә, емеш-еләккә, йәшелсәгә, ағастарға зарар килтерә торған ҡорттарҙы, бөжәктәрҙе ашай.

**9. Йомғаҡлау. Рефлексия.**

– Шулай итеп, бөгөнгө дәрестә нимә тураһында һүҙ алып барҙыҡ?
(Ҡышлаусы ҡоштар, уларҙың нисә төрө барлығы, ҡылымдың барлыҡ һәм юҡлыҡ формалары тураһында һөйләштек).

–Ҡышын ҡоштар өсөн иң ҡурҡынысы нимә? Ни өсөн ҡоштарҙы һаҡлау кәрәк? (слайд)

– Ҡоштар – беҙҙең дуҫтар. Уларҙы һаҡлағыҙ, ҡыш көнө тағараҡтар элеп, көн һайын ем һалырға онотмағыҙ! Ҡоштар – тәбиғәттең бер өлөшө. Ә тәбиғәтте һаҡлау – үҙ-үҙеңде яҡлау ул. Тәбиғәт – ул беҙҙең киләсәгебеҙ!

– Бөгөнгө дәрестән беҙ ниндәй һығымта яһайбыҙ? (ҡоштарҙы рәнйетмәҫкә, тағараҡтар элергә, тәбиғәтте һаҡларға)

**10. Өй эше** (Һүҙҙәрҙе ятлау, ҡоштар тураһында һынамыштар яҙып килтерергә).

**11. Йомғаҡлау. Баһалау** (Баһалау ҡағыҙын һәр береһенә таратып бирергә, үҙ-үҙҙәрен баһалайҙар.)

**Әҙәбиәт:**

1. Усманова М. Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 6-сы класс уҡыусылары өсөн дәреслек. – 2-се баҫма. – Өфө: Китап, 2006. –Һүрәттәре менән 176 бит.
2. Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө: Китап, 2009.
3. Әбүбәкирова З.Ф., Әүбәкиров Х.Е., Дилмөхәмәтов М.И. Мин башҡортса уҡыйым. – Өфө: Китап, 2007.
4. Башҡорт теле таблицаларҙа, схемаларҙа һәм ҡағиҙәләрҙә. Төҙөүсеһе Әбүбәкирова З.Ф. – Өфө, 2006.
5. Тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һанамыштар. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
6. Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр. Методик ҡулланма. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.

***Фәтҡуллина Р.М.,***

Бөрө медицина-фармацевтика колледжы

## “АТАЙ-ӘСӘЙ, ТУҒАНДАРЫМ”

## ТЕМАҺЫНА МЕТОДИК ҠУЛЛАНМА

Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәтеүҙә иң беренсе маҡсат булып һөйләшергә, аралашырға, бер-береңде аңларға өйрәтеү тора.

Телгә өйрәтеү принцибы – уҡытыу процесын һөҙөмтәле ойоштороуҙан килеп сыға торған төп талаптарҙың береһе.

“***Атай-әсәй,, туғандарым***” темаһына методик ҡулланма телгә өйрәтеүҙең 4 принцибына таянып төҙөлгән.

1. Дәрестә психологик принциптар араһынан мотивация принцибы ҙур урын алып тора. Уҡытыусы, бөтә педагогик оҫталығын биреп, башҡа милләт вәкилдәрендә телгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятырға тейеш.

2. Коммуникативлыҡ принцибы. Был принцип телде аралашыу сараһы булараҡ өйрәнеүҙә әһәмиәтле булып һанала

3. Методик принцип. Рус һәм башҡорт телдәрен сағыштырып, йәнәшә ҡуйып өйрәтеү.

4. Лингвистик принцип. Материалды ситуатив-тематик ойоштороу.

Шулай уҡ был дәрестә студенттарҙың белемен тикшереү өсөн методтарҙың төрлөлөгө, шул иҫәптән, мультимедиа, кроссворд төҙөү һ. б алдағы дәрестә үтелгән лексика һәм грамматиканы уңышлы ҡабатларға мөмкинселек бирә.

“Атай-әсәй, туғандарым” темаһына эшләнгән методик ҡулланманың маҡсаты булып, башҡорт теле уҡытыу процесын методик ҡулланмалар менән тулыландырыу һәм шулай уҡ башҡа уҡытыусылар менән тәжрибә уртаҡлашыу тора.

***Методик блок***

***Дәрестең маҡсаттары һәм бурыстары***

**Тема: Атай-әсәй, туғандарым.**

**Дәрес маҡсаттары:**

**Белем биреү:**

– һан һүҙ төркөмөн үҙләштереү,
– тема буйынса һүҙлекте өйрәнеү,
– өндәрҙе башҡортса дөрөҫ әйтергә, уҡый, яҙа белеү,
– дөрөҫ интонация менән уҡыу,
– эйәлек заты ялғауын үҙләштереү .

**Тәрбиәүи:**

– телде өйрәнеү процесында студенттарҙа туған  халҡына, теленә ихтирам тәрбиәләү, туғанлыҡ терминдарын өйрәнеү, ата-әсәйгә һөйөү, ихтирам тәрбиәләү, ғаилә традицияларын һаҡлау.

**Үҫтереүсе:**

– студенттарға һан һүҙ төркөмө тураһында белем биреү, диалектик фекер йөрөтөү күнекмәләрен үҫтереүҙе дауам итеү,
– иғтибарҙы, хәтерҙе, телмәрҙе, фекерләүҙе, ижади һәләтте үҫтереү.

**Студент эйә булырға тейеш:** уй-фекерен грамоталы, йәнле итеп һөйләй белеүгә, профессиональ терминдарҙы ҡулланыуға, материал туплай белеүгә, көндәлек матбуғат менән танышып барыуға.

**Студент белергә тейеш:** башҡорт теленең өндәрен-хәрефтәрен, һан һүҙ төркөмөн, диалог-монолог, хикәйә төҙөргә, дөрөҫ һәм тасуири уҡырға, һорарға һәм яуап бирә алырға, картиналар буйынса хикәйә төҙөргә, рәсми эш ҡағыҙҙарын яҙа белергә.

**Йыһазландырыу:**

– дәреслектәр,
– русса-башҡортса, башҡортса-русса һүҙлек.

**Дидактик материалдар:**

– таблицалар ,
– текстар.

**Әҙәбиәт:**

**1. Дәреслек:** М. Усманова., З. Солтанғолова. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған башланғыс һәм урта профессиональ белем биреү учреждениелары өсөн. – Өфө: Китап, 2008.–124 бит.

**2.** Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. Башкирско-русский разговорник. – Уфа. ГУП РБ Уфимский полиграфкомбинат, 2008. –160 с.

**2.Өҫтәлмә әҙәбиәт.**

1. Русско-башкирский словарь: В 2т. / Под редакцией З.Г.Ураксина. – Уфа: Башкирская энциклопедия, 2005.

**Предмет-ара бәйләнеш:**

– башҡорт әҙәбиәте;

– рус теле.

**Ваҡыт: 90 минут**

**Дәресте үткәреү урыны:** башҡорт теле кабинеты.

| № | Дәрес этаптары | Ваҡыт | Дәрестең йөкмәткеһе |
|---|---|---|---|
| I | Ойоштороу этабы | 2 мин | Сәләмләү. Студенттарҙы барлау. Кабинеттың һәм төркөмдөң дәрескә әҙерлектәрен тикшереү. |
| II | Яңы теманы ҡабул итергә әҙерлек, үткән материалды ҡабатлау. | 10 мин | Дәрестең темаһын билдәләү. Студенттар менән берлектә яңы материалды өйрәнеүҙең маҡсатын һәм бурыстарын асыҡлау. Яңы материалды өйрәнеүҙең практик әһәмиәтен күрһәтеү, уҡыу проблемаларын ҡуйыу. |
| III | Яңы тема өҫтөндә эшләү. | 25 мин | Яңы материалды ҡабул итеү, аңлау, дөйөмләштереү, системалаштырыу процесын ойоштороу. Ҡушымта 1. |
| IV | Яңы теманы нығытыу өсөн күнекмәләр башҡарыу. | 25 мин | Яңы белемде, күнекмәләрҙе нығытыу. Студенттарҙың төшөнсә асылын аңлауын тикшертеү. Яңы өйрәнелгән материалды практикала ҡулланыу мөмкинлеген ҡарау, һorауҙарға яуап биреү. Методик әсбап буйынса яҙма эштәр башҡарыу. Ҡушымта 2. |
| V | Күнегеүҙәрҙең | 8 мин | 33-39-се биттәр, 19-21-се, 23-27- |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | башҡарылышын тикшереү. | | се күнегеүҙәр. Өҫтәлмә эштәр . |
| VI | Йомғаҡлау. | 10 мин | Дәрескә дөйөм йомғаҡ яһау. Тема буйынса һорауҙарға яуап алыу, әңгәмә үткәреү. Ҡушымта 3. |
| VII | Өйгә эш биреү. | 5 мин | Өй эшенең нисек башҡарылыуын, ниндәй маҡсатта бирелеүен аңлатыу. |
| VIII | Баһалау. | 5 мин | Комментарийлы баһалау. |

***Практик блок***

Дәрес барышы

**I. Ойоштороу.** Дәрестең эпиграфы: “Атай менән әсәй – алтын ҡанат”.
Был алтын һүҙҙәр кемгә ҡағыла?
– Әлбиттә, донъялағы иң ғәзиз кешеләребеҙ – атай һәм әсәйҙәребеҙгә .
– Тимәк, дәрестең темаһы ла: “Минең атай-әсәйем һәм туғандарым”.

**II. Һүҙлек менән эш**. Уҡы һәм иҫеңдә ҡалдыр. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәренә иғтибар итергә.

Туғанлыҡ терминдары – Термины родства

атай – папа, отец
әсәй – мама, мать
апай – старшая сестра
ағай – старший брат
ҡусты, ҡустым– младший брат; братишка ( форма обращения, к мужчине, моложе по возрасту)
һеңле, һеңлем – младшая сестра, сестренка (форма обращения к женщине, моложе по возрасту)
атай-әсәй ( ата-әсә) – родители
ҡыҙ – девочка, девушка; дочь
ҡыҙым – дочь, дочка
ул – (улым)- сын, сынок
ейән – внук
ейәнсәр – внучка
олатай – дедушка
өләсәй –бабушка
ғаилә – семья
бәхетле – счастливо
татыу – дружно

| | |
|---|---|
| Таныш булығыҙ, был... . | Познакомьтесь,это... . |
| минең ағайым | мой старший брат |
| минең апайым | моя старшая сестра |
| минең дуҫым | мой друг |

**III. Яңы тема өҫтөндә эш.**

Һеҙҙең иғтибарға ғаилә фотоһүрәте тәҡдим ителә. Танышырға һәм һорауҙарға яуап бирергә.

**Тәржемә итергә**

Познакомьтесь, это
моя жена
мой муж
мой сын
моя дочь
моя коллега
мой сосед

Отца зовут ... .
Маму зовут ... .
Моего друга зовут .... Он холостой.
Мою сестру зовут ... . Она замужем. Ее мужа зовут... .

Дәреслектән 17-се күнегеүҙе эшләү.

Чья эта фотография?

- Это моя фотография.
- А кто это?
- Это наша семья. Вот сидят мои родители, это мой отец, а это моя мама. Рядом сидит бабушка, а это наш дедушка. Это я. Тогда меня называли Сашулей, иногда и Санек. А теперь я Александр. Слева стоит мой брат, а справа – моя сестра.

**Уңда / уң яҡта** – справа
**Һулда / һул яҡта** – слева
**Ғаилә ҙур, татыу** – семья большая, дружная
**Бөтәһе лә бәхетле** – все счастливы

Ответьте на воросы:

Кто есть на фотографии?

1) Кем они приходятся Александру?
2) У них большая семья?

**IV. Яңы теманы үҙләштереү ҡағиҙәләре һәм күнегеүҙәре .**

Обратите внимание!

| |
|---|
| В башкирском языке принадлежность может выражаться и существительными, но при этом одно из них (лицо, которому принадлежит предмет) принимает аффикс притяжательного падежа, а другое (предмет) – аффикс принадлежности 3-го лица. Например: атайҙың машинаһы – машина отца, Айнурҙың дискетаһы – дискета Айнура. |

Для образования существует во множеством числе с аффиксом принадлежности сначала основе прибавляется аффикс множественного числа, а потом присоединяется аффикс принадлежности. Например: -дуҫ -тар -ым - мои друзья, дуҫ –тар -ым – твои друзья.

19-сы күнегеү. Выполните упражнение по образцу.
Образец: – Чей этот учебник? Твой?
– Нет, не мой. Это твой учебник.
1. Чей это словарь? Твой? 2. Чьё это письмо? Твое? 3.Чья это тетрадь? Твоя? 4.Чьи эти часы? Твои? 5. Чей это зонт? Ваш? 6. Чья это шапка? Ваша? 7.Чья это газета? Ваша? 8.Чьи эти ключи? Ваши? 9. Чьи эти очки? Бабушкины? 10. Чья это ручка? Андрея? 11. Это чья тетя? Твоя? 12. Это чей родственник? Твой?

3-й способ: значение принадлежности может выражатся также и прибавлением окончаний –ныҡы /-неке, -тыҡы/ -теке, -дыҡы/ - деке, - ҙыҡы/ -ҙеке к слову, обозначающиему придмет обладания; әсәйҙеке – то, что принадлежит матери, материн; атайҙыҡы – отцово. Был сумка әсәйҙеке. – Это мамина сумка.
Данное понятие можно выразить и так: Был әсәйҙең сумкаһы. – Это мамина сумка.

**V. Диалог өҫтөндә эш.** Прочитайте. Переведите.
- Был кем?
- Был Сәлим?
- Кем ул?
- Ул беҙҙең студент.
- Ул радио тыңлаймы?
- Юҡ, ул радио тыңламай, ул компьютерҙа эшләп ултыра.
- Ә компьютер кемдеке? Сәлимдекеме?
- Юҡ, атаһыныҡы.
- Салимдең компьютеры бармы?
- Юҡ. Уның ноутбугы бар.

**VI.Ҡағыҙә менән эш.**
Эйәлек затының ялғауы – Аффиксы принадлежности множественного числа

| Притяжательные местоимения | Аффиксы принадлежности | Примеры |
|---|---|---|
| | | |

| | | |
|---|---|---|
| Беҙҙең (наш, наша, наше, у нас)<br>Һеҙҙең (ваш, ваша, ваше, у вас)<br>Уларҙың (их, у них) | - быҙ / - беҙ, - боҙ/ - бөҙ,<br>- ыбыҙ /- ебеҙ,<br>- обоҙ / - өбөҙ<br><br>- ғыҙ / - гыҙ, - гоҙ/ - гәҙ,<br>- ығыҙ / - егеҙ,<br>- оғоҙ / - әгәҙ<br><br>-ы/ - е, – о/ -ө<br>-һы/ –һе, -һо/ - һө | Эшебеҙ – наша работа<br><br>Өйөбөҙ – наш дом<br><br>Эшегеҙ – ваша работа<br>Өйөгөҙ – ваш дом<br><br>Эше – их работа<br>Өйө – их дом |

| | |
|---|---|
| Беҙҙең сәскәбеҙ бар. | – У нас есть цветок. |
| Беҙҙең өйөбөҙ ҙур. | – Наш дом большой. |
| Һеҙҙең аҡ сәскәгеҙ бармы? | – У вас есть белый цветок? |
| Һеҙҙең өйөгөҙ ҙурмы? | – Ваш дом большой? |
| Уларҙың өйө ҙур түгел. | – У них дом небольшой. |

Ҡағыҙә өҫтөндә эш.

**Һан - имя числительное**

Имена числительные отвечают на вопрос нисә? Күпме? – сколько? Нисәнсе? – каторый (какой)? Нисәшәр? – по сколько? И др.: <беҙҙең класта ун алты уҡыусы. – В нашем классе шестнадцать учебников.
В башкирском языке бывают количественные (төп), порядковые (рәт), собирательные (йыйыу), разделительные (бүлем), приблизительные (сама), дробные (кәсер) числительные.

Количественные числительные (төп һан) выражают точное количество предметов , явлений и отвечают на вопросы Нисә? Күпме? – Сколько? Они служат основой для образования всех других разрядов числительных и сложных числительных: бер икмәк – один хлеб; ун бер һум – одиннадцать рублей.

В башкирском языке, в отличие от русского, существительные употребляются с числительными только в единственном числе. Например: бала – балалар – ике бала (двое детей), ун биш бала ( пятнадцать детей) ; ручка – ручкалар – биш ручка (пять ручек).

Прочитайте словосочетания и обратите внимание на их перевод. Какой вывод можно сделать?

| | |
|---|---|
| Өс сәскә – 3 цветка | алтмыш минут – 60 минут |
| биш ручка – 5 ручек | етмеш грамм – 70 граммов |
| ун малай – 10 мальчиков | һикһән килограмм – 80 килограммов |

егерме ҡыҙ - 20 девочек туҡһан бала – 90 детей
утыҙ китап – 30 кни г йөҙ һүҙ – 100 слов
ҡырҡ тин – 40 копеек мең йыл – 1000 лет

Рәт һаны –Порядковые числительные

Нисәнсе – Который по счету?

**-нсы / нсе, - ынсы/ - енсе,- өнсө –** окончания порядковых числительных. Например: бер – беренсе, биш – бишенсе, илле – илленсе, алтмыш алтмышынсы, туҡһан дүрт – туҡһан дүртенсе.

**VII. Яҙма эш.** Прочитайте, переведите. Образуйте порядковые числительные.

Образец: бер – беренсе.

| | | |
|---|---|---|
| алты | егерме бер | илле һигеҙ |
| ун алты | егерме ике | илле туғыҙ |
| ун ете | утыҙ биш | ике йөҙ бер |
| ун туғыҙ | утыҙ өс | өс йөҙ өс |

**Дәреслек менән эш.**

25-се күнегеү. Из данных слов составьте предложения.
Сәғәт 7 ,8 , 9, 2.
иртәнге аш, дәрес, төшкө аш, саф һауа
барам, торам, йөрөйөм, ашайым.

26-сы күнегеү. 39-сы бит. Выполните упражнение по образцу и запишите. Употребите глаголы **яратырға или хөрмәт итергә.**

Образец: ... ҡусты ... ярат... .
Мин ҡустымды яратам.
Ул да мине ярата.

1. Мин әсәй... ... . 2. Мин уҡытыусыны ... ... . 3. Мин атай... ... . 4. Мин дуҫ... ... . 5. Мин коллега... ... . 6. Мин олатай менән өләсәй... ... .

27-се күнегеү. Переведите. Выполните упражнение по образцу.

Образец: – Что вы делаете вечером? ( отдыхать)
– Һеҙ кис нимә эшләйһегеҙ?
– Беҙ кискеһен ял итәбеҙ.

1. Что вы делаете вечером? ( ужинать и отдыхать) 2. А что делает вечером Андрей? ( заниматься) 3. Что он делает утром? ( работать) 4. Что вы делаете утром? ( завтракать и слушать радио) 5. Что вы делаете сейчас? ( писать письмо) 6. Что студенты делают сейчас? ( читать текст и писать упражнение) 7. Что они делают вечером? ( гулять, читать и смотреть телевизор)

***Белемдәрҙе тикшереү блогы***

**Самостоятельная работа – үҙаллы эш.**

Ответьте письменно на вопросы.
Как зовут ... ?

твоего отца
твою маму
твоего брата ( старшего)
твоего брата ( младшего)
твоего соседа

Коммуникатив  ситуация: Расскажите, кто твои родители? Где они работают? Где они живут? Есть ли у тебя брат, сестра? Дедушка, бабушка?

**VIII. Йомғаҡлау.** Кроссворд. “ Ғаилә усағы”.
Баһалау.
Өйгә эш. Расскажите о семейных традициях. 28-се күнегеү. 39-сы бит.

Ҡушымта1
Тәржемә итергә.
Познакомьтесь, это ... .
моя жена
мой муж
мой сын
моя дочь
моя коллега
мой сосед
Отца зовут ... .
Маму зовут ... .

***Хәсәнова Л.Д.,***

Ишембай ҡалаһының 3-сө һанлы

урта дөйөм белем биреү мәктәбе

# Ф. РӘХИМҒОЛОВАНЫҢ «БЕҘҘЕҢ ӘСӘЙ» ШИҒЫРЫ.

# АЛМАШТАР. ЗАТ АЛМАШТАРЫ.

## 5 класс

Маҡсат: 1). Фәүзиә Рәхимғолованың “Беҙҙең әсәй” шиғыры менән танышыу, тасуири уҡырға өйрәтеү, телмәр үҫтереү;

2) алмаштар, уларҙың төрҙәре менән танышыу; зат алмаштарының килеш менән үҙгәрешен өйрәнеү; яңы һүҙҙәр үҙләштереү;

3) Әсәйҙәргә ҡарата ихтирам, ғорурлыҡ, уға ярҙам итеү, һөйөү тойғоһон уятыу.

Йыһазландырыу: таҡта, 5 класс өсөн “Башҡорт теле” дәреслеге, дәфтәр, компьютер, презентация, һүрәттәр.

Дәрес барышы:

**1. Ойоштороу мәле.**

– Һаумыһығыҙ, уҡыусылар!

– Ултырығыҙ. Хәлдәрегеҙ нисек?

– Ә хәҙер кәүҙәләрегеҙҙе матур тотоп ултырығыҙ. Дәресте башлайыҡ.

**2. Артикуляцион күнегеү.**

а) Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен ҡабатлау.

б) “Яратам мин илемде” йырының һүҙҙәрен ҡабатлау.

Әсәй менән гөл ултырттыҡ,
Гөлдәр хуш еҫ тарата.
Уңғаным тип, үҫкәнем тип,
Әсәй мине ярата.

**3. Өйгә эште тикшереү.**

**4. Яңы теманы асыҡлау.**

А) "Әсәй” йырын тыңлау. Йырҙа нимә тураһында һүҙ бара?

Б) Ребус сисеү.

Ә 

- Эйе, дөрөҫ. Әсәй. Әсәй – ул донъялағы иң бөйөк, иң ҡәҙерле кеше. Беҙ әсәйҙәрҙе яратабыҙ, ихтирам итәбеҙ һәм улар менән ғорурланабыҙ.

– Шулай итеп, беҙ бөгөн дәрестә Ф. Рәхимғолованың “Беҙҙең әсәй” тигән шиғыры менән танышырбыҙ.

- Ә хәҙер дәфтәрҙәрегеҙҙе асып, бөгөнгө датаны һәм теманы яҙып ҡуйығыҙ.

в) 94-се күнегеү. Диалогты уҡып, исемде алмаштырған һүҙҙәрҙе табырға. Алмаш тураһында төшөнсә биреү.

Алмаш – үҙ аллы һүҙ төркөмө. Ул исемдән, сифаттан һәм һандан килергә мөмкин.

а) Әсәйемдең сәсе ап-аҡ. Өләсәйемдең сәсе лә шундай уҡ.

б) Бишенсе кеше үтеп китте. Әллә нисәнсе кеше үтеп китте.

Рус теле менән сағыштырыу. Алмаштар төрлө төркөмдәргә бүленәләр:

Зат алмаштары – личные местоимения;

Эйәлек алмаштары – притяжательные местоимения;

Күрһәтеү алмаштары – указательные местоимения;

Һорау алмаштары – вопросительные местоимения;

Билдәһеҙлек алмаштары – неопределенные местоимения;

Билдәләү алмаштары – определенные местоимения;

Юҡлыҡ алмаштары – отрицательные местоимения.

– Бөгөнгө дәресебеҙҙең грамматик темаһы – Зат алмаштары. Зат алмаштары исемдәр кеүек килеш менән үҙгәрәләр.

а) Беҙ һеҙҙең менән ниндәй килештәрҙе беләбеҙ?

б) Исемдәрҙе килеш менән үҙгәрткәндә беҙ нимәләргә иғтибар итәбеҙ?

в) Ниндәй һуҙынҡылар нәҙек?

г) Ниндәйҙәре ҡалын?

– Әйҙәгеҙ таблицаға ҡарайыҡ. (46-сы бит)

Мин – я; һин – ты; ул – он(а); беҙ – мы; һеҙ – вы.

**5. Теманы нығытыу өҫтөндә эшләү.**

99-сы күнегеү. Тексты уҡыу, тәржемә итеү, һорауҙарға яуап биреү.

– Текст һеҙгә аңлашыламы? Нимә тураһында һүҙ бара?

– Нимәне үҙгәртергә кәрәк?

– Ниндәй алмаш менән үҙгәртәбеҙ?

– Ә һеҙҙең әсәйҙәрегеҙ ҙә шулай күп эшләйме?

– Әсәйҙәрегеҙ кем булып эшләй?

**6. Физик күнекмә.** “Яратам мин илемде” йырын йырлау.
Әсәй менән гөл ултырттыҡ,
Гөлдәр хуш еҫ тарата.
Унғаным тип, үҫкәнем тип,
Әсәй мине ярата.
Һәр көн һайын гөлдәр һибәм,
Яратам мин гөлөмдө.
Гөлдәр кеүек илем матур,
Яратам мин илемде.

7. **Ф. Рәхимғолованың "Беҙҙең әсәй” шиғыры өҫтөндә эш.**

– Ә хәҙер дәреслектең 45-се битен асығыҙ. Ф.Рәхимғолованың шиғыры менән танышайыҡ. Фәүзиә Абдулла ҡыҙы Рәхимғолова 1921 йылда Ишембай районы Йәнырыҫ ауылында тыуған. Ул – беҙҙең яҡташыбыҙ.

Һүҙлек эше. (Һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешен өйрәтеү һәм һүҙлек дәфтәренә яҙыу)

Тегә – шьет;

Аҫыл биҙәк – красивые узоры;

Иҫкә төшөрә – вспоминает;

Бешерә – варит, готовит кушать;

Күҙ алдында – перед глазами;

Күңел – душа;

Яҡын – близкий;

а) шиғырҙың исеменә иғтибар итеү;

б) шиғырҙы тасуири уҡыу;

в) уҡыусыларҙың үҙ аллы уҡыуы;

г) шиғырҙағы һөнәрҙәрҙе табыу. Текста ниндәй алмаштарҙы күрҙегеҙ?

д) Һәр кем үҙенең әсәһе хаҡында 3 һөйләм яҙа. Исеме кем? Ул ниндәй? Кем булып эшләй?

**8. Дәресте йомғаҡлау.**

– Беҙ һеҙҙең менән шундай матур һөйләмдәр яҙҙыҡ. Тағы ла уйлап ҡарайыҡ. Ысынлап та, ер йөҙөндә иң гүзәл, иң ғәзиз кеше – ул әсәй. Шул һүҙ менән баланың теле асыла һәм ул бөтә телдәрҙә лә берҙәй яңғырай. Әсә кешенең мәрхәмәтле, шәфҡәтле ҡулдары белмәгән эш юҡтыр ул донъяла. Әсә йөрәге – иң тоғро һәм һиҙгер йөрәк, балаға булған мөхәббәт хисе унда бер ҡасан да һүрелмәй, баланың яҙмышына ҡағылған бер генә нәмәне лә әсә йөрәге вайымһыҙ үткәрә алмай! Беҙ әсәйҙәргә мәңге бала булып ҡалабыҙ. Әсәйҙәрҙе беҙ һәр саҡ ихтирам итергә, ҡәҙерләргә, улар тураһында бер ҡасан да онотмаҫҡа тейешбеҙ.

**9. Өйгә эш.**

1) “Минең әсәйем” темаһына алмаштарҙы ҡулланып һөйләмдәр төҙөргә.

2) Алмаштарҙы ятларға.

**10. Баһалау.**

***Шәйхинурова М.М.,***

Бөрө районы Калинники урта дөйөм белем биреү мәктәбе

## БАШҠОРТ БАЛЫ

(Башҡорт дәүләт теле буйынса 4-се класс өсөн дәрес өлгөһө)

Дәрестең маҡсаты. Башҡорт халҡының боронғо шөғөлө – солоҡсолоҡ менән танышыу, бал ҡортоноң, балдың файҙаһы тураһында әңгәмәләшеү, телмәр үҫтереү, дөрөҫ яҙыу күнекмәләре өҫтөндә эшләү.

Күргәҙмә материал: “Башҡорт балы” видеотаҫмаһы, ”Умартасылыҡ” темаһына презентация, сәскә рәсемдәре, дәреслек. Дәрес ФДББС талаптары буйынса үткәрелә.

Дәрестең барышы.

Ойоштороу.

Уҡыусылар.

– Һаумы, ҡояш! Һаумы, дуҫым! Һаумыһығыҙ, уҡытыусым!

Уҡытыусы:

– Һаумыһығыҙ! Ултырығыҙ.

Уҡыусылар:

– Ҡыңғырау шылтыраны,

Беҙ ултырҙыҡ дәрескә.
Китап, дәфтәрҙәр әҙер,
Тотонайыҡ беҙ эшкә!
Уҡытыусы:

– Эште башлайыҡ. Бөгөнгө датаны, класс эшен, теманы дәфтәргә яҙабыҙ. Төп өлөш. Бөгөнгө теманың исеме "Башҡорт балы" (Уҡытыусы уҡыусылар алдына проблемлы һорауҙар ҡуя.)

Теманың исемен тәржемә итергә.
Ә ни өсөн башҡорт балы тип атала беҙҙең тема? (Яуаптар тыңланыла.)
Значение слова "башҡорт" – баш – главная, ҡорт – пчела. (Уҡыусылар дәфтәргә яҙалар)

Значение слова, ее происхождение говорит о том, что башкиры – это народ, который очень давно занимается пчеловодством.

Ә хәҙер өйгә эште тикшереп алайыҡ. (Уҡыусылар һүҙлектән "Ҡортсолоҡ" – "Пчеловодство" темаһына һүҙҙәрҙе тәржемәһе менән яҙып килергә тейештәр. Был ижади эҙләнеү эше).

Бал – мед
бал ҡорто – пчела
ҡортсолоҡ – пчеловодство
умарта – улей
умартасы (ҡортсо) – пчеловод
умарталыҡ – пасека
кәрәҙ – соты
кәрәҙле бал – сотовый мед
солоҡ – борть
солоҡ балы – бортевой мед
солоҡсолоҡ – бортничество
ҡаяу – жало
(Булмаған һүҙҙәрҙе өҫтәп яҙыу һәм бер нисә уҡыусынан уҡытып ҡарау. Был эште презентация-слайдтар ҡарау менән берлектә алып барыу отошло).

Солоҡ һәм солоҡсолоҡ нимә ул? Кем әйтә ала? Һүҙҙең мәғәнәһен белер өсөн нимә эшләргә тейешбеҙ? (Проблемалы һорауҙар ҡуйыуҙы дауам итеү. Яуаптарҙы тыңлау). Эйе, беҙ энциклопедияға, аңлатмалы һүҙлектәргә мөрәжәғәт итә алабыҙ. Ә хәҙер видеояҙма ҡарап үтәйек. (Видеояҙма рус телендә)

Башкортостан – единственное место в России, где люди по-прежнему занимаются старинным промыслом-бортничеством. Это – древняя форма пчеловодства. Дикий башкирский мед собирают не на пасеке, а на деревьях! Пчел при этом содержат в сосновых дуплах, которые называются "борть". Отсюда и необычное название промысла "Бортничество". С целью сохранения и изучения бортевых пчел в естественном состоянии в 1986 году организован башкирский заповедние "Шульган-Таш". Бортничество сохранилось в Бурзянском районе Башкортостана.

Солоҡ балы нимә булды инде? Бортевой мед – мед диких пчел.

“Ҡортсолоҡ” темаһына ингән һүҙҙәрҙе файҙаланып, 84-се күнегеүҙәге тексты телдән сылбырлап уҡыу һәм тәржемә итеү (59-сы биттә):

*Мөхәррәм бабай – умартасы. Йәй көнө ул умарталарҙан бал ала. Шул саҡта яҡшы теләктәр теләй. Уға беҙ ҙә ҡушылабыҙ. Бабайым беҙгә кәрәҙле бал бирә. Бал бөтәһенә лә етә. Беҙ тәмле бал ашайбыҙ. Бабайыма рәхмәт әйтәбеҙ.* (Дәреслек менән эшләү, рәсемде иғтибар менән ҡарау, телдән тәржемә итеү).

**Уҡытыусы.** *Балалар, ҡарағыҙ әле, Дарья бөгөн нимәгә оҡшап тора? Эйе, бал ҡортона.* (Бер уҡыусы дәрескә бал ҡорто булып кейенеп килә). *Ә уның ҡулында нимә һуң? Бал! Бал ҡорто – Дарья буш ҡул менән килмәгән, күстәнәс алып килгән. Бик йомарт (щедрая) икән.* (Дарья матур һауыттағы балды өҫтәлгә ҡуя). *Балды күп йыйған. Шулай булғас, ниндәй инде бал ҡорто. Эшсән, тырыш (работящая, трудолюбивая). Ул беҙгә лә эш алып килгән.* (Бал ҡорто уҡыусыларға карточкалар таратып бирә)

Карточкалар менән эш. (Карточкаларҙың исеме – “Бал ҡорто”. Бал ҡортоноң һүрәте булыуы мөмкин. Формаһы кәрәҙ формаһында булыуы отошло. Һорауҙарға телдән, йәиһә яҙма рәүештә яуаптар бирелә. Был уҡытыусы ҡарамағына. Эш парҙар менән ойошторола).

*Был нимә? Был – бал ҡорто.*

*Бал ҡорттары ниндәй? Бал ҡорттары тырыш (эшсән,йомарт,уҫал).*

*Бал ниндәй? Бал тәмле.*

*Бал ҡорто нисек безелдәй? Беҙ-ҙ-ҙ-ҙ!* (Һуңғы һорауға яуапты бергәләшеп биреү мотлаҡ.) *Һеҙҙе-беҙҙҙҙҙ, һеҙҙе-беҙҙҙҙ!*

– *Бал ҡорто беҙгә уйын да алып килгән. “Бал ҡорто” уйыны.*

*Бал ҡорто уянды,*<br>*Йылмайҙы,*<br>*Йыуынды,*<br>*Елпенде,*<br>*Өйөрөлдө һәм осоп китте* (Хәрәкәттәр менән күрһәтеү).

*Бал ҡорто балды нисек йыя*? (Алена шиғыр һөйләй. Һөйләгәндә хәрәкәттәр менән күрһәтә. Шиғырҙар алдан ятланырға тейеш.)

*Сәскәнән сәскәгә ҡунып*<br>*Бал йыя бал ҡорто.*<br>*Эшсән булған өсөн тулған*<br>*Бал менән бар йорто.*

Балды нимә бирә? (Полина таҡтаға эленгән сәскәләргә күрһәтеп һөйләй).

*Аҡ сәскә лә бал бирә,*<br>*Күк сәскә лә бал бирә,*<br>*Ал сәскә лә бал бирә,*<br>*Бар сәскә лә бал бирә.*

Йомғаҡлау. Был дәрестә нимәләр белдек?

Бал тәмле, файҙалы. Бал ҡорттары балды сәскәнән йыя. Улар тырыш. Бал ҡортоноң өйө – умарта йәиһә солоҡ. Умартасы бал ҡорттарын ҡарай.

Балаларҙың эштәрен билдәләү.

Рефлексия. Дәрес оҡшанымы? Дәрес оҡшаһа, балалар тулы кәрәҙҙәрҙе йыялар (улар һары төҫтә – бал менән тулы). Дәрес оҡшамаһа, буш кәрәҙҙәр тапшырыла (улар аҡ төҫтә)

Өйгә эш. Ниндәй сәскәләр тәмле бал бирә?

***Яҡупова Т.М.,***

*Ҡариҙел районы Ҡариҙел ауылы*

*1-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе*

# САФУАН ӘЛИБАЙҘЫҢ
# “ҠЫШҠЫ УРМАН” ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ
# (8-се класта яңы белем алыу дәресе)

Тема: Сафуан Әлибайҙың “ Ҡышҡы урман”шиғырын өйрәнеү

Маҡсат: 1) Шиғырҙың йөкмәткеһе менән танышыу; ҡышҡы урмандың үҙенсәлектәрен үҙләштереү; 2) уҡыусыларҙың һүҙ байлығын, телмәрен, фекерләү кимәлен үҫтереү; 3) күҙәтеүсәнлек, тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: компьютер, проектор, һүҙлектәр, ҡышҡы тәбиғәт картинаһы, карточкалар, таҡта, аҡбур.

Дәрес барышы

I.Ойоштороу моменты. (Маҡсат: балаларҙың дәрескә әҙерлеген тикшереү)

II. Артикуляцион күнегеү (күмәкләп шиғырҙыуҡыу).

(Слайдта шиғыр юлдары сағылдырыла)

Буран ҡарҙарҙы өйөрә,
Томалап күкте ҡаплай,
Йә ул йыртҡыстай үкерә,
Йә бала кеүек илай. (А.С.Пушкин)

– Нисек уйлайһығыҙ, был юлдарҙа ниндәй миҙгел тураһында һүҙ бара?

– Шиғырҙың тәржемәһен хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ әле, кем яҙған уны?

– Тәржемәһен һөйләп күрһәтегеҙ. (Яуаптар)

(Ошо шиғырҙан сығып уҡыусылар дәрес темаһын үҙҙәре формалаштыра.)

2. Бөгөн Сафуан Әлибайҙың “Ҡышҡы урман” шиғыры менән танышырбыҙ.

– Эш дәфтәренә числоны, теманы яҙып ҡуябыҙ.

– Балалар, нисек уйлайһығыҙ, бөгөн нимә эшләрбеҙ, дәрескә ниндәй маҡсаттар ҡуйырбыҙ?

(Шиғырҙың йөкмәткеһе менән танышырбыҙ, үҙ фекерҙәребеҙҙе аңлайышлы итеп әйтергә өйрәнербеҙ.)

Дәрестең маҡсаттары әйтелә.

3. Темаға инеш. (Телефон шылтырай, ике уҡыусы слайдтағы диалогты уҡый.)

– Һаумы, Рәсүл!

– Һаумы, Ләйсән!

– Бөгөн көн бигерәк матур. Әйҙә, урамға уйнарға сығайыҡ.

– Рәсүл, ә мин урманға барырға уйлағайным. Ҡышҡы урманды күреп, саф һауа һулап ҡайтайыҡ.

– Мин риза.

– Улайһа, осрашҡанға тиклем.

4. Әйҙәгеҙ, уҡыусылар, беҙ ҙә урманға барайыҡ әле. (Слайдта ҡышҡы урман һүрәте күренә)

– Балалар, ҡышҡы урман нисек геүләй? (геү-ү-ү)

– Тыңлағыҙ әле, тумыртҡа ағасты нисек туҡылдата? (туҡ-туҡ-туҡ)

– Ҡулдарығыҙ өшөмәнеме? Ҡулдар өшөһә, нисек йылытабыҙ? (һо-һо-һо)

– Ҡулдарығыҙ йылындымы? (Яуап) – Хәҙер иғтибар менән тыңлағыҙ әле. Урманда ҡоштар тауышы ишетеләме? Ни өсөн? Ә беҙҙә ниндәй ҡоштар ҡышларға ҡала? Ҡыш көнө уларға ауырмы, еңелме? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Ҡоштарға беҙ нисек ярҙам итә алабыҙ?

Ҡышҡы урман һеҙгә оҡшаймы? (Яуаптар.)

Яңы тема менән танышыр алдынан проблемалы ситуация булдырыла. Проблемалы һорау ҡуйыу.

- Нисек уйлайһығыҙ, беҙ һеҙҙең менән тәбиғәттең бөтә нескәлектәрен дә аңлап,төшөнөп күрә алабыҙмы?(Яуаптар)

III. Яңы тема. Сафуан Әфтәх улы Әлибаевтың ижадына, “Ҡышҡы урман” шиғырын уҡыуға күсеү. Китап менән эш.

1. С.Әлибайҙың ижады менән танышыу;

2. Шиғырҙы үҙләштереү өҫтөндә эшләү;

3. Һүҙлек эше. Шиғыр менән танышҡансы, унда осраясаҡ аңлашылмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлайыҡ:

серле донъя – таинственный мир;

ынйы – жемчуг;

түбәләс –пригорок, возвышенность. (Яңы һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөү, телмәрҙә ҡулланырға өйрәнеү)

4. Уҡытыусының тасуири уҡыуы;

5. Тәржемә итеү;

6. Үҙ аллы уҡыу;

7. Сылбыр менән уҡыу;

8. Парлап эш ойоштороу – һорауҙар биреү (уҡыусылар һораuҙарҙы шиғыр буйынса төҙөп, бер – береһенә бирергә тейеш);

9. Шиғырҙа ҡышҡы урман нисек һүрәтләнеүен тасуирлау;

IV. Физкультминут

V. Бирелгән исемдәргә ниндәй сифаттар ҡулланып була? Һәр исемгә бер нисә сифат уйларға. (Таҡтаға берәмләп сығып яҙырға).

1-се рәткә – буран һүҙе;

2- се рәткә – ел һүҙе;

3- сө рәткә – ҡар һүҙе.

Мәҫәлән: ыжғыр буран, көслө ел, епшек ҡар.

VI. Төркөмләп эшләү.

**1-се төркөмгә һүрәттәр менән эш:**

Бирем: бирелгән һөйләмдәр араһынан һүрәттәргә тап килгәнен табып, тексты дауам итергә кәрәк.





1. Ике иптәш саңғыла йөрөргә ярата. Бер көн улар урманға барҙы. Унда бик матур ҡош күрҙеләр.

2. Балаларҙың яратҡан байрамы – Яңы йыл килеп етте. Зал матур биҙәлгән. Уртала шыршы тора…

3. Юлиә, Коля һәм Артур бөгөн ҡар бабай эшләнеләр. Мороно кишерҙән, ҡулдары таяҡтан, башына биҙрә кейҙерҙеләр…

4. Беҙҙең йылға буйындағы ағас ап-аҡ булған, ул бәҫкә күмелгән. Ҡыҙылтүштәр һыуыҡтан ҡурҡмай...

5.Мәктәптән һуң балалар уйнарға сыҡты: Раил конькиҙа, Игорь санала шыуа, ә Катя саңғыла...

6. Кейектәргә ҡышын ҡыйын. Айыу, сысҡандар йоҡларға ята…

**2-се төркөмгә һүрәттәр менән эш:**

Бирем: бирелгән һөйләмдәр араһынан һүрәттәргә тап килгәнен табып, тексты дауам итергә кәрәк.

 

1. Ике иптәш саңғыла йөрөргә ярата. Бер көн улар урманға барҙы. Унда бик матур ҡош күрҙеләр.

2. Балаларҙың яратҡан байрамы – Яңы йыл килеп етте. Зал матур биҙәлгән. Уртала шыршы тора…

3. Юлиә, Коля һәм Артур бөгөн ҡар бабай эшләнеләр. Мороно кишерҙән, ҡулдары таяҡтан, башына биҙрә кейҙерҙеләр…

4. Беҙҙең йылға буйындағы ағас ап-аҡ булған, ул бәҫкә күмелгән. Ҡыҙылтүштәр һыуыҡтан ҡурҡмай...

5.Мәктәптән һуң балалар уйнарға сыҡты: Раил конькиҙа, Игорь санала шыуа, ә Катя саңғыла...

6. Кейектәргә ҡышын ҡыйын. Айыу, сысҡандар йоҡларға ята…

**3-сө төркөмгә һүрәттәр менән эш:**

Бирем: бирелгән һөйләмдәр араһынан һүрәттәргә тап килгәнен табып, ул текстты дауам итергә кәрәк.

 

1. Ике иптәш саңғыла йөрөргә ярата. Бер көн улар урманға барҙы. Унда бик матур ҡош күрҙеләр.

2. Балаларҙың яратҡан байрамы – Яңы йыл килеп етте. Зал матур биҙәлгән. Уртала шыршы тора…

3. Юлиә, Коля һәм Артур бөгөн ҡар бабай эшләнеләр. Мороно кишерҙән, ҡулдары таяҡтан, башына биҙрә кейҙерҙеләр…

4. Беҙҙең йылға буйындағы ағас ап-аҡ булған, ул бәҫкә күмелгән. Ҡыҙылтүштәр һыуыҡтан ҡурҡмай...

5.Мәктәптән һуң балалар уйнарға сыҡты: Раил конькиҙа, Игорь санала шыуа, ә Катя саңғыла...

6. Кейектәргә ҡышын ҡыйын. Айыу, сысҡандар йоҡларға ята…

VII. Хәҙер, беҙ һеҙҙең менән Республика балалар-үҫмерҙәр журналы “Аманат”, “Йәншишмә” гәзите, “Аҡбуҙат” балалар журналы һәм үҙебеҙҙең Ҡариҙел район гәзите ҡушымтаһы “Хазина” гәзиттәренән һеҙҙең тиҫтерҙәрегеҙ, уҡыусылар яҙған ҡыш тураһындағы шиғырҙарҙы тасуири итеп уҡырбыҙ, бирелгән йомаҡтарҙы сисербеҙ һәм дәресте йомғаҡлап ҡуйырбыҙ. (Һәр гәзит – журналда уҡыласаҡ шиғырҙар, йомаҡтар билдәләп ҡуйылған.)

VIII. Рефлексив баһалау. Йомғаҡлау.

1. Проблемалы һорау.

– Дәрес башындағы проблемалы һорауға ҡайтайыҡ: беҙ һеҙҙең менән тәбиғәттең бөтә нескәлектәрен дә аңлап, төшөнөп күрә алабыҙмы? (Уҡыусыларҙың фекерҙәре тыңлана, дөйөмләштерелә, һығымта яһала.)

2. Иҫкә төшөрәйек: дәрес башында ниндәй маҡсаттар ҡуйғайныҡ? Бөгөнгө дәрестә нимәгә өйрәндек? (Был шиғыр аша беҙ тәбиғәтте яратырға, һәр миҙгел мөғжизәле икәнен; ҡыш миҙгеленең саф, илаһи миҙгел булыуына инандыҡ. Иғтибар менән ҡараһаң, ап-аҡ ҡарҙар бөртөгөндә генә күпме гүзәллек, әйтерһең дә, кеше күңеленең биҙәктәре сағыла унда.)

IX. Өй эше (өс кимәлле эш төрө).

1. Ҡыш тураһында һынамыштар яҙып килергә.

2. Шиғырҙан үҙе асыклап килгән һүҙҙәр менән сифаттарҙы яҙып алырға.

3.190-сы күнегеү (тексты дауам итергә).

X. Баһалау.

Әҙәбиәт:


1. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 8 синыф уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө: Китап, 2004.

2. Илмөхәмәтов Ә.Ғ. Хәҙерге заман башҡорт теле дәрестәрен проектлау: Методик кәңәштәр. – Өфө: БР МҮИ нәшриәте, 2015.

# ЗАМАНСА БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ДӘРЕСЕ

***Ғәлләмова Г.Ғ.,***

Бөрө районы Бажен ауылы

урта дөйөм белем биреү мәктәбе

## САЛАУАТ ЮЛАЕВ ШИҒРИӘТЕНӘ ДӘРЕС-СӘЙӘХӘТ

(9 класта ҡабатлау дәресе)

**Маҡсаттар:**

**Белем биреү маҡсаты:**

– Салауат Юлаев лирикаһының төп мотивтарын, идея йүнәлешен, художество үҙенсәлектәрен асыу;

**Үҫтереүсе маҡсаттар:**

– тасуири уҡыу, һөйләү, поэтик анализ күнекмәләрен үҫтереү;

**Тәрбиәүи маҡсаттар:**

– милли геройыбыҙҙың шәхесе һәм ижады менән ҡыҙыҡһыныу, ғорурланыу уятыу.

**Йыһазландырыу:** С. Юлаевтың портреты, китаптар күргәҙмәһе, аудиояҙма, компьютер, интерактив таҡта, мультимедиа.

**Дәрес барышы:**

**I. Инеш өлөш.**

1. Һорау: Кем ул Салауат? (уҡыусыларҙың яуаптары)

– Дәрестең эпиграфына иғтибар итегеҙ:

**«Салауат - башкорттар өсөн рух пәйғәмбәре»**

(Т. Сәғитов)

– рух пәйғәмбәре – духовный пророк

**Үткән дәресте ҡабатлау.**

Үткән дәрестәрҙә С. Юлаевтың тормошо, ижтимағи эшмәкәрлеге, уның тураһында ижад ителгән әҙәби, сәнғәт әҫәрҙәре тураһында һөйләшеп, алған белемдәребеҙҙе таблицала дөйөмләштергән инек.

ХАЛЫҠ ХӘТЕРЕНДӘ

| | |
|---|---|
| Орден<br>Дәүләт премияһы<br>Хоккей клубы | |

Сәнғәт әҫәрҙәре
Әҙәби әҫәрҙәр
Салауат ҡалаһы
Ер-һыу атамалары
Салауат районы

Тормош юлы — Портретын ҡуйырға — Салауат - яугир

«Зөләйха»
«Уралым»
«Тирмәмдә»
«Һандуғас»
«Тыуған илем»
«Егеткә»
«Уҡ»
«Яу»

САЛАУАТ – ШАҒИР

– Ошо таблицаны бөгөнгө дәрестә төҙөп бөтөрөрбөҙ. Һеҙ Салауаттың ижади мираҫы тураһында нимә әйтә алаһығыҙ? (Уның ижади мираҫы шиғри әҫәрҙәрҙән, Крәҫтиәндәр һуғышы осорон сағылдырған документаль яҙмаларҙан тора һәм 500 юлдан ашып китә).

**II. Яңы тема:**

– Бөгөнгө сәйәхәтебеҙҙе милли батырыбыҙҙың ижадына табан тотабыҙ.

Башҡорт дәүләт университеты профессоры, яҙыусы Мирас Иҙелбаев уның ижады тураһында: «Салауатты шиғриәткә тәү башлап мөхәббәт тойғолары алып килә, уның беренсе әҫәрҙәре ҡатын-ҡыҙ гүзәллегенә һоҡланыу хистәре һөҙмтәһендә тыуа», – тип әйтә.

– Сәйәхәтебеҙҙе дауам итәбеҙ, ял итергә туҡталыштар билдәләйбеҙ:

**1-се төркөм** – мөхәббәт лирикаһы: («Зөләйха»)

**2-се төркөм** – тыуған ер тураһында: («Уралым», «Тирмәмдә», «Һандуғас», «Тыуған илем»)

**3-сө төркөм** – азатлыҡ өсөн көрәш тураһында: («Егеткә», «Уҡ», «Яу»)

Һәр төркөмдән бер уҡыусы сығыш яһай. Интерактив таҡтала шиғырҙарының исемдәре яҙылып бара. Уҡыусылар дәфтәрҙәренә яҙа.

**1-се төркөм:** Мөхәббәт лирикаһына «Зөләйха» шиғырын индерергә була. Шиғырҙы яттан һөйләй.

**2-се төркөм:** Артабан ҡатын-ҡыҙға һөйөү хисе тыуған еренә, иленә һөйөү, уның матурлығы менән һоҡланыуға күсә. Бында «Уралым», «Тирмәмдә», «Һандуғас», «Тыуған илем» шиғырҙарын индерәбеҙ.

«Һандуғас» шиғырын яттан һөйләй.

**3-сө төркөм:** Тыуған яҡтың тәбиғәте бай һәм йәмле, ләкин уның ерҙәрен батша ялсылары талай. Батыр үҙ ерен ҡотҡарыу теләге менән яна. Азатлыҡ өсөн көрәш лирикаһына «Егеткә», «Уҡ», «Яу» шиғырҙары инә.

«Уҡ» шиғырын яттан һөйләй.

**Уҡытыусының дөйөмләштереүе:**

– Шулай итеп, беҙ Салауаттың шиғырҙарын ниндәй төркөмдәргә бүлдек? Терәк схемаға иғтибар итәйек, ниндәй шиғырҙары яҙылды?

– Һәр кем өсөн донъяла иң ҡәҙерлеһе нимә икән?

(Атай, әсәй, бала, өй, йәшәгән ер).

– Ә беҙҙең барыбыҙ өсөн дә иң ҡәҙерлеһе ата-бабаларыбыҙ төйәк иткән изге еребеҙ – Уралыбыҙ. Уны кем генә данлап шиғыр яҙмаған, йыр ижад итмәгән?!

**III. Ял итеп алабыҙ.**

(«Уралым» йыры).

**IV. «Уралым» шиғырына анализ:**

1. Тасуири уҡыу (бер нисә уҡыусы сылбырлап уҡый).
2. Һүҙлек эше (алдан таҡтала яҙылған).
3. Анализ өсөн һорауҙар:

а) Шағир Уралды нисек тасуирлай?

б) Үҙенең уй-кисерештәрен ниндәй тел-һүрәтләү саралары аша күрһәтә һәм улар ярҙамында шағир Уралдың ниндәй сифаттарын аса?

4. Төркөмдәр эсендә эш.
5. Һәр төркөм «Уралым» шиғырындағы тел-һүрәтләү сараларын табып, дәфтәрҙәренә яҙа.

**V. Дөйөмләштереү:**

Эйе, метафора, эпитет, гипербола, сағыштырыуҙар күп һәм улар шағирҙың Уралға булған сикһеҙ һөйөүен аса, Уралдың матурлығы менән Һоҡланыу тойғоһон белдерә

– Артабан сәйәхәтебеҙҙе Салауат йөрөгән ерҙәрҙәргә дауам итәбеҙ. Ошондай гүзәл тәбиғәтле ерҙә генә шағир-сәсән тыуғандыр ул.

**VI. Дәресте йомғаҡлау:**

– Сәйәхәттә ниндәй асыш яһаныҡ?

Беҙ дәрестең эпиграфына әйләнеп ҡайтып, яҙыусы Тайфур Сәғитовтың һүҙҙәре менән килешәбеҙ. «Пәйғәмбәр» тип юл яҡтыртыусы, юл күрһәтеүсе кешегә әйтәләр. Ә Салауат – рух пәйғәмбәре, ул кешеләрҙе рухи азатлыҡҡа әйҙәүсе. Уның ғүмере легендаға тиң: ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә йондоҙ һымаҡ балҡып, кешеләр күңелендә өмөт осҡондары тоҡандырҙы. Ошо осҡондан көслө янғын сығып, башҡорт ерен ялмап алды. Батыр үҙенең үткер һүҙе һәм ҡаһарманлығы менән яуға әйҙәне.

Бына ике быуаттан артыҡ ваҡыт үтһә лә исеме халыҡ теленән төшмәй һәм беҙ уға хыянат итмәҫбеҙ: телебеҙҙе, еребеҙҙе һәр саҡ һаҡларбыҙ.

**Уҡыусыларға баһалар ҡуйыу.**

**Өйгә эш (С. Юлаевтың биографияһын һөйләргә әҙерләнеп килергә). Хушлашыу.**

***Дәүләтҡолова С.С.,***

Йылайыр районы Япарһаҙ ауылы

төп дөйөм белем биреү мәктәбе

## ЗӘЙНӘБ БИИШЕВАНЫҢ“ ДУҪ БУЛАЙЫҠ” ПОВЕСЫ БУЙЫНСА ЙОМҒАҠЛАУ ДӘРЕСЕ

**Маҡсат**: Әҫәр буйынса алған белемдәрҙе системаға килтереү, йомғаҡлау. Уҡыусыларҙың үҙ аллы эшләүе, бер-береһенең фекерҙәрен тыңлай белергә, сығыш яһарға өйрәтеү. Яҙыусының ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм дуҫлыҡ тойғоһо тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:**Дәреслек, карточкалар

**Дәрес барышы:**

1. Уҡытыусының инеш һүҙе.

Дәрес темаһы, маҡсаты әйтелгәндән һуң, уҡыусыларға проблемалы һорау ҡуйыла.

– Әҫәрҙә, белеүегеҙсә, Юлдаш һәм Ҡыҙрас тураһында һүҙ бара. Улар араһында ысын дуҫлыҡ булырға мөмкинме икән? Дәрес аҙағында шуға яуап бирербеҙ.

Синыф дүрт төркөмгә бүленә. Һәр төркөмгә әҫәрҙән бүлектәр бүлеп бирелә.

1-се төркөм:“ Балыҡсылар”, “Дауыл” бүлеге

2-се төркөм: “Беренсе сентябрь”

3-сө төркөм: “Яңы дуҫ”

4-се төркөм: “ Дуҫ булайыҡ”

Һәр төркөмгә үҙ аллы эшләү өсөн йүнәлеш бирерлек һорауҙар яҙылған

карточкалар таратыла. Әҙерләнеп бөткәс, төркөмдәр сиратлап сығыш яһай.
1-се төркөм:
1. “ Балыҡсылар” бүлегенән Юлдаш һәм Ҡыҙрасты һеҙ ниндәй малайҙар тип күҙ алдына килтерәһегеҙ ? Кемеһенә ысын балыҡсы сифаты хас, ул ниндәй булырға тейеш?
2. “Дауыл” һүҙе һеҙҙә ниндәй хис тойғолар уята?
(Дауыл – ул көслө ел, бар нимәне емерә. Ҡурҡыу тойғоһо уята. Ошо ҡурҡыныс, көтөлмәгән хәлгә малайҙар әҙер буламы? Шунан сығып уларға ҡылыҡһырлама бирегеҙ). Яҡынса ошондай таблица төҙөлә:

| **Юлдаш** | **Ҡыҙрас** |
|---|---|
| Яҡшы уҡый | Матур итеп һайрай белә |
| сабыр, сыҙамлы | насар уҡый |
| батыр, ҡыйыу | иптәшен ташлап ҡаса |
| дуҫын һатмай | ауырлыҡ килгәндә юғалып ҡала |

Бүлектәргә тап килерлек халыҡ мәҡәлен әйтергә.
Мәҫәлән, “ Ысын дуҫ бәлә килгәндә һынала”
2-се төркөм:
1. Һеҙ үҙегеҙҙе 1 сентябрь көнө яңы мәктәптә тип хис итегеҙ, нимә кисерәһегеҙ, һөйләгеҙ?
2. Юлдаш ошо кисерештә еңел үткәрә, ни өсөн?
(Сөнки уның хәлен аңлап синыф етәксеһе ярҙам ҡулы һуҙа, синыфташтары уны йылы ҡабул итә).
2. Ҡыҙрас тураһында нимәләр белдегеҙ?
(Юлдашты алдағанға ул мәктәпкә барырға ояла, үҙенең ҡылығынан уңайһыҙлана, үкенә.)
Бүлеккә тап килерлек халыҡ мәҡәле “Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленер”.
3-сө төркөм:
1. Юлдаштың яңы класташтарының ниндәй сифаттары иҫегеҙҙә ҡалды?

| | |
|---|---|
| Ғилман | яҡшы уҡый, атаһы герой, Артекта булған, гармунда оҫта уйнай. |
| Гөлкәй | маҡтансыҡ, остоҡай. |
| Зарифа | уҫал, маҡтанмай, осонмай. |
| Талип | оҫта һүрәт төшөрә. |

2. Ғариф менән Ҡыҙрас араһын ысын дуҫлыҡҡа һанап буламы, булмаһа ни өсөн?
(Сөнки Ғариф ҡурҡаҡ, уның үҙ фекере юҡ, кешегә тағылып ҡына йөрөй. Быға Ҡыҙрастың йәне көйә.)
3. Ошо бүлектә Ҡыҙрастың ниндәй яңы сифатын астығыҙ?
(Гел генә насар булып йөрөү уны ялҡыта. Уның да ниҙер эшләгеһе, бүтәндәрҙе аптыратҡыһы килә.)

4-се төркөм:

1. “ Дуҫ булайыҡ” бүлегендә Юлдашты нимәлә ғәйепләйҙәр, ни өсөн ул дөрөҫөн һөйләп бирмәй ? Унынса, был сифат нисек атала?

2. Үҙегеҙ өсөн һеҙ бында Ҡыҙрастың ниндәй яңы сифатын астығыҙ?

(Ул үҙенең дөрөҫ түгеллеген аңлай һәм ғәфү үтенә.)

Юлдаш булып, өләсәһенең хатына яуап яҙығыҙ. Алдағы хәлде прогнозлау рәүешендә. Уны эссе тип атарға ла мөмкин. Бында уҡытыусы йүнәлеш бирә: “Һаумы, өләсәй! Һеҙгә улығыҙ Юлдаш хат яҙа. Өләсәй һеҙҙең Ҡыҙрас тураһында яҙғанығыҙ ысынлап та дөрөҫкә сыҡты. Ул үҙ хатаһын танып ғәфү үтенде. Беҙ уның менән бергә дөрөҫлөк, тырышлыҡ, ғәҙеллек, дуҫлыҡ яғында булырға һүҙ ҡуйыштыҡ…”

Һәр төркөм сығыш яһай, таҡтаға Юлдаш һәм Ҡыҙрасҡа хас сифаттарҙы яҙып баралар.

| **Юлдаш** | **Ҡыҙрас** |
|---|---|
| Яҡшы уҡый | Матур итеп һайрай белә |
| сабыр, сыҙамлы | насар уҡый |
| батыр, ҡыйыу | иптәшен ташлап ҡаса |
| дуҫын һатмай | ауырлыҡ килгәндә юғалып ҡала |
| ошаҡлашмай | үҙ ҡылығынан ояла, үкенә |
| Ҡыҙрасты ғәфү итә. | һәйбәт булырға ынтыла |
| үс тотмай | хатаһын таный, ғәфү үтенә. |

Ошонан сығып синквейн төҙөлә, уны “Ҡыҙрастың насар ҡылыҡтарының сәбәбен асыҡлау” тип тә алырға мөмкин.

1. Ҡыҙрас Юлдашты алдай, сөнки уның кеүек булғыһы килә.
2. Дауыл алдында юғалып ҡала, ул һәр беребеҙгә хас сифат, уны еңеп өйрәнергә кәрәк.
3. Үҙ ҡылығынан ояла, үкенә, тимәк, намыҫлы.
4. Һәйбәт булырға ынтыла, сөнки насар булып йөрөү уны ялҡыта.
5. Үҙ хатаһын таный, ғәфү үтенә, был үҙе – ҙур батырлыҡ.

– Уҡыусылар, дәрес башында бирелгән һорауға яуап бирәйек әле.

Юлдаш менән Ҡыҙрас ысын дуҫ була алалармы?

Улар ыңғай яуап бирә.

Әҫәрҙең ни өсөн “ Дуҫ булайыҡ” тип аталыуын асыҡлау.

(Сөнки балалар үҙ-ара дуҫ, татыу йәшәһендәр, тигән теләктә яҙыусы. Балалар ғына түгел өлкәндәр ҙә, төрлө милләт халҡы ла үҙ- ара дуҫ булырға тейеш.

Был һорауҙы Рәсәй менән Башҡортостандың 450 йылдан ашыу бергә булыуына бәйләү).

**Дәресте йомғаҡлау**.

Синыфҡа: “Ысын дуҫлыҡты һеҙ нисек аңлайһығыҙ?! – тигән һорау ҡуйыла. Дуҫлыҡ һүҙенә кластер төҙөлә, шуның буйынса йомғаҡлау яһала.

ауыр саҡта бер-береңә ярҙам итеү

ғәфү итә белеү

ташлап китмәү
ысын дуҫлыҡ уңыштарына
ҡыуаныу
насар яҡтарын бөтөрөргә ярҙам итеү
хатаһын төҙәтеү

Өй эше. “Минең дуҫым” тигән мини инша яҙырға.

***Дәүләтҡолова С.С.,***

Йылайыр районы Япарһаҙ ауылы

төп дөйөм белем биреү мәктәбе

## Башҡортостандың халыҡ шағиры

## М.Кәримдең тормош һәм ижадына арналған дәрес-уйын

**Тема:** Мостай Кәрим ижады.

**Маҡсат :** Мостай Кәрим ижады буйынса алған белемдәрҙе системаға килтереү, йомғаҡлау. Шағир ижадына ҡыҙыҡһыныу һәм һөйөү тойғоһо тәрбиәләү.

**Уйын барышы:**

Уҡыусыларҙы командаларға бүлеү, капитан һайлайҙар.

Жюри һайлана.

**I.** Тест. Командаларға бер үк төрлө һорауҙарҙан торған тест бирелә. Кем дөрөҫ һәм тиҙерәк яуап бирә шуға ҡарап мәрәйҙәр ҡуйыла.

Тест һорауҙары

1. **Мостай Кәримдең йәшәгән йылдары.**

а) 1915-2005 в) 1919-2005

б) 1920-2002 г) 1918-1999

2. **Мостай Кәримдең тыуған районы**

а) Күгәрсен в) Миәкә

б) Шишмә г) Ишембай

3. **Башкорт дәүләт педагогия институтында укыған йылдары**

а) 1935-1939 в) 1936-1940

б) 1933-1938 г) 1938-1942

4. **Беренсе китабының исеме:**

а) «Яҙғы тауыштар» б) «Отряд ҡуҙғалды»

в) «Минең атым»

5. **«Күҙ йәштәрен юҡҡа түкмәйек,**

**Улар ҙа бит дәүләт байлығы.**

**Ул байлыкты әрәм итмәйек».**

**Был өҙөк ниндәй шиғырынан?**

а) «Ҡоролтайға ҡотлау» б) «Айһылыуҙың күҙ йәштәре»

в) «Ләйсән»

6. Нисәнсе йылда халыҡ шағиры тигән исем бирелә?

а) 1965 в) 1960

б) 1963 г) 1970

7. **Ниндәй китабы өсөн Г.Х.Андерсен исемендәге Халыҡ-ара Почетлы дипломға лайыҡ була**?

а) «Ҡайтыу» б) «Хәбәр көтәм»

в) «Оҙон-оҙаҡ бала-саҡ»

**8. Нисәнсе йылдарҙа Башкортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе булып эшләй?**

а) 1951-1962

б) 1949-1960

в) 1961-1969

**9. Илленсе йылдарҙа ижад ителгән иң гүзәл әҫәре:**

а) «Европа-Азия »

б) «Отряд ҡуҙғалды»

в) «Минең атым»

**10. Башҡорт дәүләт театры сәхнәһенә күтәргән драма әҫәре**

а) «Йырланмаған йыр»

б) «Туй дауам итә

в) «Йәйәүле Мәхмүт»

**ll. «Блиц-турнир».** Билдәле ваҡыт эсендә (мәҫәлән, 20 секунд) нисә һорауға команда дөрөҫ яуап бирә – шул тиклем мәрәй була. Командалар алмашлап яуап бирә. Яуапһыҙ ҡалған һорауҙар икенсе командаға бирелә. Һорауҙар туҡтауһыҙ бирелә.

**Проза өлкәһенән:**

1. «Өс таған» әҫәрендә һүрәтләнгән ауылдың исеме?
2. Кирәмәттең хәсрәтен кем һөйләй?
3. Бәке урлаған малай?
4. Кем ул «Ҡыр кәзәһе»?
5. Айҙарҙың һеңлеһе?
6. Ғабдулла таҡҡан миҙал исеме?
7. Өсөнсө терәү
8. Йырға оҫта малай
9. «Өс таған»дың жанр төрө
10. Һыуы боҙ кеүек һалҡын күл.

**«Айгөл иле» драмаһынан:**

1. Айгөл кемде эҙләй?
2. Кем ул Йәғәфәр Моратшин?
3. Зөлхәбирә йәшәгән ил?
4. Синьор К. Пиккио танышҡанда нимә бирә?
5. Ябағаев нисек үлә?
6. «Етем өйрәк бәпкәһенә йомортка һалған өйрәк инә түгел…». Был һүҙҙәрҙе кем әйтә?
7. Айгөлдө яратҡан егет?
8. Айыу тиреһенә ҡыҙыҡҡан кеше?
9. «Айгөл иле»нең жанр төрө?
10. Айгөлгә нисә йәш?

**«Үлмәҫбай» поэмаһынан:**

3. «Үлмәҫбай»ҙың жанр төрө?

4. Немец офицерын ниндәй йәнлек исеме менән атай?
5. Үлмәҫбайҙың һөйгән йәре?
6. «Әйткән һүҙ…»
7. «Үҙе биш ҡарыш самаһы
   Һаҡалы…»
8. Үлмәҫбайҙың дуҫ егете?
9. «Үҙе йөнтәҫ, үҙе ҡара,
   Гүйә һарыҡ бәрәне». Кем ул?
10. «Ир ҡанаты…»
11. Халыҡ ижадының ниндәй жанрына тартым?
12. Үлмәҫбай рус әҙәбиәтендәге ниндәй образға оҡшаш?

**lll**. Командалар Мостай Кәрим әҫәрҙәренән өҙөктәр сәхнәләштерәләр. Мәрәйҙәр башҡарыу оҫталығына ҡарап ҡуйыла.

**IV.** Яҙыусының әҫәрҙәре буйынса төшөрөлгән иллюстрациялар конкурсы, кроссворд системы, "Юғалған әйбер"ҙең М.Кәримдең ҡайһы әҫәренән алынғанлығын асыҡлау уйыны һәм башҡа ярыш төрҙәрен алырға ла мөмкин.

**V.** Капитандар ярышы

Батмусҡа һорауҙар яҙылған ҡағыҙҙар һалына. Капитандар алмашлап алып яуап бирәләр.

1. М.Кәримдең автобиографик әҫәре?
2. «Беҙҙең өйҙөң йәме» әҫәрендә төп герой.
3. Драма әҫәрҙәрен һанарға
4. Әҫәрҙәре ниндәй телдәргә тәржемә ителде?
5. М.Кәрим баһалары

**Vl.** Уйынды йомғаҡлау. Жюри ағзалары мәрәйҙәрҙе һанап еңеүсе команданы билдәләй.

***Иҫәнбаева Г.А.,***

Благовещен районы Бәҙәй Яланы

урта дөйөм белем биреү мәктәбе

## Мостай Кәримдең

## «Айгөл иле» драмаһын өйрәнеү

**Программа:** Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең I–XI синыфтары өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән программа / Төҙөүселәре: Тикеев Д. С., Толомбаев Х. А., Хөснөтдинова Ф. Ә. – Өфө: «Ватандаш», 2005.

**Класс:** 7

**Дәрес формаһы:** әңгәмә, белем биреүҙе проектлау технологияһы ҡулланыла.

**Дәрес темаһы:** Мостай Кәримдең «Айгөл иле» драмаһын өйрәнеү.

**Маҡсат**: әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен асыу, актуаллеген билдәләү, уҡыусыларҙың үҙ аллы эҙләнеү күнекмәләрен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү, драма әҫәрен анализларға өйрәтеүҙе дауам итеү, әҙәбиәт теорияһынан белешмә биреү; уҡыусыларҙа изгелек, кешелеклек тойғоһо тәрбиәләү, башҡаларға ҡарата ихтирамлы, иғтибарлы булырға өйрәтеү.

**Йыһазландырыу:** яҙыусы портреты, китаптарына күргәҙмә, ижадына бағышланған слайдтар.

**Дәрес барышы:**

**I. Ойоштороу ваҡыты.**

1. Бөгөнгө дәрес темаһына күсер алдынан халҡыбыҙҙың аҫыл хазиналары булған мәҡәлдәргә туҡталып, мәғәнәләрен асыҡлап китәйек. (Слайдтан мәҡәлдәрҙе уҡыу).

- Тыуған илдең әреме лә тәмле.

- Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул.
- Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ил артыҡ.
- Торған илдән тыуған ил яҡшы

2. Әңгәмә:

– Был мәҡәлдәрҙә нимә тураһында һүҙ бара?

– Тимәк, беҙҙең дәрес нимә тураһында барасаҡ? Дәрестең темаһын, маҡсатын асыҡлап китәйек. (Уҡыусыларҙың яуаптары).

**II**. **Теманы, маҡсаттарҙы әйтеү.**

– Дәрестә кеше, уның тормоштағы урыны, тыуған ергә мөнәсәбәте тураһында һөйләшербеҙ, драмаға тулы анализ яһарбыҙ. Иғтибарҙы таҡтаға йүнәлтәйек.

**III. Төп өлөш**.

**1**. Кем ул Мостай Кәрим? (Слайдтан викторина һорауҙарын уҡып яуап биреү)

3. Мостай Кәрим ҡайҙа һәм ҡасан тыуған?

(1919 йылдың 20 октябрендә Башҡортостандың хәҙерге Шишмә районы Келәш ауылында тыуа).

4. Яҙыусының тәүге шиғырҙар китабы ҡасан донъя күрә, нисек атала? (1938 йылда, «Отряд ҡуҙғалды»)
5. Нисәнсе йылда Башҡортостандың халыҡ шағиры исеме бирелә? (1964 йылда)
6. Ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ? («Беҙҙең өйҙөң йәме», «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ», «Өс таған», «Үлмәҫбай», «Ҡара һыуҙар», «Сер», «Йылмайыу», «Айгөл иле»)
7. Мостай Кәрим ҡасан вафат була? (85 йәшендә, 2005 йылдың 21 сентябрендә).

2. Башҡортостан халыҡ шағиры Мостай Кәрим – драматик әҫәрҙәр, повестар, пьеалар, повестар, поэмалар, шиғырҙар авторы.

Ул ижад тормош дөрөҫлөгөн сәнғәти-художество дөрөҫлөгөн күтәреп, факттарҙы фараз, хыял көсө менән ҡеүәтләп, тасуири биҙәй һәм ҡалҡына биреп, һүрәтләүе менән отошло. Поэзияһының берсә шатлыҡлы һәм

һағышлы, берсә дәртле һәм яманһыу шиғырҙары, лиризм һәм драматизм менән һуғарылған поэмалары ни тора!

Һеҙ халыҡ шағирының күп хикәйәләрен уҡығыҙ. Уларҙың темаһы ниндәй?

(Әҙип ижадының төп темаһы – тыуған ил, ер, Ватан һәм унда йәшәгән кешеләр)

– Был темалар ниндәй әҫәрҙәрендә нығыраҡ сағыла? (Уҡыусылар бер нисә әҫәрен атап үтә).

– Ни өсөн яҙыусы был темаларҙы көнүҙәк тип ҡарай?

3. Уның күп әҫәрҙәре төрлө телдәргә тәржемә ителгән, пьесалары илебеҙҙең төрлө салалары сәхнәләрендә ҡуйыла. Шағирҙың тормош юлы илебеҙ тарихы, халҡыбыҙҙың тормошо менән тығыҙ үрелеп үҫкән.

Драма әҫәрҙәре Мостай Кәрим талантының ҙур сәхнәләрҙән төшмәҫ спектаклдәрҙә тағы күпкә йәнле һәм йәмле булып күҙ алдыбыҙға ысын һындарға, онотолмаҫ образдарға әйләнә.

– Нимә ул драма? (Яуап интерактив таҡтала күрһәтелә, бер уҡыусы уҡый).

Мостай Кәримдең «Айгөл иле» әҫәре – драманың аҫыл бер үрнәге.

4. Тыуған ергә, һәм кешеләр араһында булған мөнәсәбәткә, кешенең фани донъяла үҙ-үҙен эҙләүенә бағышланған «Айгөл иле» драмаһы.

5. Драманы өйҙә уҡығыҙ. Ҡыҫҡаса йөкмәткеһен иҫкә төшөрөп үтәйек. (Прологты, дүртенсе картинаны, алтынсы картинаны берәр уҡыусының һөйләүе).



**А. Тема.** Хәбәрһеҙ ғәйеп булған әсәнең ҡайтырын 13 йыл көтөп йәшәгән Айгөлдөң уй-һағыштарының сағылышы; кешенең тормошта үҙенең урынын, үҙ-үҙен эҙләүе.

*Идея.* Кешенең күңелен азат итеү (Раскрепощение человека, его духовное освобождение).

*Проблема.* Кешеләрҙең үҙ-ара әхлаҡи мөнәсәбәте.

**Б. Сюжет ебе.**

*Экспозиция* – сюжеттың инеш өлөшө. Драмала ваҡиғалар барған урыны, ваҡытты ҡыҫҡаса һүрәтләү, төп герой менән таныштырыу (Айгөлдөң бабайы, Йәғәфәр йәшәгән йортта ваҡиғалар бара. Һуғыштан һуң булған ваҡиғалар һүрәтләнә. Төп герой – Айгөл).

*Төйөнләнеү* – драмалағы төп конфликттың башланып китеүенә сәбәпсе булған ваҡиға (Айгөлдөң тау башында үҙ-үҙен эҙләүе, әсәһен һағыныуынан, күрергә теләүенән, Ричард менән бөтә ер йөҙөндә көн күреүсе кешеләргә хат яҙыуынан башлана).

*Ваҡиғалар үҫеше* – сюжет элементтарының төп өлөшө.

1. Ричард Галиндың Айгөлгә ҡарата мөхәббәте.
2. Айгөлдөң әсәһе, Зөлхәбирәнең Италиянан ире буржуй Пиккио менән ауылға килеүе. Бөтәһенең дә, бигерәк тә Айгөлдөң, быға шатланыуы. Зөлхәбирәнең маҡсаты – Айгөлдө Италияға алып китеү.

3. Зөлхәбирәнең ете әхирәте менән әңгәмәләшеүе, әхирәттәренең Зөлхәбирәне «танымауҙары». Уны ғәфү итер өсөн илендә йәшәргә саҡырыуҙары. Ләкин Зөлхәбирәнең ризалашмауы.

*Кульминация* – сюжет үҫешендә хәл-ваҡиғалар киҫкенләшеп еткән иң көсөргәнешле мәл (Зөлхәбирә, Пиккио, Айгөл Италияға китергә йыйыныуҙары.).

*Сиселеш* – әҫәрҙән хәл иткес ваҡиғаларҙан һуң геройҙар яҙмышының асыҡланыуы, сюжеттың аҙағы яҡынлашыуы (Пиккионың сәйер һүҙҙәре аша Айгөлдөң «күҙе асылыуы». Йәшәгән ерендә ҡалырға булыуы һәм ҡалыуы).

**в) Персонаждар системаһы.** (Һәр образға ҡылыҡһырлама биреү).

– Кем ул Сит кеше? (Автор Сит кеше ярҙамында әҫәрҙең төп фекерен билдәләй: «Кешеләр гел юлда, гел эҙләйҙәр. Бәхеттәрен, мөхәбәттәрен, хәсрәттәрен, хатта әжәлдәрен эҙләйҙәр. Барыһынан да үҙҙәрен эҙләйҙәр»).

– Айгөлгә ҡылыҡһырлама бирегеҙ. Уны Сит кеше нисек ҡылыҡһырлай? Авторҙың уға мөнәсәбәте нисек? Әсәһе ҡайтҡас, ҡыҙҙың тормошо үҙгәрәме?

– Ричардҡа ҡылыҡһырлама бирегеҙ. Ричардты автор ниндәй герой итеп һүрәтләй?

– Илдар һәм Йәғәфәр Моратшин нисек күҙ алдына килеп баҫа?

– Әсә булараҡ Зөлхәбирә Иҙрисоваға ниндәй һыҙаттар хас?

– Пиккионың характерына хас сифаттарҙы күрһәтегеҙ.

– Зәлифә, Гөлсирә, Банат, Миңлекәй нисек ҡылыҡһырлана?

**г) Әҫәр теле**. Персонаждарҙың эске донъяһын асыу өсөн автор ябай, халыҡсан тел менән яҙа. Тел гәүһәрҙәре – тапҡыр һүҙҙәр, афоризмдар, мәҡәл-әйтемдәр, кинәйәле һүҙҙәр геройҙарҙың характерын асыуға ҙур роль уйнай.

Таҡтала яҙылған был һүҙҙәрҙе яҙып алыу һәм мәғәнәләрен аңлатыу. (Интерактив таҡтала һүҙҙәр).

«… Әҙәм балаһының көндөҙ йондоҙ күрә торған дөм һуҡыр заманы»
«Донъяны беҙ ҡап уртаға: аҡҡа, ҡараға, дуҫҡа-дошманға, яҡшыға-яманға, йәшәүгә-үлемгә бүләбеҙ»
«…күҙебеҙ таныны, күңелебеҙ таныманы»

«…һүҙ быҙау имеҙә»

«Илсенең суҡмары сабырлыҡ…»

«Юлсыларҙың юлда булыуы яҡшы…»

«Эсемдә ҡойондар уйнап ҡалды, әммә йөрәгемә зиһен биреп киттең…»

«Күҙ йәштәрем аша Салауат күпере күрәм…»

«Был донъя – төнгө ҡара урман…»,

«Ҡарама үҙенә, ҡара күҙенә»

«Ир – баш, ҡатын – муйын…»

«Көтә-көтә көтөк булдыҡ…»

«Баш бөтһә, муйын ҡалыр»

«Ҡанаты һынған сәпсек балаһы ла үлмәй…»

**IV. Йомғаҡлау.**

– Бөгөн өйрәнгән драманың актуаллеге нимәлә?

– Дәрестән ниндәй фәһем алдығыҙ?

– Ни өсөн әҫәр «Айгөл иле» тип атала?

Ябай ғына күренгән ваҡиғалар, ҡылыҡтар, һөйләшеүҙәр аша Мостай Кәрим Кеше яҙмышына һаҡ һәм иғтибарлы булыу кәрәклеген, бергә йәшәү бәхет икәнен тормошсан күренештәрҙе художестволы оҫталыҡ менән ышандырғыс деталдәрҙә асып бирә алған.

**V. Өй эше**. (Үҙеңә оҡшаған образға ҡылыҡһырлама яҙырға.

***Йомағужина Н.Ф.,***

Белорет районы Үткәл

урта дөйөм белем

биреү мәктәбе

## «АҠМУЛЛА – ҺӘР ЗАМАНДА ХАҠ МУЛЛА»

(7 класс)

Дәрес төрө: йомғаҡлау дәресе.

Маҡсаттар: уҡыусыларҙың М.Аҡмулла ижады буйынса алған белемдәрен тикшереү, баһалау; ижадына ихтирам, ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; белемгә, мәҙәниәткә ынтылыш биреү.

Уҡыусылар эшмәкәрлегенең эш төрҙәре.

Мифтахетдин Аҡмулланың тормош юлын, ижадын иҫкә төшөрөү. Шиғырҙарын тасуири уҡыу, ятлау. Шағир тураһында мәғлүмәттәр эҙләү, ижады менән ҡыҙыҡһыныу, ихтирам, ғорурланыу тойғоһо булдырыу. Һүҙлектәр менән эш итә белеү. Төркөмдә эшләү, бер-береңде тыңлай белеү, һығымта яһау, үҙ фекереңде әйтә белеү, иҫбатлау, һорауҙарға яуап бирә белеү, монолог, диалог алып бара белеү, ижади эшләү. Белемдең кәрәклегенә төшөнөү, аңлау.

Йыһазландырыу: ноутбук, интерактив таҡта, портрет, китаптар күргәҙмәһе, слайдтар, ҡурай көйө.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу мәле.

– Хәйерле көн теләп, ҡояш ҡалҡа,
Уяналар ауыл, ҡалалар.
Үҙ телемдә һеҙҙе сәләмләйем:
Хәйерле көн һеҙгә, балалар! (Ә. Аҫылғужина.)

– Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙҙе йылмайып, ысын күңелдән, дуҫтарса сәләмләйек.

– Һаумы, ҡояш,
Зәңгәр һауа!
Һаумыһығыҙ, уҡытыусым!
Һаумыһығыҙ, дуҫтарым!

– Уҡыусылар, һеҙ дәрескә әҙерһегеҙме?

– Ҡыңғырау шылтыраны,
Беҙ дәрескә әҙербеҙ.
Китап, дәфтәрҙәр әҙер

Беҙ “бишлеләр” алабыҙ.

– Бик яҡшы, афарин! Матур ғына итеп урындарығыҙға ултырығыҙ. Дөрөҫ кенә ултырабыҙ һәм иғтибар менән тыңлайбыҙ. Уҡыусылар, таҡтаға күҙ һалығыҙ әле. (Интерактив таҡтала хәрефтәр теҙмәһе бирелгән.) Бында 4 юлда хәрефтәр бирелгән. Уларҙың ҡайһы берәүҙәре ҡабатлана. Һеҙ ҡабатланмаған хәрефтәрҙе тапһағыҙ, бөгөн дәрестә кем тураһында һөйләшәсәгебеҙҙе белерһегеҙ.

Б М В И Г Ф Б Т Г А В

Х Ж Е З Т К Д К И Ж Н

Л А М Л Ҡ М

Н П М Р У Н Л О Л Р А П О Л

– Беренсе юлды ҡарайыҡ. Ниндәй яңғыҙ хәрефтәрҙе күрәһегеҙ? (Уҡыусылар ҡабатланған хәрефтәрҙе әйтәләр, интерактив таҡтала яңғыҙ хәрефтәр ҡала. Һәр юлды шулай тикшерәләр.)

– Әйҙәгеҙ, уҡыусылар, тороп ҡалған хәрефтәрҙе бергәләп уҡыйыҡ.

– Мифтахетдин Аҡмулла.

– Тимәк, бөгөн дәрестә кем тураһында һөйләшәбеҙ?

– Мифтахетдин Аҡмулла (хор менән слайдтан уҡыйҙар).

Проблема тыуҙырыу.

– Уҡыусылар, беҙҙең алда ниндәй проблема килеп тыуҙы?

– Кем ул Аҡмулла? (Портрет күрһәтеү.)

Маҡсатты билдәләү.

– Был проблеманы нисек хәл итербеҙ?

– Шағир тураһында алған белемдәребеҙҙе иҫкә төшөрөргә, ижадын хәтерләргә, шиғырҙарын ятларға, уҡырға, уйларға, фекереңде әйтә белергә кәрәк.

– Афарин, балалар!

II.Төп өлөш.

Ҡурай моңо яңғырай.

1-се уҡыусы.

Ниндәй моң был, ҡайҙан ишетелә?

Ҡоштар тауышымы, кем белә?

Шишмә тауышымы әллә,

Сихри моң ҡайҙан килә?

2-се уҡыусы.

Шишмә, ҡоштар тауышы ла түгел,

Ирәндектән моңдар ағыла.

Моңдар... Был бит ҡурай моңо,

Тыңлайымсы тағы, тағы ла.

(Ҡурай моңо аҫтында слайдта тәбиғи үҫеп ултырған ҡурай күрһәтелә.)

3-сө уҡыусы.

Ҡурай, ҡурайым,

Ни хаҡында һөйләйһең?

Кемде маҡтап көйләйһең?

(Тауыш ишетелә.)

Сеү, һылыуҡай, өнһөҙ генә тыңла,

Серле моңдарымды һин аңла.

Әйҙә әле, бергә юлланайыҡ,

Моң илемә

Сәйәхәткә юл алайыҡ.

– Уҡыусылар, һеҙ ҡурай менән сәйәхәт итергә әҙерһегеҙме?

– Эйе.

– Ә ҡурайҙың нисә тажы бар?

– Ете.

– Тимәк, беҙ ҙә ете бәләкәй төркөмгә бүленәбеҙ, һәр төркөм үҙе ҡурайҙың тажын һайлап ала һәм шул тажда бирелгән эште үтәй. Аңлашылдымы? (Уҡыусылар төркөмдәргә бүленә, эште һайлай һәм яуап бирергә әҙерләнә.)

– Уҡыусылар, әҙерһегеҙме?

– Эйе.

– 1-се төркөм. Беҙгә нимә ул “мәғрифәт”, “мәғрифәтселек” тигән һорауҙар эләкте. Беҙ үҙебеҙҙе ”Телсе ғалимдар” тип атаныҡ. Ә һорауға яуап бирер өсөн, “Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеген” ҡулландыҡ. (Яуапты уҡыйҙар)
– Бик яҡшы, афарин! Башҡа төркөмдәр, “Телсе ғалимдарға” һорауҙарығыҙ бармы?
– Бар. Мәғрифәтселәрҙән тағы кемдәрҙе беләһегеҙ?
– М. Өмөтбаев, Р. Фәхретдин.
– Рәхмәт.
– Әгәр башҡа һорауҙарығыҙ булмаһа, ҡурайҙың икенсе тажына күсәбеҙ.
– 2-се төркөм. Беҙҙең рубрика “Кем? Ҡайҙа? Ҡасан?” тип атала. Бирелгән һорауҙар теҙмәһенә яуаптар әҙерләнек. (Был төркөмдәге уҡыусылар ҡапма-ҡаршы һорауҙарға яуап бирәләр. Әгәр яуапты белмәһәләр, икенсе төркөмдәге уҡыусылар әйтә ала)
1. Аҡмулланың ысын исеме кем?
2. Шағир ҡайҙа һәм ҡасан тыуған?
3. Аҡмулла оҙаҡ йылдар ниндәй халыҡтар араһында йәшәгән?
4. Шағирҙың атаһы.
5. Йыш булған ҡалаларының береһе.
6. Аҡмулланы төрмәгә ултыртҡан ҡаҙаҡ байы.
7. М. Аҡмуллаға арналған китаптарҙың авторҙары.
8. Портретының авторы кем?
9. М. Аҡмулла исемендәге премия ҡасан һәм кем тарафынан раҫланған?
10. Әҙәбиәт өлкәһендә М.Аҡмулла исемендәге премияға кем лайыҡ булған?
11. Шағир ҡасан вафат булған?
12. Аҡмулланың шиғырҙарына кемдәр көй ижад иткән?
13. Шағирға арналған музей ҡасан һәм ҡайҙа асылған?
– Афарин, уҡыусылар! Яуаптарҙы дөрөҫ әйттегеҙ. Ә башҡа төркөмдәрҙең икенсе төркөмгә һорауҙары бармы?
– Бар. Аҡмулла ҡайҙа вафат булған?
– Златоуст ҡалаһы эргәһендә.

– Рәхмәт.

Артабан 3-сө тажға күсәбеҙ.

– 3-сө төркөм “Археологтар” тип атала. Бына беҙ ҡурай тажынан һүрәттәр таптыҡ һәм М. Аҡмулланың шул һүрәттәргә бәйле шиғырҙарын эҙләнек.

(Слайдта һүрәттәр күрһәтелә бара)

Мәктәп – “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!”

Ат – “Аттың ниһен маҡтайһың?”

Алтын киҫәге – “Нәфсе.”

Йылға – “Һыу.”

Ҡара ер – “Тупраҡ.”

Хат – “Атайыма хат.”

Дуҫлыҡ монументы – “Дуҫлыҡ.”

– Һай, афарин! Эҙләнеүҙәрегеҙ бик дөрөҫ. Башҡа төркөмдәр һорауҙарығыҙ бармы?

– Юҡ!

– Булмаһа, ҡурайҙың 4-се тажы – 4-се төркөмгә һүҙҙе бирәбеҙ.

– Беҙ – “Тәфтишселәр”. М.Аҡмулланың әхлаҡ-тәрбиә кодексын тикшереп, түбәндәге башваткысты систек. (Слайдта күрһәтеү)

1. Аҡмулла кемдең эше ҡабул булмаҫ тигән? (Ихласһыҙҙың)

2. Уны ҡош менән сағыштыралар. (Аҡыл)

3. “Хоҙай, кисер!” – тигән менән эш бөтмәйҙер,

“Нимә шартын” өйрәнмәһә – Иван, тигән. (Иман)

4. Иң әүәл нимә эшләү кәрәк эстең керен? (Паклау)

5. Ниндәй әҙәмдән төңөл, тигән. (Күңеле боҙоҡ)

6. Нимә ерҙә ятып ҡалмаҫ? (Яҡшылыҡ)

7. Нимәнең төбө һары алтын? (Сабырлыҡ)

– Бик яҡшы, афарин! Башҡа төркөмдәрҙең һорауҙары бармы?

– Бар. Ни өсөн һеҙ Аҡмулланың әхлаҡ-тәрбиә кодексы тип атанығыҙ?

– Сөнки М. Аҡмулла өгөт-нәсихәтен ҡанатлы шиғриәт саралары менән әйтеп биргән, шуға үҙ заманы өсөн ысын мәғәнәһендә әхлаҡ-тәрбиә кодексы тыуҙырған.

– Рәхмәт.

– Ҡурайҙың 5-се тажына күсәбеҙ. Һүҙҙе 5-се төркөмгә бирәбеҙ.

– Беҙ, 5-се төркөм, “Фекерҙәр донъяһы” рубрикаһын төҙөнөк, сөнки беҙгә төрлө яҙыусыларҙың М.Аҡмулла тураһында цитаталарын иҫкә төшөрөргә кәрәк ине. Бер нисәүһен һеҙгә лә тәкдим итәбеҙ. (Слайд күрһәтеү)

1. “М. Аҡмулла – ҡара төндәге яҡты йондоҙ”. (Ә.Харисов)

2. “Аҡмулла Салауаттан һуң беренсе тапҡыр үҙ халҡына “Башҡорттарым!” тип өндәшә, уны айырыуса бер ярһыу менән мәғрифәткә, белемгә саҡыра”. (Ә.Харисов)

3. “Тукай менән Ғафуриға тиклем булған иң оло һәм бик күбеһенән юғары торған әҙип”. (Ә.Харисов)

– Рәхмәт, уҡыусылар! Башҡа төркөмдәр, бәлки, һеҙ ҙә М. Аҡмулла тураһында берәй цитата иҫләйһегеҙҙер? Өҫтәп әйтергә теләүселәр булһа, рәхим итегеҙ! (1-2 уҡыусы яуап бирергә мөмкин)

– Рәхмәт! Артабан ҡурайҙың 6-сы тажына күсәбеҙ.

– 6-сы төркөм “Дикторҙар” конкурсы ойоштора. Беҙ һеҙгә М.Аҡмулланың үҙебеҙ белгән, ятлаған шиғырҙарынан өҙөктәрен яттан һөйләп ишеттерәбеҙ, ә һеҙ ул шиғырҙарҙың исемдәрен белергә тейешһегеҙ. (Уҡыусылар тасуири итеп шиғырҙарҙан өҙөктәр ятлайҙар, ҡалған уҡыусылар исемдәрен әйтәләр).

– Рәхмәт! Афарин! Һеҙ шағирҙың бик күп шиғырҙарын, уларҙың исемдәрен дә беләһегеҙ. Артабан ҡурайҙың 7-се тажына күсәйек.

– Беҙ, 7-се төркөм, ҡурайҙың 7-се тажын «Теләктәр» тип атаныҡ. Мифтахетдин Аҡмулла халҡыбыҙҙы һәр ваҡыт белемгә, мәғрифәткә өндәгән, әҙәпле, мәҙәниәтле булырға саҡырған. Бына беҙ ҙә бөгөн үҙ туған башҡорт халҡыбыҙға теләктәр уйланыҡ, уларҙы ошо күгәрсендәргә яҙып, аяҙ күк йөҙөнә осорабыҙ. (Уҡыусылар күгәрсен һүрәтенә үҙ теләктәрен яҙған, уларҙы уҡыйҙар, таҡтаға беркетәләр.)

– Рәхмәт, уҡыусылар! Башҡа төркөмдәр, һеҙҙең ниндәй теләктәрегеҙ бар? Әйҙәгеҙ, 7-се төркөмгә ҡушылығыҙ. (1-2 уҡыусының яуабы.)

III. Йомғаҡлау.

– Уҡыусылар! “Аҡмулла – һәр заманда хаҡ мулла” тип әйтә алабыҙмы? Ни өсөн? Ниңә шулай тип уйлайһығыҙ? (Уҡыусыларҙың яуабы.)

– Эйе, уҡыусылар. Һеҙ дөрөҫ уйлайһығыҙ. Аҡмулла аҡылы, уның һабаҡтары беҙҙең өсөн башҡорт шиғриәтенең бүтән халыҡтарҙы ла таң ҡалдырырлыҡ юғары ҡаҙанышы, ул беҙҙең милли мәҙәниәтебеҙҙең айырылғыһыҙ бер өлөшө, ул ысын мәғәнәһендә тормош һабағы, был донъяла әҙәм балаларының яралы күңеленә йыуаныс һәм таяныс.

Башҡортостан күгендә Аҡмулла йондоҙо Салауат, Бабич, Вәлиди йондоҙо менән бер тиң балҡый. Был йондоҙҙар заманалар үткән һайын сағыуыраҡ була бара. Халҡыбыҙҙың киләсәккә юлдарын яҡтыртып тора.

– Ә хәҙер “Синквейн” уйынын тәҡдим итәм. (Мәҫәлән, бер уҡыусының эше)

1 – Аҡмулла

2 – белемле, мәғрифәтле

3 – саҡыра, өндәй, яҡтырта

4 – «Аҡмулла – яҡтылыҡ йырсыһы»

5 – белем

– Уҡыусылар, дәрес һеҙгә оҡшанымы? Нимә нығыраҡ оҡшаны? Һеҙ үҙегеҙгә берәй төрлө яңылыҡ, белем алдығыҙмы? Ә нисек уйлайһығыҙ, дәрес башында килеп тыуған проблеманы хәл иттекме? Маҡсатыбыҙға ирештекме?

IV. Рефлексия.

– Бөтәгеҙ ҙә баҫығыҙ һәм минең һорауға һүҙһеҙ генә хәрәкәттәр менән яуап бирегеҙ.

– Әгәр һеҙгә дәрестә күңелһеҙ, ҡыҙыҡ булмаһа, ҡулдарығыҙҙы өҫкә күтәрегеҙ.

– Әгәр һеҙгә дәрестә яҡшы булһа, бөтәһе лә оҡшаһа, сәпәкәй итегеҙ.

– Әгәр һеҙ дәрестә яңы белем, мәғлүмәт алһағыҙ, урынығыҙға ултырығыҙ.

V. Баһалау.

VI. Өйгә эш. Мифтахетдин Аҡмулла тураһында шиғыр, ҡобайыр йәки эссе ижад итергә.

***Камалова Ф.Ф.,***

Илеш районы Ҡарабаш ауылы

урта дөйөм белем биреү мәктәбе

## Булат Рафиҡовтың «Хыялый шыршы» әкиәтен өйрәнеү

## (5 класс)

**Тема: Б.Рафиҡовтың «Хыялый шыршы» әкиәтен өйрәнеү**

Маҡсат: Күренекле башҡорт яҙыусыһы Булат Рафиҡовтың тормошо һәм ижады менән танышыу; яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр өйрәнеү күнекмәләрен үҫтереү, яҙыусы ижадына ҡыҙыҡһыныу, уҡыусыларҙы һау – сәләмәт тормош алып барырға һәм тәбиғәтте һаҡларға өндәү.

Йыһазландырыу: мультимедия проекторы, Булат Рафиҡовҡа арналған күргәҙмә.

**Дәрес барышы**

I. Ойоштороу моменты.

Хәйерле көн, ҡояш ҡалҡа.
Уяналар ауылдар, ҡалалар.
Үҙ телемдә һеҙҙе сәләмләйем:
Хәйерле көн һеҙгә, балалар!

1-се слайд.

2. Фонетик-орфоэпик күнегеүҙәр.

Дә-дә-дә – һөйләшәм башҡорт телендә,
Дә-дә-дә – уҡыйым башҡорт телендә,
Тә-тә-тә – беҙ йәшәйбеҙ Илештә

II. Өй эшен тикшереү

– Уҡыусылар, үткән дәрестә һеҙ “Ҡуян менән арыҫлан” әкиәте менән таныштығыҙ. Хәҙер һорауҙарға яуап бирегеҙ.

2-се слайд.

Һорауҙарға яуап бирәләр.

1) Йәнлектәр ни өсөн йыйын ҡорорға булғандар һәм ниндәй ҡарарға килгәндәр?
2) Ҡуян йәнлектәр алдында ниндәй тәҡдим менән сығыш яһай?
3) Ҡуян үлемдән ҡотолоу өсөн ниндәй хәйлә ҡора?
4) Күп кенә мәҫәлдәрҙә, әкиәттәрҙә меҫкен, ҡурҡаҡ ҡына итеп һүрәтләнгән ҡуян образына һеҙҙә ниндәй ҡараш тыуҙы?

III. Инеш әңгәмә.

3- сө слайд. Тәбиғәт һүрәте.

4-се слайд. Ағастар төшөрөлгән һүрәттәр. Был һүрәттәргә ҡарап беҙ һеҙҙең менән нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ? (яуаптар).
– Ниндәй төр ағастар була? (Уҡыусылар һанап сығалар)
– Ә һеҙ байрамдар яратаһығыҙмы? (яуаптар) Бигерәк тә көтөп алғаны ниндәй байрам һуң? (8 март, 1 сентябрь, Яңы йыл). Ә Яңы йылды һеҙ нисек ҡаршы алаһығыҙ? (Әлбиттә, шыршы биҙәп).
VI. Төп өлөш.
– Уҡыусылар, бөгөн беҙ һеҙҙең менән Булат Рафиҡовтың “Хыялый шыршы” әкиәте менән танышып үтәсәкбеҙ. Хыялый тип ниндәй осраҡта әйтәбеҙ. Ә һеҙҙең уҡыусылар үҙегеҙҙең ниндәй хыялдарығыҙ бар? (яуаптар)
Булат Рафиҡовтың ҡыҫҡаса биографияһы менән танышыу.
5-се слайд. Б.Рафиҡовтың портреты.
6-сы слайд. Китаптары.
7-се слайд
1) Б. Рафиҡов 1934 йылдың 4 авгусында Мәләүез районы Дәүләткол ауылында тыуған (картанан күрһәтеү). Ул – Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, С.Юлаев исемендәге премия лауреаты. Уның фәнни-фантастик темаға арналған «Лоулла», «Һуҡайлының һуңғы байрамы», «Йыһан азаматтары» повестары мәктәп уҡыусыларына арналған.
2) Уҡыусыларҙы әҫәр менән таныштырыу. Уҡытыусы әкиәтте ҡысҡырып уҡый. Уҡыусылар сылбырлап уҡыйҙар.
3) Уҡыусылар төркөмдәргә бүленеп эш биремдәрҙе үтәйҙәр.
8-се слайд
1-се төркөмгә “Йәш шыршының Уҫаҡ һәм Өлкән шыршы менән әңгәмәһе”;
2-се төркөмгә “Хыялый шыршы менән Айыу дуҫлығы”;
3-сө төркөмгә “Йәш шыршының Айыуҙы ҡотҡарыуы”.
V. Ял минуты.
9-сы слайд
Ял минуты бик кәрәк
Дәрестең уртаһында.
Төрлө хәрәкәттәр яһау
Арыуҙы оноттора.
Ҡаҙҙар кеүек йөҙәйек,
Ҡоштар кеүек осайыҡ,
Ҡуян кеүек һикерәйек,
Айыу кеүек атлайыҡ,
Аттар кеүек сабайыҡ,
Бесәй кеүек һуҙылайыҡ,
Һәм урынға ултырайыҡ (төрлө хәрәкәттәр яһау).

VII. Афарин, уҡыусылар! Ял итеп алдыҡ, эшебеҙҙе дауам итәйек. Уҡыусыларға һорауҙар, эштәр. Һәр парталағы уҡыусылар бергәләп һорауҙарға яуап эҙләй, яуап бирә тик береһе.

10-сы слайд:

1. «Тамырҙарҙы өҙмәйенсә, ерҙән айырылып буламы?» тигән тәрән фәлсәфәүи юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?
2. Ағастар кешеләр тураһында ниндәй фекерҙә?
3. Әҫәрҙә ниндәй проблема күтәрелә һуң, һеҙ уны нимәлә күрәһегеҙ?
4. Шыршы һәм айыу кешеләрҙең яуапһыҙ ғәмһеҙлегенән нисек ҡасып ҡотолғандар? Һеҙ уны нимәлә күрәһегеҙ?

(Яуаптарҙы тыңлау.)

11-се слайд:

VII. *Ихтирамын күреп, мыҫҡыллы йылмайыу, тетрәнерлек күренеш, иң аҡыллы ағас* һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Ошо һүҙбәйләнештәр менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.

12-се слайд:

– Автор йондоҙҙар теле менән ниндәй тәрән фекер әйткән? Шул юлдарҙы табып уҡығыҙ әле.

(Уҡыусы уҡый, шул уҡ ваҡытта слайдта яҙыла бара)

Тәбиғәт алдында барығыҙ ҙа тиң хоҡуҡлы, ти улар. Һәр үләндең, һәр ағастың, һәр хайуан-ҡоштоң Ергә кеше менән бер рәттән хужа булырға хаҡы бар икән. Кешеләргә шуны аңлатып бирә алмаһағыҙ, улар һеҙҙе лә, үҙҙәрен дә һәләк итәсәк, ти йондоҙҙар.

VIII. Йомғаҡлау.

Беҙ һеҙҙең менән ниндәй әкиәт уҡыныҡ? Б. Рафиҡовтың әҫәре оҡшанымы? Кешеләрҙең дә шыршы кеүек аҡыллы булыуын теләйһегеҙме? Тәбиғәтте һаҡлау өсөн нимә эшләргә кәрәк?

Өй эше. Әкиәтте уҡырға, “Тәбиғәтте һаҡлайыҡ” тигән темаға һүрәт төшөрөргә.

Баһалау.

Һау булығыҙ!

**Әҙәбиәт:**


1. Башҡорт әҙәбиәтенән уҡыу китабы: Дөйөм белем биреү мәктәбенең 5-се класс уҡыусылары өсөн / Авт.-төҙ. М.Х. Иҙелбаев, М.Б. Юлмөхәмәтов, Ә.М. Сөләймәнов; З.И. Яйҡарова; М.Б. Юлмөхәмәтов редакцияһында. – Өфө: Китап, 2011. – Һүрәттәре менән 256 бит.

2.Булат Рафиҡов: Библиографик күрһәткес / Ф.М. Исҡужина төҙөнө. – 2-се баҫма, Мәләүез, 2012. – 71 бит.

3. Ҡурай. Текст: әкиәт // Аманат. – 2001. – №9. – Б. 22-23

4.Юлдаш менән ҡуян :әкиәт // Аҡбуҙат. – 2014. – №8.

5. Рафиҡов, Б. З. Урал илендә: шиғырҙар, әкиәттәр, хикәйәләр / Булат Рафиҡов. — Өфө: Китап, 2014. — 248 бит.

***Камалова Ф.Ф.,***

Илеш районы Ҡарабаш ауылы

урта дөйөм белем биреү мәктәбе

# АҠМУЛЛА – ҺӘР ЗАМАНДА ХАҠ МУЛЛА

**(дәрес – пресс-конференция)**

**Тема:** Аҡмулла – һәр заманда хаҡ мулла.

**Маҡсат.** М. Аҡмулланың тормошо һәм ижады буйынса тулы мәғлүмәт туплау; уҡыусыларҙың үҙ аллы фекерләүен, ижади мөмкинлектәрен үҫтереү; күренекле шәхестәр яҙмышына, халыҡ тарихына ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу; Аҡмулла ижады йоғонтоһонда уҡыусыларҙа белем, мәғрифәткә ынтылыш, ғәҙеллек, юғары әхлаҡи-әҙәплелек, сафлыҡ тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** М. Аҡмулланың портреты; уның тормош юлын, ижадын сағылдырыусы күргәҙмә, Аҡмулла тураһында сыҡҡан гәзит-журналдарҙан тупланған материалдар; карта.

**Дәрес барышы**

1. **Ойоштороу мәле**: Һаумыһығыҙ! Хәйерле иртә! Ултырығыҙ!




**Уҡытыусы:** Бөгөнгө дәрес темаһының етдилеге дәрес формаһының да етди булыуын талап итә. Шуға күрә дәресте дәрес – пресс-конференция формаһында үткәрәбеҙ. Пресс-конференция булғас, дәрестә матбуғат

вәкилдәре лә ҡатнашырға тейеш. Бөгөнгө дәресебеҙҙә хәбәрселәр һәм журналистар ҙа үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашыр. Әңгәмәбеҙҙең төп фекерен яҙып барырға кәрәк буласаҡ, сөнки һуңынан дәрестә алынған мәғлүмәтте һәр матбуғат баҫмаһы үҙенең биттәрендә мотлаҡ сағылдырырға тейеш буласаҡ. Әйҙәгеҙ, пресс-конференцияны башлайбыҙ. Унын темаһы:

( Аҡмулланың портреты күрһәтелә. Ф. Рәхимғолованың шиғыр юлдары экранда яҙыла)

*Бик йәштән ук ата йортон*
*Мәжбүр булдың ташларға,*
*Халыктар араһына сығып,*
*Яңы тормош башларға.*
*Эй, Акмулла, Акмулла,*
*Сәсән телле бер мулла.*
*Яһилға һин дау мулла,*
*Халкыңа һин ак мулла.*
*(Ф.Рәхимғолова).*

**Укыусылар яуаптары:** ( М. Аҡмулла тураһында)

М.Аҡмулла – һәр заманда
хаҡ мулла.

**Укытыусы:** Эйе, уҡыусылар бөгөн беҙ мәғрифәтсе - шағир, яҡтылыҡ йырсыһы Мифтахетдин Аҡмулла тураһында һүҙ алып барасаҡбыҙ. Аҡмулланың – XIX быуаттың II яртыһында ижад итеп, шиғри әҫәрҙәре бөгөнгәсә һаҡланған, халҡы күңелендә юйылмаҫлыҡ тәрән эҙ ҡалдырған, ғалимдар, яҙыусылар, әҙәбиәт һөйөүселәрҙә оло ихтирам һәм ҡыҙыҡһыныу уяткан шәхестең тормошо, яҙмышы нисек булған? Ни өсөн унын шиғриәте бөгөнгө укыусынын күңеленә лә яҡын? Дәрестә ошо һорауҙарға яуап эҙләрбеҙ.

Ә хәҙер ошо бирелгән шиғырҙы анализлап китәйек.

(Ул атаһы йортона ҡайта. Үкенескә ҡаршы, шағирға йылы ҡараш, яҡты сырай күрһәтеүсе булмай. Сәбәбе, моғайын, М.Аҡмулланың муллаларҙан, байҙарҙан көлөп яҙған сатирик шиғырҙарындалыр, сөнки атаһы Камалетдин үҙе лә мулла.)

Һүҙлек эше ойоштороу:

Яһил (ғәр.) – 1) аҫтыртын, үтә ныҡ уҫал; яуыз;
2) наҙан, уҡымаған, белемһеҙ.
Дау – 1) дәғүәле тауыш, ыҙғыш, дау ҡубыу;
2) шау-шыулы оло талаш, әрләш.




**Уҡытыусы.** Ә хәҙер һүҙҙе матбуғат вәкилдәренә бирәбеҙ. Улар менән берлектә Аҡмулла ижадына байҡау яһарбыҙ, үҙебеҙҙе борсоған һорауҙарға яуап та табарбыҙ. Беренсе һүҙ «Йәшлек” гәзите хәбәрсеһенә. Рәхим итегеҙ.

Мифтахетдин Аҡмулла портретына
ҡағылышлы ниҙәр беләһегеҙ?

**Уҡытыусы.** Эш барышында һеҙҙе тынғыһыҙ шағир, мәғрифәтсе М.Аҡмулла образы оҙатып барыр. (Ҡабаттан Аҡмулланың портреты күрһәтелә)

“Йәшлек” гәзите хәбәрсеһе:

М. Аҡмулланың һүрәте – хыял һәм фантазия емеше, тиергә була, сөнки ул үҙе иҫән саҡта уның рәсеме төшөрөлмәгән. Ислам дине буйынса кешенең һүрәтен эшләү бөтөнләй тыйылған.

М. Аҡмулланы уның бер туған ҡустыһы Әхмәҙигә оҡшаған, тиҙәр. 1981 йылда башҡорт ғалимдары һәм тикшеренеүселәре Ә. Вилданов, Р. Шәкүр, антрополог Ринат Йосопов, халыҡ рәссамы Зилфәт Басиров булған материалдарҙы туплап, тикшерәләр. Аҡмулланың тышҡы ҡиәфәте күҙаллана һәм уның тәүге портреты тыуа.

Портретты яҙғанда автор З. Басиров Дим буйы, мең ырыуы башҡорттарына хас булған һыҙаттарға нығыраҡ туҡтала. М.Аҡмулла портретта аҡыллы, уйсан ҡарашлы, ҡаштары һынылып тора, матур тура танаулы, нәҙегерәк иренле, бәләкәй һаҡаллы. Ул өҫтөнә башҡорт кейеме кейгән, башына сәллә ураған.

| |
|---|
| 1831 йыл, Туҡһанбай. Ошо осорға, ата-әсәһенә ҡағылышлы ниҙәр билдәле? |

**Уҡытыусы.** Һүҙ «Киске Өфө» хәбәрсеһенә:

<u>«Киске Өфө” ижтимағи-сәйәси-мәҙәни гәзите хәбәрсеһе:</u>

Олатаһы Ишҡужа Ишбулдин ауылдың указлы муллаһы була, атаһы – Камалетдин Ишҡужа улы, әсәһе – Бибиөммөгөлсөм Сәлимйән ҡыҙы. Мифтахетдин күмәк балалы ғаиләлә үҫә. Ул осор материалдары буйынса, Туҡһанбайҙа йорттар һаны 15-20-нән артмаған. Күп йәш ғаиләләр башҡа сыҡмай, ата-әсәһе, туғандары менән йәшәүҙе хуп күргән, сөнки был осорҙа башҡорттарға күп феодаль һалымдар түләргә тура килгән, ә уны йән башына түгел, һәр хужалыҡҡа һалғандар.

| |
|---|
| 1848 – 1851 йылдар<br>Белем алыуы |

**Уҡытыусы.** Һүҙ «Аманат» хәбәрсеһенә:

<u>«Аманат” журналы хәбәрсеһе:</u>

Мифтахетдин тәү белемде үҙ ауылында, унан күрше ауылда, Лоҡман мулла мәҙрәсәһендә ала. Артабан Мәнәүезтамаҡ һәм Әсән мәҙрәсәләрендә уҡый. 1850 йылдың февраленән алып июненә тиклем 19 йәшлек Мифтахетдин төрмәлә була. Сәбәбен хәрби хеҙмәттән баш тартыу булғандыр, тип фараз ителә, сөнки кантонлыҡ системаһы осоронда һәр башҡорт 19 йәштән хәрби хеҙмәткә алынырға һәм оҙайлы хеҙмәт итергә тейеш булған.

| |
|---|
| Кантонлыҡ системаһы осоро ҡайһы йылдарҙы үҙ эсенә ала? |

**Уҡытыусы.** «Ватандаш» хәбәрсеһе дауам итә:

“Ватандаш” журналы хәбәрсеһе:

1798 – 1865 йылдар. Был, моғайын, тарихи дөрөҫлөккә тап киләлер, сөнки 1867 йылда дошмандары тап ошо фактты – уның хәрби хеҙмәттән баш тартыуын сәбәп итеп, төрмәгә ултырта.

М.Аҡмулла ҡаҙаҡтар араһында үҙен Мөхәмәтйәр исемле ҡаҙаҡ улымын, тип таныштыра. Аҡмулла – ҡаҙаҡ, тигән версия ошонан килеп сыға. З. Рәсүлев М.Аҡмулланың ҡәбер ташына «атаһы Мөхәмәтйәр, тәрбиәләүсе атаһы Камалетдин» тигән яҙыу яҙҙыртканда ла ошо уҡ фактҡа таяна, буғай. Ҡаҙаҡ ғалимдары Д.Ҡасҡынбаев, С.Сәйфуллиндар ҙа был версияны ҡулланып, Аҡмулланы ҡаҙаҡ тип иҫбатлай. Р. Шәкүр үҙ хеҙмәтендә ошондай йүнәлештәге эштәрҙең әле лә булыуы тураһында борсолоу белдерә.

Ваҡыт үтә килә, башҡорт ғалимдары Р. Шәкүр, Ә. Вилданов, Ә. Әсфәндиәров, С. Галиндарҙың эҙләнеүҙәре һөҙөмтәһендә, уның ысын атаһы – Камалетдин Ишҡужа улы икәнлеге иҫбатлана.

| |
|---|
| 1853 – 1866 йылдар |

**Уҡытыусы.** Һүҙҙе «Башҡортостан» хәбәрсеһе ала.

«Башҡортостан” ижтимағи-сәйәси гәзите хәбәрсеһе:

М. Аҡмулла Стәрлебаш мәҙрәсәһендә суфый шағир Шәмсетдин Зәки менән таныша, уның дәрестәрен тыңлай. Ләкин был мәҙрәсә лә

М.Аҡмулланы ҡәнәғәтләндермәй. Аҙаҡ ул «Мәжлесенә ҡарай ғына» шиғырында ошолай яҙа:

Фәҡирлектән артыҡ фән күрә алманыҡ,
Шәһәр сығып, алыҫ яҡҡа йөрөй алманыҡ.
Мәргәндәрҙе танырлыҡ хәлебеҙ бар,
Шул сәбәптән сабыр ҡылып тора алманыҡ.
Ул заман китап ҡайҙа был замандай?!
Йөрөйөм тәрән ерҙән һыу ала алмай.
Бер шәриҡ ҡалын китап уҡып торһа,
Ҡыҙығып, мин фәҡирҙең күҙе аландай.

М.Аҡмулла был осорҙа Ырымбур, Троицк, Күксәтәү ҡалаларында һәм шул тирәләге башҡорт, ҡаҙаҡ ауылдарында йәшәй. (М. Аҡмулла йәшәгән ерҙәр картанан күрһәтелә)

Ул балта оҫтаһы, уҡымышлы мулла булып танылa. Хаҡ, тура һүҙле булғаны өсөн ҡаҙаҡтар уны яратып, Аҡмулла тип исем бирә.

М. Аҡмулла үҙ заманы өсөн прогрессив ҡарашлы уҡытыусы булараҡ, балаларға дәресте үҙ телендә аңлатыуҙы маҡсат итеп ҡуя, ҡаҙаҡҡа – ҡаҙаҡса, башҡортҡа башҡортса һөйләй. Шиғырҙарында прогресҡа ынтылыш ярылып ята.

- Татлы телдең төбө шәрбәт, мөләйем.
Тибрәһен шул шәрбәт телем һәр даим.
Бирҙең, тәңрем, телде беҙгә һөйлә, тип,
Тура юлға телде шуға әйҙәйем!

- Хәл етһә, төрлө фәнде күргән яҡшы,
Камилдар ҡатарына кергән яҡшы.
Русса уҡып ҡына түгел белмәк,
Хәл килһә, французса белгән яҡшы.

**Уҡытыусы**. 1867 – 1871 йылдар.

Нахаҡҡа рәнйетелгән М.Аҡмулла «Урыным – зиндан» шиғырын яҙа. (Шиғыр тасуири уҡыла)

**Уҡытыусы**. Шиғырҙың ҡайһы юлдарында дошмандарына асыуы, нәфрәте сағыла? (8, 17, 18, 19, 20-се юлдарында.)

Халыҡтың Аҡмуллаға мөхәббәте шул тиклем көслө була, улар уны ярата, хөрмәт итә. Әхмәтбай Бакиров исемле кеше уны порукаға алып, төрмәнән ҡотҡара. Ҡотҡарылғандан һуң да әле ул 2 йыл арестант ротаһында ҡалырға тейеш була. Ғатаулла Баязитов менән Ғәбиҙулла Йыһангировҡа барып, император Александр II исеменә прошение яҙалар, 2 мең һум аҡса түләйҙәр һәм М. Аҡмулла арестант ротаһынан да ҡотҡарыла.

| 1889-94 йылдар М. Аҡмулла ижадында ни менән әһәмиәтле? |
|---|

**Уҡытыусы.** Һүҙ «Ағиҙел" журналы хәбәрсеһенә:

<u>«Ағиҙел" әҙәби-нәфис һәм ижтимағи-сәйәси журнал хәбәрсеһе</u>: М.Аҡмулла татар мәғрифәтсеһе, ғалим-реформаторы Ш. Мәржәнигә арнап мәрҫиә ижад итә. Әҫәр тәүҙә мәдхиә итеп яҙыла, аҙаҡ Ш. Мәржәниҙең вафат булыуы сәбәпле мәрҫиәгә үҙгәртелә. (Ш. Мәржәниҙең рәсеме күрһәтелә.)

1892 йылда Ҡазанда баҫылған бары 15 битлек «Ш. Мәржәни мәрҫиәһе» – шағир үҙе иҫән саҡта сыҡҡан берҙән-бер китабы. (Әҫәрҙән өҙөк тасуири уҡыла)

1894 йылда мәғрифәтсе тормошонда ҙур осрашыу булла. М. Аҡмулла Өфөгә килеп, Р.Фәхретдинов менән осраша. Мәжлестә М. Өмөтбаев менән икеһе әйтеш ойошторалар. Матур, үҙенсәлекле шиғри бәйге өлгөһө, үкенескә ҡаршы, һаҡланмаған.

Р. Фәхретдинов М. Аҡмуллаға китабын сығарышырға ярҙам итергә теләй, тик М.Аҡмулла эште аҙаҡҡараҡ ҡалдырыуҙы хуп күрә.

1892 йылда 61 йәшлек сағында М.Аҡмулла Сәғирә Юлдыбаева исемле йәш башҡорт ҡыҙына өйләнә. Ул – М. Аҡмулланың никахлашҡан берҙән-бер ҡатыны.

Ләкин Сәғирә, ике йыл бергә йәшәгәндән һуң, унан баш тарта. М.Аҡмулла сәбәбен асыҡлауҙы, ҡатынын кире ҡайтарыуҙы һорап, Өфөгә Диниә назаратына, ҡазый Р. Фәхретдиновҡа бара.

Һөләймән ҡыҙы Сәғирәгә илгиҙәр шағирҙың тормошо оҡшамай, күрәһең. М. Аҡмулла был ваҡытта еңел арбаһында ауылдан-ауылға йөрөп, ғилемгә өндәп, ҡаҙаҡҡа ла, башҡортҡа ла, берҙәй үк мәғрифәт йырын йырлай. Ауырлыҡтан, тигеҙһеҙлектән сығыу, яҡшы тормошҡа ирешеү юлдарын ул белемдә күрә.

**Уҡытыусы:** «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!» шиғыры 1931 йылда табыла. Белем нуры һибеүсе мәғрифәтсе М.Аҡмулла үҙ осоро өсөн яҡтылыҡ һибеүсе шәм була.

Уҡыусылар был өҙөк уның ҡайһы әҫәренән:

*Етенсе ҡиммәт нәмә — ихлас, тигән,*

*Ихласһыҙҙың эше ҡабул булмаҫ, тигән.*

*Аҡыллылар ошо һүҙҙе белһә кәрәк:*

*Иман, аҡыл, әҙәп, ихлас — юлдаш, тигән.*

Яуаптар: “Нәсихәттәр” шиғырынан. Шиғыр бөгөнгө көндә лә актуаль проблемаларҙы күтәрә. Аҡмулланың һүҙҙәре хаҡ булыуын раҫлай.

Ә хәҙер беҙ һеҙҙең менән дәресебеҙҙең икенсе өлөшөнә күсәбеҙ. Викторина һорауҙарына яуап бирәйек. Был һорауҙарға яуап биреп, М. Аҡмулла ижады буйынса алған белемдәрегеҙҙе күрһәтерһегеҙ, тип ышанам. Эште төркөмдәрҙә эшләйбеҙ.

**Һорауҙар:**

М. Аҡмулла нисәнсе йылдарҙа йәшәгән? **(1831-1895)**

Ул ниндәй мәҙрәсәләрҙә белем алған? **(Туҡһанбайҙа, Мәнәүеҙтамаҡта, Әнәстә, Стәрлебашта, Троицкиҙа)**

Ни өсөн уны Аҡмулла тип атайҙар? **(Ҡаҙактар уға тура һүҙлелеге, уҡымышлылығы өсөн Акмулла исемен бирәләр)**

Әҙиптең ниндәй шиғырҙарын беләһегеҙ? **(“Башкорттарым, укыу кәрәк!”, “Минең яткан урыным – зиндан”, “Нәсихәттәр”, “Бәхет”, “Тиһеңме?”, “Донъя”, “Көн”, “Күҙ” һ.б.)**

Аҡмулла ҡайҙа ерләнгән? **(Миәс ҡалаһында)**

“Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!” шиғырынан бер өҙөк һөйләгеҙ.

Аҡмулла премияһы лауреаттары кемдәр? **(Р. Шәкүр, Ә. Вахитов, З. Басыров, Р. Сәхәүетдинова, З. Исмәғилев, Р. Солтангәрәева һ.б.)**

Аҡмулланың исемен мәңгеләштереү өсөн республикала нимәләр эшләнгән? **(1981 йылда Туҡһанбай ауылында М. Аҡмулла музейы асылды, 1980 йылда Миәкә район Советы ҡарары менән М. Аҡмулла исемендәге премия булдырылды, "Башҡортостан" киностудияһы "Аҡмулла" тигән документаль фильм төшөрҙө, З. Исмәғилев И. Дилмөхәмәтов либреттоһына "Аҡмулла" операһын яҙҙы)**

Өфөләге ҡайһы уҡыу йорто Аҡмулла исемен йөрөтә? **(БДПУ)**

Аҡмулла мөрәжәғәт иткән жанр **(ҡобайыр).**
*"Һин дә инде һөнәргә ынтыл, хәрәкәт ҡыл,*
*Талпынып һөнәр өсөн былдай саҡта!..."* Был юлдар ҡайһы шиғырҙан? **("Уяныу").**
"Нәсихәттәр" шиғырындағы етенсе ҡиммәт нәмә? **(ихлас).**
Аҡмулла ижадының төп темаһы **(мәғрифәтселек).**

**Уҡытыусы:** Эш тамам булғас, төркөмдәр яуаптар менән алмашына, төркөм етәкселәре алмашлап дөрөҫ яуаптарҙы әйтә. Һанай барабыҙ, билдәләребеҙҙе ҡуябыҙ.

**IV. Йомғаҡлау.**

**Уҡытыусы.** Беҙ пресс-конференцияла ниндәй проблема күтәрҙек? **(Аҡмулланың әҫәрҙәрендә әйтелгән һүҙҙәрҙең һәр ваҡытта ла, һәр кемгә лә дөрөҫ әйтелеүен иҫбат иттек)**
– Кемдәр булып сығыш яһанығыҙ?
– Ниндәй эш төрҙәренә өйрәндегеҙ? **(Хәбәрселәр, журналистар, тарихсы роленә инеп ҡараныҡ)**

М. Аҡмулла йондоҙо, уның шиғриәте йылдан-йыл сағыуыраҡ балҡый. Ул, М. Горькийҙың үҙ йөрәген йолҡоп алып, факел итеп яндырған Данкоһы шикелле, ғүмерен халҡына арнай, ауыр һәм ҡараңғы замандарҙа тынмайынса мәғрифәт йырын йырлай. Шуға ла уның исеме халыҡ хәтерендә, халыҡ уйында. Аҡмулла – һәр заман өсөн дә хаҡ һүҙҙәр яҙып ҡалдырған мулла.
Аҡмулланың хаҡ һүҙҙәре
Бөгөн дә бик ҡәҙерле.
Өгөт-нәсихәттәре лә
Беҙҙең өсөн фәһемле.

**Әҙәбиәт:**
1. www.akmulla.ru М.Аҡмулла тураһында сайт.

2. Вилданов Ә.Х. Аҡмулла. (Мифтахетдин Аҡмулланың шиғырҙары башҡорт телендә). – Өфө, 1981.
3.Башҡорт теле һәм әҙәбиәте: Рус мәктәптәренең 9-сы класында уҡыусы башҡорт балалары өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәреслеге. – Өфө: Китап, 2006.
4. Башҡорт шиғриәте антологияһы. Боронғонан алып ХХ быуат аҙағына тиклем осор. – Өфө: Башҡортостан "Китап" нәшриәте, 2001.
5. Аҡмулла. Шиғырҙар. – Өфө:Китап, 2006.
6. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 2 том. XIX-XX быуат башы әҙәбиәте. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990.
7. Шәкүров Р. Шағир юлы Туҡһанбайҙан башлана // Ағиҙел. – 1981. –№10. – 103-112 биттәр.
8. Вилданов Ә. Шағир сәскән шиғри гәүһәрҙәр // Ағиҙел. – 1981. – №11. – 95-99-сы биттәр.
9. Әсфәндиәров Ә. Тарихи документтар эҙенән // Ағиҙел. – 1981. – №11. – 100-105-се биттәр.

**Кәбирова А.Ф.,**

Сибай ҡалаһының 12-се урта

дөйөм белем биреү мәктәбе

## ӘНҮР ВАХИТОВТЫҢ "ИР ҠАНАТЫ –АТ БУЛА" ӘҪӘРЕН ӨЙРӘНЕҮ

(6-сы класта үткәрелгән кластан тыш дәрес өлгөһө)

Тема: Әнүр Вахитовтың "Ир ҡанаты –ат була" әҫәрен өйрәнеү.

Дәрестең маҡсаты : 1. Әнүр Вахитовтың биографияһы, әҫәрҙең I бүлегенең йөкмәткеһе менән таныштырыу; башҡорттоң иң яраткан хайуаны – аттың әһәмиәте, ат образының әҙәбиәттә һәм халыҡ ижадында сағылышы, ат исемдәрен, төҫтәрен өйрәнеү.

2. Атҡа ҡарата ихтирам, хөрмәт тәрбиәләү.

3. Ижади фекерләү, аңлы уҡыу һәләтлектәрен үҫтереү.

Йыһазландырыу: аттар һүрәте, аттың ҡулланылышы тураһында мәғлүмәт яҙылған слайд, китаптарҙан күргәҙмә.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу.

– Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Бөгөн беҙ һеҙҙең менән белгәндәребеҙҙе ҡабатларбыҙ, шулай уҡ өҫтәлмә мәғлүмәт тә алырһығыҙ, тип ышанам.

II. Әнүр Вахитовтың биографияһы менән таныштырыу.

Әнүр Вахитовтың исем-фамилияһы һәм йәшәгән йылдары (1932-1984) таҡтаға яҙылған.

Әнүр Вахитов 1932 йылда Ғафури районының Туғай ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлай. Ул күренекле ғалим һәм яҙыусы. Уның әҫәрҙәре халыҡ ижадын бик һәйбәт белеүе,уның традицияларын әҙәбиәттә оҫта файҙаланыуы менән айырылып тора.

Бөгөн беҙ һеҙҙең менән Әнүр Вахитовтың бер әҫәренән өҙөк менән танышасаҡбыҙ.

III. Инеш һүҙ.

Һеҙҙең күреүегеҙсә беҙҙең бөгөнгө дәрес аттарға арналасаҡ.

Донъялар үҙгәрә бара, ә тормош дауам итә. Ваҡыт менән фән дә алға тәгәрәй. Шулай булһа ла һуңғы ваҡытта беҙ үҙебеҙҙең тамырҙарыбыҙҙы эҙләй башланыҡ, иманыбыҙға ҡайтабыҙ. Ошондай ваҡытта атҡа йөҙ менән боролоу тәбиғәткә боролоу менән типә-тиң. Аттар тураһында ата-бабаларыбыҙ тәжрибәһен онотмайыҡ, туплайыҡ, өйрәнәйек. Ул үҙе бер оло фән,ғилем!

IV. Дөйөм төшөнсә.“Аттар, аттар!”

Ер йөҙөндә ат тоҡомдары бик күп. Улар рәтенә зебралар, ишәктәр, азиат ишәктәре (куланг, анагр, кианг) инә. Аттарҙы V-VI мең йыл элек ҡулға эйәләштергәндәр. Иң сыҙамлы яҡшы тоҡом аттар Монголияла, Ҡырғыҙстанда, Башҡортостанда, Ҡаҙағстанда үрсетелгән. Аттың үҫеп етеү осоро 4-5 йәшендә була. Ат йылына бер генә ҡолон килтерә. Яҡшы бейәнән 15-20 кг һөт алырға була. Ат 25-30 йәшкә тиклем йәшәй. Уны 15-20 төр эштә ҡулланып була:

1. Хужалыҡ өсөн яраҡлашҡан аттар:
- Йөк ташыу өсөн
- Һыбай йөрөү өсөн.

2. Спорт аттары була.

Ер йөҙөндә 300 төр ат билдәле, ә Рәсәйҙә 50 төрө бар.

V. Һуғыш йылдары аттары.

“Шайморатов генерал” йырын тыңлау.

-Был йыр кемдәр тураһында? (башҡорттар, М.Шайморатов тураһында)

– Шайморатов менән башҡорттар ниндәй һуғышта ҡатнашҡандар? (Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡандар)

– Башҡорт аттары Рәсәй менән берлектәге бик күп һуғыштарҙа ҡатнашҡан. Һуғыш йылдарында ир-егетте атһыҙ күҙ алдына ла килтереп булмаған. Ат уның иң беренсе ҡоралы булған. Тарих төпкөлөнә күҙ һалһаң ниндәй генә һуғыштарҙа ҡатнашмаған башҡорт егете үҙенең аты менән.

VI.Текст өҫтөндә эш.

Ә хәҙер дәреслектәрҙе астыҡ. Беҙ һеҙҙең менән Әнүр Вахитовтың “Ир ҡанаты – ат” әҫәре менән таныша башлайбыҙ.

Проблемалы һорау : Ни өсөн “Ир ҡанаты – ат?”

Дәрес аҙағында ошо һорауға яуап бирербеҙ.

1. Һүҙлек эше.

Ҡомарлыҡ – мауығып, бирелеп;

Шепшә – иҫәр, бәйләнсек һүҙле, теленә нимә килә шуны һөйләүсе;

Шырмый – тел төбө менән кешене әүрәтә, йәнгә аҙыҡ бирә.

2. Уҡыу өлгөһө.

3. Сылбыр менән уҡытыу.

4. Һайланма уҡыу.

– Ни өсөн Мөхәмәтулла бабай ниндәй төҫлө аттарҙы ярата? (ерән)

– Тағы ниндәй төҫлө аттар була? (балаларҙан һорау)

5. Эйе, аттың төҫө, билдәләре буйынса ошондай төрҙәргә айырып йөрөтәләр: күк ат – белая, көрән – бурая, бүртә – караковая, бурыл – чалая, туры – гнедая, саптар – игреневая, буҙ – серая, алмасыбар – чубарая в яблоках, ҡара – вороная, ҡола – буланая.

Ә “Аҡһаҡ ҡола” исемле башҡорт халыҡ эпосында аттың 9 төҫө бирелгән.

– Мөхәмәтулла бабайҙың үҙ эшен яратыуы ниндәй эпизодтарҙа күренә?

– Ат тураһында нимә тип һамаҡлай?

– Был нимә, шиғырмы?(ҡобайыр)

– Ә нимә һуң ул ҡобайыр?

(Ҡобайыр маҡтауҙы, данлап йырлауҙы аңлата).

– Әҫәрҙән ат исемен табығыҙ? (Саптар)

– Тағы ниндәй ат исемдәрен,ҡушаматтарын беләһегеҙ?

Шулай уҡ тағы ошондай ат исемдәре-ҡушаматтары була: Саптар, Йондоҙ, Аҡбәкәл, Аҡбуҙат, Йылғыр, Ҡарлуғас, Ҡашҡар, Турат, Ерән, Ҡара юрға.

Саптар бейәне Мөхәмәтулла бабай ҡайҙа оҙата? (һуғышҡа)

VII. Аттың яҡшыһы алға сыға,

Егеттең яҡшыһы данға сыға.

Башҡорт аты илен һәм халҡын быуаттар буйы данға күмгән. Уралдың ҡаты тәбиғәтенә яраҡлашҡан сыҙам башҡорт аттары бөтә Рәсәйҙә абруйлы булған. Күренекле башҡорт шәхестәрен атһыҙ күҙ алдына килтереүе ҡыйын.

Мәҫәлән, Муса Мортазин.

Тағы кемдәрҙе беләһегеҙ? (Таһир Күсимов, Миңлеғәле Шаймортаов, Зәки Вәлиди).

Шулай уҡ Салауат Юлаев, Ҡараһаҡал, Батырша, Ҡаһым түрә. Улар аттарҙы һайлай ҙа, ҡарай ҙа, ярата ла белгәндәр. Ат менән ир-егет һәр ваҡыт бергә. Егеттәрҙең батырлығын, көсөн дә ат менән сағыштырғандар.

- Аттың матурлығы башында ,

Егеттең матурлығы түшендә.

- Ат тауҙа,егет яуҙа һынала.
- Аттың яҡшыһы алға сыға,

Егеттең яҡшыһы данға сыға.

– Мәҡәлдәрҙе аңлатыу, уҡытыу.

Йырҙарҙан өҙөктәр :

- Ҡайҙа ғына булмай,

Ниҙәр генә күрмәй,

Ир-егеткәй менән ат башы.

Ниндәй генә йырҙы алһаң да, егеттәр ат өҫтөндә һынландырылған.

- Салауат менгән кир аты

Батыр ғәскәрҙәргә юл башлай.

Кир ат өҫтөндәге Салауат,

Яуға дәртләндереп, йыр башлай.

“Батырҙар йыры”н тыңлау.

VIII. Ат образы башҡорт әҙәбиәтендә.

1. Ат образын башҡорт яҙыусыларының бик күп әҫәрҙәрендә, һәр төрлө жанрҙа табырға мөмкин. Башҡорт әҙәбиәте был йәһәттән бик күп кенә тәжрибә туплаған.

– Хәҙер ат тураһында уҡылған әҫәрҙәрҙе иҫкә төшөрәйек. Ат тураһында ниндәй әҫәрҙәр уҡыныҡ? (С. Агиш “Турыҡай”, Ә. Вахитов “Ир ҡанаты – ат була”)

2. Һеҙ шулай уҡ ҙур кластарҙа Рәми Ғариповтың “Саптар ат” һәм башҡа әҫәрҙәр менән танышырһығыҙ. Ат тураһында ниндәй генә әҫәрҙәр юҡ! Һеҙ уларҙы уҡып таныша алаһығыҙ.

3. Китаптар күргәҙмәһе.

IX. Эт – кешенең дуҫы, ат – ярҙамсыһы, тоғро юлдашы.

Эт – кешенең дуҫы, ат – ярҙамсыһы, тоғро юлдашы булған. Бигерәк тә ауыл хужалығында киң файҙаланылған. Хужалыҡ өсөн яраҡлашҡан аттарҙы ике төркөмгә бүлеп йөрөтәләр:

1. Йөк аттары (һыбай йөрөү өсөн)

2. Сабыш аттары.

Йөк аттарын нимәләр эшләгәндә ҡулланғандар?

(Ер һөрөү, тырматыу, урман эшендә.)

Аттарҙың һунар өсөн дә әһәмиәте бик ҙур булған. Шулай уҡ почта хеҙмәтен дә үтәгәндәр.

X. Башҡорт ҡымыҙы.

“Ҡымыҙ”көйөн тыңлау.

Башҡорт аты һаулыҡ өсөн дә ҡиммәтле эсемлек ҡымыҙ етештереүҙең дә ҙур сығанағы булып тора. Бейә һөтө күп ауырыуҙарҙан дауалай. Башҡортостанда Л.Толстой, А.Чехов ҡымыҙ менән дауаланғандар.

Ат кешегә нимә бирә? (ҡымыҙ, өҫ кейеме, ит, аяҡ кейеме, ҡумта һ.б. )

Ҡымыҙ өсөн һауыт-һаба: турһыҡ, көрәгә, сеүәтә, баш күнәк (биҙрә)

XI. Йомғаҡлау.

Аттың файҙаһы бик ҙур икән. Шуның өсөн йылҡысылыҡты үҫтерергә, хужалыҡтарҙағы аттарҙы күбәйтергә кәрәк.

XII. Рефлексия.

Шулай итеп, ни өсөн ирҙең ҡанаты ат була икән?

Эйе, сөнки ир-егеттәргә ат һәр ваҡыт тоғро юлдаш та, ярҙамсы ла. Улар ат менһә, ҡанат үҫкәндәй елеп йөрөй. Юҡҡа ғына халыҡ “Атһыҙ ир – ҡанатһыҙ ҡош” тип әйтмәгән. Аттарға мәрхәмәтле булайыҡ!

XIII. Өйгә эш. Аттар тураһында бәләкәй мәҡәлә яҙырға.

# ЗАМАНСА КЛАСТАН ТЫШ УҠЫУ ДӘРЕСЕ

***Фаршатова Ә.Ә.,***

Яңауыл ҡалаһының

1-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

## Рауил Бикбаев. “Даламды һағынғанда”

**(5-се класс өсөн кластан тыш уҡыу дәресе өлгөһө)**

**Уҡытыусы эшмәкәрлегенең маҡсаты :** үтелгәндәргә таянып, Ватан төшөнсәһе, уны яҡлау,һаҡлау кәрәклеген уҡыусыларға төшөндөрөү; Башҡортостандың халыҡ шағирҙарының ижады менән ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Дәрес тибы:** бәйләнешле һөйләм үҫтереү дәресе.
**Көтөлгән шәхси, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләре:**
**Шәхси үҫеш кимәле:** белем алыу өсөн төрлө сығанаҡтар ҡулланыу; ижади-эҙләнеү эше менән шөғөлләнеү; телмәр мәҙәниәтен камиллаштырырыуға ынтылышты үҫтереү.
**Метапредмет кимәле**: төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте ҡуллана белеү, алған белемде системалаштырыу; башҡаларҙы тыңлау, үҙ фекереңде яҡлай белеү; башҡорт халҡының арҙаҡлы улдары һәм ҡыҙҙары тураһында белемде тулыландырыу; үҙ-үҙеңә баһа биреүҙе тормошҡа ашырыуҙы дауам итеү.
**Предмет үҙләштереү кимәле:** тасуири, етеҙ, шыма уҡыуға өлгәшеү; текст, китап менән эш итеү алымдарын өйрәнеүҙе дауам итеү, кәрәкле материал туплау; бәйләнешле телмәр үҫтереү; үтелгән орфограмма ҡағиҙәләрен ҡабатлау.

| **Тема** | Кластан тыш уҡыу. Рауил Бикбаев. “Даламды һағынғанда” |
|---|---|
| **Маҡсат** | Р.Бикбаевтың ижады менән ҡыҫҡаса таныштырыу. Тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү.<br>Һөйләм телмәрен, фекерләү һәләтен, анализлау, синтезлау күнекмәләрен үҫтереү.<br>Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелек сифаттары тәрбиәләү.<br>Тыуған ергә мөхәббәт тәрбиәләү; тыуған ерҙең ҡәҙерен белергә, унын менән ғорурлана белеү хистәрен тәрбиәләү. |
| **Планлаштырылған һөҙөмтә** | Шиғырҙың йөкмәткеһен аңлау, үҙ телеңде һәм илеңде хөрмәт итеү, аралашыуҙы мәҙәниәттең әһәмиәтле бер өлөшө |

| | |
|---|---|
| | итеп таныу |
| **Предмет-ара бәйләнеш** | Рус теле, Башҡортостан географияһы |
| **Ресурстар:**<br>**- төп**<br>**- өҫтәмә** | Хажин В.И., Вилданов Ә.Х. 5-се класс өсөн дәреслек<br>Компьютер, экран, презентация, Р.Бикбаев портреты, “Даламды һағынғанда” шиғыры |
| **Эште ойоштороу төрҙәре** | Фронталь, индивидуаль, парлап эшләү. |

| **Үткәреү технологияһы** | **Һәр этаптың өйрәтеү һәм үҫтереү биремдәре. Уҡытыусы эшмәкәрлеге.** | **Уҡыусылар эшмәкәрлеге** |
|---|---|---|
| **I этап. Ойоштороу.**<br>**Маҡсат**: белем алыуҙы мотивлаштырыу. | **I этап. Ойоштороу.**<br>2-се слайд<br>а) – Хәйерле көн алһыу таңдарға!<br>Хәйерле көн һайрар ҡоштарға!<br>Хәйерле көн<br>зәңгәр күктәргә!<br>Хәйерле көн<br>яҡын дуҫтарға!<br>б) Һәр әҙәби уҡыу дәресендә ҡуллана торған ҡағиҙәләрҙе иҫкә төшөрөгөҙ әле. | **I этап. Ойоштороу.**<br>**1. Тулы һөйләмдәр менән дөрөҫ итеп яуап бир!**<br>**2. Иғтибар менән тыңла!**<br>**3. Кеше фекерен ҡабатлама, үҙ фекереңде әйт!** |
| **II этап. Актуалләштереү.**<br>**Маҡсат:** алдағы дәрестә алған белемдәрҙе иҫкә төшөрөү | **II этап. Актуалләштереү.**<br>Н. Әминеваның “Тыуған ер” шиғырының ике юлын укытыусы яттан һөйләй.<br>– Балалар, был шиғыр юлдары һеҙгә танышмы? Кем дауам итә ала? | **II этап. Актуалләштереү.**<br>- Беҙ был шиғырҙы үткән дәрестә өйрәнгәйнек.<br>(Уҡыусылар шиғырҙы һөйләгәндә слайдта Башҡортостан тәбиғәте тураһында рәсемдәр күрһәтелә.) 5-9-сы слайдтар<br>– Тасуири уҡыу күнегеүҙәре.<br>*(Шәхси, рефлексив, универсаль укыу эшмәкәрлеген формалаштырыу).*<br>***Үҙбаһа.*** |
| **III этап. Уҡыу мәсьәләһе куйыу.** | **III этап. Уҡыу мәсьәләһе ҡуйыу.**<br>1. – Балалар, һеҙ тыуған ил тигән төшөнсәне нисек | **III этап.**<br>1.– Дөрөҫ, балалар. Тыуған ил ул – тыуған өй, тыуған мәктәп, тыуған ҡала, һин беренсе тәпәй баҫып |

| | | |
|---|---|---|
| | аңлайһығыҙ?<br>– Әйтегеҙ әле, тыуған ил ҡайҙан башлана?<br><br>**“Фекерҙәр кәрзине” алымы**<br>-Уҡыусылар, тыуған ил темаһына ҡараған һүҙҙәрҙе ошо кәрзингә йыяйыҡ.<br><br>2.–Һеҙгә атай-әсәйегеҙ, туғандарығыҙ ҡәҙерлеме?<br><br>3. Шулай булғас, тыуған илебеҙ, еребеҙ ҙә ҡәҙерле, сөнки беҙ шунда тыуғанбыҙ, беҙҙең ата-әсәйҙәребеҙ, олатай-өләсәйҙәребеҙ ҙә шунда тыуған. Шуға күрә беҙ балалар, тыуған ерҙең ышаныслы улдары, ҡыҙҙары булып үҫергә тейеш. Тыуған илдең, тыуған ерҙең ҡәҙерен белеп, уға кәрәкле кешеләр булып үҫегеҙ.<br>4. – Халҡыбыҙҙың данлыҡлы улдары күп. Һеҙ арҙаҡлы шәхестәрҙән кемдәрҙе беләһегеҙ?<br><br>5. Шуларҙың береһе-Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев менән танышыуыбыҙҙы дауам итербеҙ.<br>6.Уҡытыусының шәхси сайтында эш.<br>**Коллаборатив викторина һорауҙарына яуап** | атлап киткән ер ул. Бына шунан башлана тыуған ил.<br><br>**“Фекерҙәр кәрзине” алымы**<br>Таҡтаға кәрзин рәсеме эленә. Һәр бер уҡыусы сығып был темаға ярашлы һүҙҙәр яҙа.<br><br>2.Уҡыусыларҙың ике-өсө туғандары тураһында һөйләй.<br><br>4.Үтелгәндәргә таянып уҡыусылар менән әңгәмәләшеү.<br><br>5. Бер уҡыусы Р. Бикбаевтың биографияһын иҫкә төшөрә (11-12-се слайд)<br><br>Уҡыусылар компьютерҙа викторина һорауҙарына яуап бирәләр.<br>*(Регулятив уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу)* |

| | | |
|---|---|---|
| | **биреү.http://anvarovna.jimdo.com/** | |
| | Ә хәҙер экрандағы танышасаҡ шиғырҙың исеменә иғтибар итегеҙ. Нисек уйлайһығыҙ: ул нимә тураһында икән?<br>Уҡытыусының өлгөлө уҡыуы.<br><br>**Даламды һағынғанда.**<br>**Һауаһынан бер һуларға ине,**<br>**Һыуҙарынан бер уртларға ине,**<br>**Туғайында бер туларға ине,**<br>**Ергә ятып бер иларға ине.**<br>**Еләген бер өҙөп ҡабырға ла,**<br>**Саптарында тик бер сабырға ла,**<br>**Йәйрәп яткан далам ҡуйынына**<br>**Таңғы ысыҡ булып тамырға ла,**<br>**Бер моң булып уйылып ҡалырға.** | Был шиғыр тыуған ер тураһында булырға тейеш.<br>*(Танып-белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу).* |
| **IV этап. Һүҙлек өҫтөндә эш.**<br>**Маҡсат:** таныш булмаған яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен иҫтә ҡалдырыу. | **IV этап. Һүҙлек өҫтөндә эш.**<br>Уйылып ҡалырға – хәтерҙә ҡалырға, остаться в памяти<br>Саптар – ат<br>Туларға– метаться, брыкаться, бросаться<br>Ошо һүҙҙәрҙе һеҙ | **IV этап. Һүҙлек өҫтөндә эш.**<br>1. Һүҙҙәрҙе уҡыу.<br>Һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен тормош менән бәйләп асыҡлау.<br>*(Танып-белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу).*<br><br>2)**<u>Һ</u>ауа<u>һ</u>ын, <u>е</u>ргә, <u>е</u>ләген, <u>йә</u>йрәп,** |

| | | |
|---|---|---|
| | телмәрегеҙҙә ҡулланаһығыҙмы?<br>**Дәфтәрҙәрҙә эш.**<br>1)Число, теманы яҙыу.<br>2)Ауыр орфограммалы һүҙҙәрҙе табыу. | **ҡуйынына, уйылып.**<br>Был һүҙҙәрҙең өн моделен һыҙыу. (15-се слайд)<br>Үҙбаһа.<br>**“Райтинг” алымы.**<br>(Уҡыусы үҙенең эшенә баһа ҡуя.Уҡытыусы кәсер һаны аша үҙ баһаһын ҡуя.)<br>(Үҙ хеҙмәтеңде баһаларға өйрәнеү) |
| **Физминут** | **Физминут**<br>**Беҙҙең Башҡортостанда бына ошондай тауҙар, бына ошондай урмандар, бына ошондай йылғалар, бына ошондай ҡырҙар, ҡырҙарында сәскәләр барыһы ла матурҙар.** | **Физминут** |
| **V этап. Уҡыу мәсьәләһен этаплап сисеү: шиғырҙы уҡыу.**<br>**Маҡсат:** уҡыу күнекмәләрен үҫтереү өҫтөндә эшләүҙе формалашты-рыу. | **V этап. Уҡыу мәсьәләһенэтаплапсисеү: шиғырҙы уҡыу.** | **V этап.**<br>**Уҡыу мәсьәләһен этаплап сисеү: шиғырҙы уҡыу.**<br>Балалар гөжләп уҡыйҙар.<br>Айырым балаларҙан уҡытыу.<br>Шиғырҙың иң оҡшаған ерен генә уҡыу.<br>**“Мимика гимнастикаһы” алымы.**<br>(15-се слайд)<br>Төрлө кәйеф менән уҡыу.<br><br>*(уҡыуҙың төрлө төрҙәрен ҡулланырға мөмкин)*<br>*(Коммуникатив, шәхси универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу)* |

| | | |
|---|---|---|
| **VI этап. Әҫәрҙе аңлауҙарын тикшереү.**<br>**Маҡсат:** телмәр күнекмәләрен үҫтереү өҫтөндә эшләүҙе формалашты-рыу | **VI этап. Әҫәрҙе аңлауҙарын тикшереү.**<br>– Был шиғыр ҡасан һәм ҡайҙа яҙылған тип уйлайһығыҙ?<br>Быны ҡайҙан белеп була?<br>Шиғырҙан шул юлдарҙы табып уҡығыҙ.<br>**а) Электрон дәреслектән (5-се класс) Баш-ҡортостан тәбиғәте тураһында видеояҙма ҡарау.** | **VI этап. Әҫәрҙе аңлауҙарын тикшереү**<br>Тыуған яғынан ситтә яҙылған.<br>*(Коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу.)*<br><br>а) Шиғырҙан видеояҙмалағы күренештәргә тап килгән урындарҙы табып уҡыу.<br>*(Танып-белеү уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу)* |
| **VII этап. Әҫәргә анализ яһау.**<br>**Маҡсат**: балаларҙың аралашыу, бәйләнешле телмәр күнек-мәләрен үҫтереү өҫтөндә эшләүҙәрен формалашты-рыу.<br>*Логик дөйөм белеем универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалашты-рыу.* | **VII этап. Әҫәргә анализ яһау.**<br><br>– Әҫәрҙәге төп ҡатнашыусыны табығыҙ.<br>– Шиғырҙың 1-се строфаһын уҡығыҙ.<br>– Ни өсөн автор “бер иларға ине” тип яҙа? | **VII этап. Әҫәргә анализ яһау.**<br>– Автор, лирик герой. |
| | Был юлдарҙы 1 һөйләм менән нисек әйтеп була?<br>Шиғырҙың һуңғы строфаларын шул тәртиптә анализлау. (Парҙарҙа эш) | – Тыуған яғына ҡайтыу – шикһеҙ шатлыҡ килтерә. |
| | Халыҡта “Тыуған ерҙең әреме лә хуш еҫле ” тигән мәҡәл йөрөй.<br>(Мәҡәлде эш дәфтәренә | – Була. Һәр кемгә үҙ тыуған яғы ғәзиз. Өйҙә әҙерләп килгән мәҡәлдәрен уҡып ишеттерәләр.<br>(18-19-сы слайдтар) |

| | | |
|---|---|---|
| | яҙыу)<br>Ошо беҙ уҡыған шиғыр менән был әйтемде бәйләп буламы ? | **Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ер артыҡ.**<br>**Үҙ иле – алтын бишек.**<br>**Иленән айырылған – ҡанаты ҡайырылған.**<br>**Тыуған ерҙәй ер булмаҫ, тыуған илдәй ил булмаҫ.**<br>**Илһеҙ кеше – йырһыҙ һандуғас.**<br>*(Коммуникатив, ижади эҙләнеү, танып-белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу.)* |
| **VIII этап. Тасуири уҡыу.**<br>**Маҡсат:** балаларҙың тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү өҫтөндә эшләү. | **VIII этап. Тасуири уҡыу.**<br><br>- Был шиғырҙы ниндәй тауыш менән уҡырға кәрәк? | **VIII этап. Тасуири уҡыу.**<br><br>Уҡыусыларҙың һәр строфаны дөрөҫ интонация менән уҡыуҙары.<br>*(Коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу.)* |
| | **-**Уҡыусылар, теләүселәргә презентация эшләп килергә ҡушылғайны. Хәҙер Никитаның “С чего начинается Родина?” тигән презентацияһын ҡарарбыҙ.<br><br>Уҡытыусының шәхси сайтында интерактив мультимедиа күнегеү башҡарыу http://farshatova.jimdo.com /<br>“Бөрйән яҡтары” | Презентация ҡарау.<br>Һөйләмдәрҙе башҡорт теленә тәржемә итеү. *Коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу)*<br><br>**Уҡыусылар компьютерҙа күнегеүҙәр башҡаралар. Үҙ-ара эштәренә баһа бирәләр.** |
| **Йомғаҡлау** | Шиғырҙан өҙөктө хор менән уҡыу. Күсереп яҙыу.<br>(18-се слайд)<br>**Тыуған илдә- барыбыҙ бер туған,**<br>**Бик ҡәҙерле беҙгә ул шуға.** | **Мин нимә белдем?**<br>**Нисек белдем?** |

| | | |
|---|---|---|
| | **Тыуған ил ул була бер генә,**<br>**Тыуған илдең көҙерен бел генә.**<br>**(З.Туфайлова)** | **“Телеграмма” алымы.**<br>**Парҙар менән эш.** Ҡыҫҡа һөйләм менән иптәшеңә темаға ярашлы теләк яҙыу. |
| **X этап. Өйгә эшбиреү.** | **X этап.Өйгә эш биреү.** | **X этап. Үҙбаһа**<br>Кемдәр был дәрестә бишлегә яуап бирҙем тип уйлай?<br>Кем бер аҙ тырышырға кәрәк тип уйлай? |
| | **-** Һеҙ өйҙә ниндәй эш эшләрһегеҙ? | **Өйгә эш биреү.**<br>1. Шиғырҙы тасуири уҡырға<br>2. “Нимә ул Ватан?” тигән темаға проект эше башларға мөмкин.<br>3. Тыуған яҡ тураһында һүрәт төшөрөргә мөмкин.<br>4. Бүтән шағирҙарҙың тыуған яҡ тураһында шиғырҙары бармы икән? Шуларҙы табып алып килергә. *(Рефлексив, шәхси универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу)* |

**Әҙәбиәт:**

1. Юлмөхәмәтов М.Б. Башҡорт теле һәм туған әҙәбиәт дәрестәрен үҙ-ара бәйләнештә уҡытыу. – Өфө: Китап, 2008.
2. Тәнҡитле уҡытыуға бәйле интернет селтәренән мәғлүмәттәр.
3. Уҡытыусының шәхси сайттары http://farshatova.jimdo.com/
http://anvarovna.jimdo.com/

***Хәмиҙуллина З.Э.,***

Һамар өлкәһе Оло Чернигов районы

Украинка ауылы “Уҡытыу үҙәге”

урта дөйөм белем биреү мәктәбе

# АҠМУЛЛАНЫҢ АҠ ЮЛЫНАН

(7 синыфта Мифтахетдин Аҡмулланың тормош һәм ижад юлдары буйынса дәрес-сәйәхәт)

**Дәрес темаһы:** Мифтахетдин Аҡмулланың тормош һәм ижад юлдары буйынса дәрес-сәйәхәт.

**Маҡсат:** 1. Белем биреү: Мәғрифәтсе-шағирҙың тормош һәм ижад юлдарын өйрәнеү, уның әҫәрҙәренә, сәсәнлек традицияларына ҡыҙыҡһыныу уятыу.

2. Тәрбиә биреү: Уҡыусыларҙа кешелеклелек, бер-береңә ихтирамлыҡ тойғолары, әҙәплелек сифаттары тәрбиәләү.

3. Телмәр үҫтереү: Уҡыусыларҙың бәйләнешле телмәрен һәм һүҙлек байлығын үҫтереү.

**Йыһазландырыу:** М. Аҡмулланың портреты, БР һәм Миәкә район картаһы, М.Аҡмулла музейы һәм «Урал батыр» конкурсы тураһында плакаттар, «Аҡмулла бәйете» аудиояҙмаһы, слайдтар.

**Дәрес эпиграфтары :** *«Әйҙәгәнһең якты юлга,*
*Өндәгәнһең гел якшыга ...*
*Тереләрҙән тере булып,*
*Йәшәйһең һин ана шуга!»*
Ф.Рәхимғолова.

*“Аҡмулла Салауаттан һуң беренсе тапкыр үҙ халкына, башҡорттарым , тип ихлас күнелдән өндәшә, уны айырыуса бер ярһыу менән мәғрифәткә, ғилемгә саҡыра.*

Ә. Харисов.

**Дәрес барышы.**

<u>I. Ойоштороу мәле</u> (2 минут).

– Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Балалар, һеҙ дәрескә әҙерме?

– Ҡыңғырау шылтыраны,
Дәрес башлана хәҙер.
Беҙ инде матур итеп
Яуап бирергә әҙер.

(Дәрестең темаһы һәм маҡсаты менән танышыу)

– Бөгөнгө дәресебеҙҙе сәйәхәт формаһында үткәрәбеҙ Беҙҙең яҡташ шағирыбыҙ Р.Ниғмәтиҙең шиғыр юлдарын бергәләп уҡыйыҡ.

Нindәй тиңһеҙ шатлыҡ та һуң –
Белмәгәндәрҙе белеү.
Парта артында көйөнсә
Донъяны гиҙеп йөрөү.

– Балалар, беҙ һеҙҙең менән Башҡортостан Республикаһының Миәкә районына юл тотабыҙ (слайдтар һәм карталарҙан күрһәтеү). Дәресебеҙ “Аҡмулланың аҡ юлынан” тип атала. Кем ул Аҡмулла? Аҡ юл һүҙбәйләнеше нимә аңлата? Ошо һорауҙарға беҙ яуап табырға тейешбеҙ. Башта танышып алайыҡ. Мин Украинка урта мәктәбенең башҡорт теле уҡытыусыһы Хәмиҙуллина Зөбәйҙә Энгел ҡыҙы булам (танышыу). Матур башҡорт исемдәренә бай беззең Ырғыҙ буйзары! Беҙгә сәйәхәт итергә туҡталыштар картаһы ярзам итәсәк (слайдта поезд, туҡталыштар картаһы)

II. Өйгә эште тикшереү.

*Беренсе туҡталыш “Тәбиғәт”* (Аҡмулла шиғырҙарында тәбиғәт күренештәре). Юлыбыҙ күңеллерәк булһын өсөн тәбиғәт күренештәре тураһында шиғырҙарҙы яттан һөйләйбеҙ.( Уҡыусылар М. Аҡмулланың “Яҙ”, “Көҙ” шиғырҙарын һөйләй, слайдтар ҡарай). Афарин, балалар! Шағир тәбиғәтте тасуирлау аша ниндәй фекер йөрөтә? (балаларҙан һығымта яһатыу). Эйе, шағир тәбиғәт гүзәллеге менән һоклана, донъя тураһында тәрән фекер йөрөтөүсе аҡыл эйәһе булып күҙ алдына баҫа.

*Икенсе туктальш “Миәкә ере”.* Беҙҙе Миәкә ере, йырҙарҙан таныш булған Дим йылғаһы ҡаршы ала. Бына беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа бөйөк шағирҙың музейы. Экскурсовод шағирҙың тормош юлы менән таныштырып үтә (алдан әҙерләнгән бер укыусы М.Аҡмулланың биографияһы тураһында һөйләй, икенсе уҡыусы слайдтар күрһәтә). Музейҙа оҡшанымы, балалар? (рәхмәт һүҙҙәрен әйттереү – бәйләнешле телмәр үҫтереү). Музей тураһында уйҙарыбыҙҙы ‘Теләктәр китабы”на яҙайыҡ ( яҙма телмәр өҫтөндә эш).

*Өсөнсө туҡтальш “Ял итеү”.* Аҡмулла бәйетен тыңлау (психологик пауза).

*Дүртенсе туктальш. “Сәсәндәр тирмәһендә”* (бәйләнешле телмәр үҫтереү). Нөктәләр урынына һүҙҙәр ҡуйырға ( Миәкә районы укыусыһының шиғыры)

МИН ДӘ КӨРӘШСЕ

Аҡмулла бар ....... -
Яҡтылыҡтың ...... .
Ә мин ошо .........
Ынтылыусы ...... .

Һин сәсән, мин дә ..... -
Үз телемдә ..... сәсәм.
Аҡмулла юлы ... .... , тип
Өйрәтә мине .... .

Ғилем, . . . . киңлегендә,
Һис шикһеҙ, һин - . . . . . . . .
Ә мин – . . . . . мәктәбендә
Тимәк, . . . дә көрәшсе.

Был ижади эште башҡарғас, иҫтәлеккә буклеттар бүләк итеү.

<u>III. Яңы теманы аңлатыу</u>. *Бишенсе туҡталыш. “ Шиғыр-ҡобайырҙар”.*

Кобайыр һүҙенең мәғәнәһе (әҙәбиәт теорияһы). Коба – дан, тимәк дан йырлау.

1. Аҡмулланың ҡайһы шиғырҙарын ҡобайыр тип атарға була?( Һығымта яһатыу).

– Эйе, “Аттың ниһен маҡтайһың”, “Бәхет” тигән шиғырҙарын . Был шиғырҙарҙың төп фекере нимәлә? Нимәләр тураһында һүҙ бара? (укыусыларҙан яуап алыу). Эйе, был шиғырҙарҙа әхлаҡ-этик сифаттар төп урында тора. Синонимдарҙы табып дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ.

IV. <u>Яңы теманы нығытыу</u>. *Алтынсы туҡталыш. ”Уйланыу йәйләүе”.* Кем ул Аҡмулла?

(Укыусыларҙың яуаптары: уҡымышлылығы, тура һүҙле, сәсән телле булғаны өсөн халыҡ уны Аҡмулла тип атай. Аҡмулла – ҡаҙаҡса тура һүҙле, ғәҙел кеше тигән һүҙ).

– Беҙ тағы ла бер һүҙбәйләнешкә иғтибар итәйек: “аҡ юл”. Ни өсөн мин дәресте “Аҡмулланың аҡ юлынан...” тип атаным ?

(Уҡыусыларҙың яуаптары – аҡ юл – ул таҙа юл, мәғрифәт, ғилем юлы. Аҡмулла ғилемле булыуға саҡырған. Ул үҙе “аҡ тормош юлы” үткән, халҡым тип йәшәгән. Тимәк, беҙ ҙә аҡыл, ғилем юлын һайлай алабыҙ.)

V. <u>Өйгә эш биреү.</u> Сәсәндәр ярышына әҙерләнергә. “Аттың ниһен маҡтайһың” шиғырын ятларға. (2006 йылда Миәкә районында М. Аҡмулланың тыуыуына 175 йыл тулыуына арналған “Урал батыр” конкурсынан слайдтар күрһәтеп, йәш сәсәндәр ярышы тураһында һөйләү). “Урал батыр” конкурсы тураһында видеояҙмалар ҡарарға саҡырыу.

VI. <u>Уҡыусыларҙың белемен баһалау.</u> Рефлексив анализ. Һин дәрестәге эшмәкәрлегеңдән ҡәнәғәтме? (балаларҙы үҙҙәренең, бер-береһенең яуабына ҡарата үҙ фекерен әйтергә өйрәтеү, булған мөнәсәбәтен белдерергә күнектереү).

***Әғәҙуллина Р.Ғ.,***

Дәүләкән районы

Ҡоръятмаҫ урта дөйөм белем биреү мәктәбе

# ТАЛХА ҒИНИӘТУЛЛИНДЫҢ “ӘСӘ ҺӘМ БАЛА” ХИКӘЙӘҺЕНДӘ ӘСӘ МЕНӘН БАЛА МӨНӘСӘБӘТТӘРЕ

**Тема**. Т. Ғиниәтуллиндың “Әсә һәм бала” хикәйәһендә әсә менән бала мөнәсәбәттәре.
**Маҡсат**. Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен асыу; уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү, үҙ фекереңде әйтергә, ҡарашыңды яҡларға өйрәтеү; әсәләргә ҡарата хөрмәт тәрбиәләү, әсә һәм бала мөнәсәбәттәрен асыҡлау.
**Йыһазландырыу**. Дәреслек; яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың китаптары; магнитофон, аудиокассета; әсә менән бала һынландырылған һүрәттәр.

Әсә күңеле – балала,
Бала күңеле – далала.
(Халыҡ мәҡәле)

**Дәрес барышы**

I. **Ойоштороу**. (Ғ. Иҙрисов һүҙҙәре, Р. Хәсәнов көйөнә “Кисер мине, әсәй, ғәфү ит” йыры яңғырай)

**Укытыусы**. Уҡыусылар, был йырҙа ни өсөн бала әсәһенән ғәфү үтенә? (*Вәғәҙә биреп тә, ваҡытында ҡайта алмаған өсөн*)

Әсәйҙәргә бағышланған тағы ниндәй йырҙар беләһегеҙ?
*(“Әсәйҙәр бит яҙ кеүек”, “Минең әсәй гөл ярата ине”, “Әсәй” һ.б.)*

Әсәләр бөйөклөгө шағирҙар ижадында данлана, йырҙарҙа маҡтала, яҙыусыларҙың әҫәрҙәрендә һүрәтләнә. Әсә һөйөүе хаҡында халҡыбыҙ хәтерендә тиҫтәләрсә легендалар һаҡлана. Бөгөнгө дәрес әсәләргә, уларҙың баланы ҡәҙерләү, һөйөү хисенә, фиҙаҡәрлегенә бағышлана.

Яҙыусы Т. Ғиниәтуллиндың “Әсә һәм бала” хикәйәһенең йөкмәткеһе буйынса һеҙ өйҙә эшләп килтергән һүрәттәр дәрес барышында ҡулланылыр.

**II. Төп өлөш .**

1. Хикәйәнең йөкмәткеһе буйынса һорауҙар:

– Әҫәрҙә ниндәй осор сағылдырылған?
– Хикәйә нисек башланып китә?
*(Автор тыуған ауылына ҡайтҡан һайын өлкән йәштәге, һуғыш ауырлыҡтарын үҙ елкәләрендә татыған кешеләрҙең берәм-берәм фани донъяны ҡалдырыуы тураһында әйтеп тора ла шуларҙың береһе – Сафия апай тураһында хикәйәләүгә күсә.)*
– Ни өсөн әҫәрҙең төп геройына “Ир Сафия” тигән ҡушамат тағылған?
*(Ул һуғыш йылдарында ауыр эштәр башҡарып, ил иңенә төшкән ауырлыҡтарҙы үҙенең нескә яурындары менән күтәрешә.)*

*(Әҫәрҙән өҙөк уҡыла)*

– Берҙән-бер улы ниндәй кеше булып үҫә, әсәһенең өмөтөн аҡлаймы? Ейәндәре уны өләсәй тип таныймы?
*(Ҡәҙерле улы елғыуар, әсә ҡәҙерен белмәгән кеше булып үҫә, ә үҙ ғүмерендә бер ҡайтҡан килене менән ейәндәре уны үҙ итеп ҡабул итмәй.)*
**Уҡытыусы**. Улы әсәһен ерләргә ҡайтмай. “Уны көттөләр, ике көн ҡарсыҡтың мәйете үҙ өйөндә ятты, көтөп ятты, әммә улы ҡайтманы”, – ти ҙә автор, “Ә бит уның булмауы ла ихтимал ине…”, – тип уҡыусыла ҡыҙыҡһыныу уята. Артабан яҙыусы беҙгә ниндәй ваҡиғаны бәйән итә?

**2**. <u>Уҡыусыларҙың, үҙҙәре төшөргән һүрәттәргә таянып, хикәйәнең сюжет һыҙығын билдәләүе</u>.
Һүрәттәрҙең тематикаһы:
*Сафияның кескәй балаһы менән госпиталдә ятҡан ире эргәһенә барырға әҙерләнеүе.
*Уның беренсе тапҡыр тимер юл вокзалын, паровозды , вагондарҙы күреүе.
*Башҡорт кешеһенең поезға ултырырға ярҙам итеүе.
*Сафия һәм улы – поезда.
* Сафияның улы – сит кешеләр ҡулында.
*Сафия, сит ҡатын, уның ире һәм милиционер.
*Бала яҙмышы өсөн хәл иткес көрәш.
*Баланы Сафияға кире биреү.

**Уҡытыусы**. Уҡыусылар, ә ни өсөн пассажирҙар ҙа, проводницалар ҙа, милиционер ҙа Сафияға ышанмайынса, нәзәкәтле, матур ханымға ышаналар?
*(Үткер ҡатын һәм уның дәрәжәле ире башҡаларҙа күберәк ышаныс уята, сөнки, беренсенән, Сафия, русса һөйләшә белмәү сәбәпле, хәлде аңлатып бирә алмай. Икенсенән, барыһы ла, матур кейенгән, үҙҙәрен интеллигенттарса тотҡан ҡатын менән ир алдашырға тейеш түгел, тип уйлай.)*

– Яҙыусы был ике ҡатындың төҫ-баштарындағы, рухи булмыштарындағы ҡапма-ҡаршылыҡты нисек күрһәтә? (Әҫәрҙән өҙөк уҡыла)

– Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн был көрәштә Сафия еңеп сыға?

*(Ул – ысын әсәй, үҙ ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, балаһы өсөн ҡаһармандарса көрәшә.)*

**Уҡытыусы**. Әҫәрҙең кульминацияһында яҙыусы эскерһеҙ, саф күңелле, мәкер-хәйлә, алдашыуҙың ни икәнен белмәгән ауыл ҡатынының балаһын ҡайтарып алыу өсөн тиңһеҙ көрәшкә ташланыуын һәм еңеүен һүрәтләй. Автор әсә һөйөүенең тетрәткес оло тойғо икәнлеген күп төрлө психологик һүрәтләү саралары аша еткерә. Иҫ киткес физик һәм рухи көс талап иткән көрәштә әсә яңғыҙы еңә. Әммә улын юғалта яҙыу ҡурҡынысы уның йөрәгенә мәңгегә инеп оялай. Уғры ҡала ҡатыны сабыйын урлай алмаһа ла, Сафияның ғүмерлек тыныслығын ала. Сафия үҙе кеймәһә кеймәй, ашамаһа ашамай, балаһына ел-дауыл тейҙермәй, бер мохтажлыҡ күрһәтмәй үҫтерә. Шуның өсөн улы эгоист, кешелекһеҙ, выжданһыҙ булып үҫә. Был уғрылар һуңлап булһа ла үҙ эштәрен эшләй: *әсә улын "юғалта".*

Сирләп киткәс, ул һуңғы көнөнә тиклем улын көтә, әммә улы ҡайтмай. "Әсә күңеле – балала, бала күңеле – далала" тигән халыҡ мәҡәле был осраҡта дөрөҫ булып сыға.

3. <u>Әҫәрҙең идеяһын асыҡлау</u>. (Экранда һорауҙар яҡтыртыла).
*Хикәйәнең аҙағында яҙыусы ниндәй һүҙҙе ҡат-ҡат ҡабатлап, улының әсәгә булған ғәмһеҙ, мәғәнәһеҙ ҡыланышына ҡаршы ҡуйып, хикәйәне эмоциональ-экспрессив яҡтан көсәйтә?
*Әҫәрҙең **төп идеяһы** нимәлә? (*Балалар ғүмер биргән әсәләренә ҡарата битараф булырға тейеш түгел. Бала тәрбиәләүҙә лә иғтибарлы булырға кәрәк.*)
**Уҡытыусы**. Эйе, әсә баланы яратырға тейеш, шул уҡ ваҡытта уны артыҡ иркәләтмәйенсә ысын кеше итеп үҫтерегә бурыслы.
4<u>. Һүҙлек эше.</u>
Йүргәк, ҡыпһыуыр, яһил.
<u>5. Әңгәмә</u>.
– Әсә булараҡ, Сафияның ғәйебе бармы, әгәр булһа, нимәлә? (*Уның ғәйебе – улына тейешле тәрбиә бирә алмауҙа, артыҡ нык яратыуҙа, ауырлыҡтарҙан ҡурсалауҙа.*)
– Һеҙ Сафия урынында булһағыҙ, баланы нисек тәрбиәләр инегеҙ? Тормошта ошоға оҡшаш хәлдәр бармы? (*Уҡыусыларҙың яуаптары, һығымта.*)
– Әгәр һеҙ яҙыусы булһағыҙ, әҫәрҙең ҡайһы ерен һәм нисек үҙгәртер инегеҙ? (*Яуаптар төрлө: "Мин Сафия апайҙың һуңғы көндәрендә улын ҡайтарыр инем, ваҡытында ҡайта алмаған өсөн ғәфү үтендерер инем", "Улының һуңлаған үкенестәрен күрһәтер инем" һ.б.*)
– Ни өсөн автор хикәйәне тап ошолай итеп тамамлай?
(*Уҡыусы йәки тыңлаусыға көслөрәк тәъҫир итеү, тәрбиәүи йөкмәткеһен тәрәнәйтеү өсөн.*)
– Тормошта ошондай күренешкә шаһит булғанығыҙ бармы?

**6**.<u>Мәҡәл- әйтемдәрҙе уҡыу, мәғәнәләрен асыҡлау</u>.

- ✓ Ожмах әсәләрҙең аяҡ аҫтында.
- ✓ Бал татлы, балдан бала татлы.
- ✓ Бала саҡта һөйҙөрә, үҫә килә көйҙөрә.
- ✓ Алһыу таңды Сулпан уята,

  Әсә күңелен бала йыуата.
- ✓ Ҡояш янында – яҡтылыҡ,

  Әсә янында – йылылыҡ.
- ✓ Балаһыҙ ғүмер – һүнгән күмер.
- ✓ Баланың бармағы ауыртыр,

  Әсәнең йөрәге ауыртыр.

**7.** ***ӘСӘЙ*** һүҙенең һәр хәрефенә һүҙҙәр табыу. (Экран менән эшләү)
Ә – әүҙем, әңгәмәсе,…
С – сәсән телле,сос,…
Ә – әрләүсе (дөрөҫлөккә өйрәтеүсе),…
Й – йылылыҡ өләшеүсе, йыһандай киң күңелле…

### II. Йомғаҡлау

**Укытыусы.** Яҙыусы Т. Ғиниәтуллиндың "Әсә һәм бала" хикәйәһе әсәй ҡәҙерен белергә, хөрмәт итергә өйрәтә.
*("Кисер мине, әсәй, ғәфү ит" йыры яңғырай.*)
Уҡыусылар, был йыр Сафия апайҙың күҙ төбәп үҫтергән, ят тарафтарға китеп олағып, донъяла ғәзиз әсәһенең барлығын онотҡан улы һәм уның ишеләрҙең ғәфү үтенеүе булып яңғыраһын. Бауыр ите – балалар ҡартайған көндәрендә үҙ әсәләрен яҙмыш ҡосағына ташламаһын! Хатта Ҡөрьәндә лә "Әсәһен ҡәҙерләгән – ҡәҙерле булыр" тигән һүҙҙәр бар. Әсәйҙәр хаҡында беҙ бик күп һөйләшә алабыҙ, шулай бит, балалар?

Юлға сығам, әсәй, ҡайтыр юлға,
Утыңды һүндермәй, мине көт.
Был юлы ла әгәр оҙаҡлаһам,
Кисер мине, әсәй, ғәфү ит!

- Бөгөнгө дәрес хаҡында нимәләр әйтерһегеҙ? Нимәләр белдегеҙ?
- Дәрестә әүҙем ҡатнашыуығыҙ өсөн ҙур рәхмәт! Үҙегеҙгә ниндәй баһалар ҡуйыр инегеҙ?

(Балалар үҙҙәренә баһа ҡуялар, аңлатма бирәләр).

## ЗАМАНСА КЛАСТАН ТЫШ САРА

***Йылҡыбаева Г. У.,***

Белорет районы Шығай ауылы

урта дөйөм белем биреү мәктәбе

## ШАТТАР, ТАПҠЫРҘАР КЛУБЫ УЙЫНЫ
### (кластан тыш үткәрелгән сара)

Зал байрамса биҙәлгән. Бер яҡта интерактив таҡта ҡуйылған. Ноутбук проекторға тоташтырылған. Унда "ШТК уйыны (Шаттар, тапҡырҙар клубы уйыны). 7-8 класс уҡыусылары" тигән текст яҙылған.

**Уҡытыусы**. Бөгөн була ШТК –
Рәхәт күңелле уйын!
7 менән 8-ҙәр көс һынаша,
Бына булыр тамаша.

Ҡәҙерле дуҫтар! Беҙ бөгөн грамматика байрамына йыйылдыҡ. Ике команда көс һынашасаҡ. ШТК нимә ул? Уға бары тик зирәктәр, тапҡырҙар, эшкә оҫта, һүҙгә ҡыҫҡа булған уҡыусылар ғына йыйыла.

Бөгөн улар үҙҙәренең тапҡырлыҡта, зирәклектә һынап ҡарайҙар. (Жюри һайлау).

Әйҙәгеҙ ,уларҙы алҡышлап ҡаршы алайыҡ. Һүҙ командаларға. Йәрәбә һалына (кемдәр беренсе башлағанын билдәләү өсөн).

1. Сәләмләү. ("Баш киҫәктәр" – 7 класс командаһы)

1-се команда
Бөтәһенә беҙ баш булып
Йөрөйбөҙ һәр саҡ бергә.
Кем? Ни эшләй? – тип һораһаң
Яуап бирербеҙ һиңә.
Һөйләмдең төп мәғәнәһен
Асып һалабыҙ һеҙгә.
Беҙ булмаһаҡ, аралашыу
Булмаҫ ине был ерҙә.
Һөйләмдең баш киҫәктәре
Һәр саҡ алдан йөрөйбөҙ,
Эйә, хәбәр исеменән
Һеҙҙе беҙ сәләмләйбеҙ!

2-се команда. ("Эйәрсән киҫәктәр" – 8 класс)

Ҡайҙа, күпме, ҡасан, ҡайҙа?
Меңәрләгән һорауға
Беҙ һеҙгә яуап бирербеҙ,
Асыҡлап барыһын да.
Баш киҫәктәргә эйәреп,
Йөрөгәс беҙ һөйләмдә
Кемдең әле беҙ ҙә бөгөн
Һеҙҙе тип сәләмләргә.
Матурлап, тулыландырып,
Төҙөйбөҙ беҙ һөйләмде.
Эйәрсән киҫәктәр өсөн,
Беҙҙең хәбәр йәмле.

**Укытыусы.** Батшалыҡтар! Һүҙебеҙ шул;
Һеҙҙе хөрмәт итәбеҙ
Тел буйынса ШТК-ны
Әле башлап ебәрҙек.
Командаларҙан көтәбеҙ
Тапҡырлыҡ һәм зирәклек,
Һәр һорауға дөрөҫ яуап-
Булһын иҫең китерлек.
1. Һүрәтле шарадалар. (Ике бағананан бер һүҙ төҙөп яҙырға)
Бай (байтал, талпан, билбау, сүлмәк, ташҡын)
Тал. Бил. Сүл. Таш.
Ир (ирек, ашыҡ, атай, ерек, Юлай)
Аш. Ат. Ер. Юл. Мәк. Бау. Тал. Пан. Ҡын. Ек. Ай. Ек. Ык. Ай

2. Йомаҡтар сисеү.
1. Ҡырҙа үҫкән бер бала,
Өйгә килеп моң һала (ҡурай)
2. Кәкре таяҡ, кәкре тимер, үлән ҡыра (салғы)
3. Майлы кайыш юлымда,
Тоталмайым кулыма (йылан)
4. Айғырымдың ҡанаты бар,
Һыуға һалып дәрт һала (имән)
5. Ҡалаһы бар, өйө юҡ,
Диңгеҙе бар, һыуы юҡ (карта)
6. Тәне йылы, ҡаны юҡ (мейес)
7. Утта янмай, һыуҙа батмай (боҙ)
8. Аҫты ла тишек,
Өҫтө лә тишек,
Уртаһында ут та һыу (самауыр)
3. Шарҙар менән эшләү. (Шарҙар эсенә мәҡәлдәр яҙыла, балалар төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе яҙалар)

Нөктәләр урынына кәрәкле һүҙҙәр ҡуйып, мәҡәлдәрҙе уҡырға.
1. Ағас күрке – япраҡ, әҙәм күрке – .........
2. ............аҙ ултырыр, күп һынар.
3. Аҡса иҫәпте ярата, .............. үлсәүҙе ярата.
4. Дуҫ итеп сер әйтмә, дуҫыңдың да ............. бар.
4. Фразеологизмдарҙың мәғәнәләрен әйтеү.
"Баш киҫәктәр"гә:
1. Ут йотоу (ҡайғырыу)
2. Тетмәһен тетеү (әрләү, тиргәү)
3. Баш ватыу (уйланыу)
4. Ҡолаҡҡа керетеү (онотмау)
"Эйәрсән киҫәктәр"гә:
1. Балауыҙ һығыу (илау)
2. Ауыҙға һыу ҡабыу (өндәшмәү)
3. Ер тишегенә инеү (оялыу)
4. Сәстәр үрә тотоу (ҡурҡыу)
5. Капитандар ярышы (карточка буйынса эш).
Байтал, ялағай һүҙҙәренән нисә һүҙ яһап була?
6. Исемдәр уйлау
Ике команданан да 1-әр уҡыусы сыға. 1-һе Гөл, 2-һе Ил һүҙенә яңғыҙлыҡ исемдәр менән аҙым яһайҙар. Мәҫәлән, Гөлнур, Илнур...
(Ҡайһы команда күберәк әйтә, шул еңеүсе була, 10-ға тиклем).
7. Командалар бер-береһенә һорау бирәләр. (Дөрөҫ булһа, 1-әр очко өҫтәлә)
"Баш киҫәктәр"гә:
1. Бер тауыҡ – тауыҡ булыр,
Ике-өс тауыҡ ни булыр? (тауыҡтар)
2. Беренсе ижек – татлы ризыҡ, икенсеһе – йылға исеме, бергә ҡушып уҡыһаң, һыуҙа йәшәй торған йән эйәһе килеп сыға (балыҡ)
3. Былтыр 30 февралдә булған хәл (30 февраль юҡ)
4. Беренсе өлөшө – нота, икенсеһе лә – нота, өсөнсөһө – һаңғырау тартынҡы, бергә – һүҙ төркөмө (сифат)
"Эйәрсән киҫәктәр"гә:
1. Ниндәй һүҙҙәр кеше исеме лә, йылға исеме лә була алалалр? (Лена, Амур, Нил, Дим)
2. Машинаның ҡайһы тәгәрәсе әйләнмәй? (запас)
3. Беренсе өлөшө – йорт хайуандары, икенсеһе – күк есеме, бергә булыр – үҫмер ир бала (малай)
4. Беренсе ижеге – өйләнгән, олоғайған кеше, икенсеһе – "эс" һүҙенең антонимы, бергә – Обь йылғаһының ҡушылдығы (Иртыш)
8. Ребус сисеү. Ребус сискән саҡта, зал менән эшләү. Экрандағы һорауҙарҙы уҡыу, яуап биреү.
1. Ниндәй синтаксик берәмек өндәшә? (өндәш һүҙ)
2. Ниндәй һөйләмдәр эйәреп йөрөргә ярата? (эйәрсән һөйләмдәр)

3. Өндәргә, бойорорға яратыусы һөйләмдәр әйтегеҙ (бойороҡ, өндәү һөйләмдәр)
4. Ниндәй һөйләмдәр ҡатнашып йөрөй? (ҡатнаш һөйләмдәр)
9.Аҙашҡан өндәр. Шиғырҙы уҡыу, дөрөҫләү. (Карточканан күсереү)
Игендәр өлгөргән саҡта
Шундай хәлдәр була, ти.
Бүрәнәләр, осоп килеп,
Бүҙәнәгә ҡуна, ти.

Ҡармаҡҡа ем ҡаптырып,
Алабута тотҡандар.
Балыҡтарын майға һалып,
Табала ҡыҙҙырғандар.
10. Көләмәс күрһәтеү. (Өйгә эш)
11. Концерт номеры.
**Укытыусы:**
Командаларҙың ярышы
Ҡалдыра беҙҙе хайран,
Тик, хөрмәтле ауырыусылар,
Иртәгә түгел байрам.
Шуға күрә ошо ерҙә
Туҡтатабыҙ уйынды.
Жюри әйтер, кемдәр алды
Иң беренсе урынды.
12. Баһалау, бүләктәр биреү.

Ҡулланылған әҙәбиәт:

1. Бикҡужина Т. Ә. Башҡорт теленән синыфтан тыш эштәр. – Өфө: Китап, 1997.
2. Ураҡсин З. Ғ., Ишбирҙин Э. Ф., Ҡотлобаева Г. М., Әхтәмов М. Х. Ҡыҙыҡлы грамматика. – Өфө: Китап, 1993.
3. Ураҡсин З. Ғ. Башҡорт теленән фразеологик һүҙлек. – Өфө, 2006.
4. Әхтәмов М. Х. Грамматика һүҙлеге. – Өфө, 2007.

**Йомағолова Г.К.,**

**«Өфө статистика, информатика һәм**

**иҫәпләү техникаһы» колледжы**

# “МИН ТҮГЕЛМЕН ТЫУҒАН ЕРҘЕҢ ТИК ОСРАҠЛЫ ҒЫНА ҠУНАҒЫ...»

(Әҙәби-музыкаль кисә)

**Сараның бурыстары һәм маҡсаты:**

**Белем биреү:**

Балаларҙы Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең ижады, тормош юлы менән таныштырыу.

**Үҫтереүсе:** Уҡыусыларҙың башҡортса һөйләү һәләтен камиллаштырыу: уҡыусыларҙың фекерләү ҡеүәһен, ижади эшмәкәрлеген (алдан һиҙемләү, күҙаллау тойғоһон), һөйләү һәм яҙма телмәр күнекмәләрен (диалогик), хәтерҙәрен, логик фекерләүен үҫтереү.

**Тәрбиәүи:** М.Кәрим ижадына йәмғиәттең иғтибарын арттырыу; Мостай Кәримдең ижады аша башҡорт теленә һөйөү, ҡыҙыҡһыныу һәм илһөйәрлек тойғоһон тәрбиәләү; Башҡорт теленең байлығын, мәҙәниәтен билдәләгән әҙәбиәтселәр менән танышыу; Студенттар араһында башҡорт әҙәбиәтенең классик һәм заманса поэзияһын пропагандалау.

- **Предмет-ара бәйләнеш:** сәнғәттең төрлө төрҙәре (музыка, кино, һынлы сәнғәт), тарих, рус теле, география,философия, психология.
- **Уҡыу-күргәҙмә әсбаптар һәм йыһазландырыу:** компьютер; мультимедиапроектор; “Мин түгелмен тыуған ерҙең тик осраҡлы ғына ҡунағы” тигән темаға презентация; Башҡортостандың физик картаһы; М. Кәримдең фотоһүрәттәре; М. Кәримдең китаптарынан күргәҙмә, фотоальбом, гәзит-журналдар; аудио- һәм видеояҙма.
- 

**Кисәнең барышы**

Тамаша залы байрамса биҙәлгән. Слайдта эпиграф итеп М. Кәримдең шиғырынан өҙөк килтерелгән: “Мин түгелмен тыуған ерҙең тик осраҡлы ғына ҡунағы...».

Уртала – М.Кәримдең портреты. Һул яҡта – М. Кәримдең китаптарынан, мәҡәләләренән, уң яҡта – башҡорт халҡының ҡомартҡыларынан (ағас һауыт-һаба, сигелгән таҫтамалдар, ҡорамалар) төҙөлгән күргәҙмә.

Сәхнә асылғанда матур көй аҫтында ҡыҙҙар сигеү сигеп ултыралар (Экранда – Арыҫлан Йәнбәков башҡарыуында М. Кәрим һүҙҙәренә яҙылған «Кис ултырып ҡыҙҙар сигә» клибы күрһәтелә.)

**1-се алып барыусы.**

Шиғриәт донъяһы ниндәй? Белмәй бер кем.
Ул үҙенә йыйған бөтә йәшәү күркен.
Инеп батһаң ошо даръя ағышына
Үлгәндә лә үкенмәҫһең яҙмышыңа.
Һәр нәмәлә шиғыр ята,
Әгәр күрә, тоя белһәң.
Тойғаныңды йөрәгеңдә
Шиғыр итеп ҡоя белһәң.
Хәйерле көн, мөхтәрәм тамашасылар!

Һаумыһығыҙ, шиғри йәнле, нескә күңелле әҙәбиәт һөйөүсе дуҫтарыбыҙ! Күңелендә шиғыр осҡоно йөрөтөүселәр күп арабыҙҙа. Кемдер донъя гүзәллегенә һоҡланыуын, кемдер шатлығын йә хәсрәт-зарын, кемдер мөхәббәтен аҡ ҡағыҙ битенә төшөрә. Шулай күңелендә ташҡан хис-тойғоларҙы башҡалар менән дә уртаҡлашырға теләй улар. “Дуҫлыҡ бүлешкәндән генә арта,” – тигән халҡыбыҙҙың бөйөк шағиры М. Кәрим. Илһам да бүлешкәндән ишәйә. Шиғри йәнле кешеләребеҙ күберәк булған һайын, донъябыҙ йәмлерәк, йәшәйешебеҙ ҙә ғәмлерәк була бара.

Кешелектең йәшәү дәүерендә кешеләрҙең күңелендә нәфис әҙәбиәткә, шиғриәткә булған мөхәббәте бер ҡасан да һүрелмәй. Шиғриәт, ижад тип аталған бөйөк төшөнсәләр бөгөнгө болғансыҡ тормоштан юғары тора. Ана шул юғарылыҡта ҡалыу, нәфис һүҙ менән кеше күңеленә йылылыҡ, рухи ныҡлыҡ биреүгә ынтылыш беҙҙе бөгөн шиғриәт, йыр минуттарына йыйҙы ла инде.

**2-се алып барыусы**. Мостай Кәрим. Был исем беҙҙең һәр беребеҙ өсөн, Башҡортостанда йәшәүсе һәр кем өсөн иң изге, ҡәҙерле исем. Сөнки ул әҙип кенә түгел, милләт улы, милләт һаҡсыһы, милләт яҡсыһы.

Тыуған Башҡортостаныбыҙҙа уны белмәгән, уны яратмаған, уның менән ғорурланмаған кеше юҡтыр. Мостай Кәрим олоһона ла, кесеһенә лә берҙәй яҡын, берҙәй ҡәҙерле.

Бөгөнгө кисәбеҙҙә беҙ әҙиптең ижадына байҡау яһарбыҙ, йырҙарын тыңлап, шиғырҙарын һөйләп, әҫәрҙәрен иҫкә төшөрөп тағы ла рухи байырбыҙ. Һәр берегеҙҙе бөгөн яңғыраясаҡ йыр-моңда, шиғырҙан ләззәтләнергә, хистәр донъяһында йөҙөргә саҡырабыҙ.

Һеҙҙе Башҡортостандың атҡаҙанған йырсыһы, халыҡ-ара һәм республика конкурстары лауреаты, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт филармонияһы солисткаһы Сәйҙә Ильясова сәләмләй.

**Сәйҙә Ильясова башҡарыуында йыр.**

**3-сө алып барыусы.** Ниндәй генә шағир үҙенең тыуған иленә, тыуған еренә бағышлап шиғырҙар яҙмаған икән? Мостай Кәрим шиғриәте лә ҙур бер мөхәббәт менән һуғарылған – ул илаһи мөхәбәттең сығанағы – Башҡортостан.

Башҡортостан – изге тупрағыбыҙ,
Аяҙ, яҡты һинең таңдарың.
Талдарыңдан ҡара таңдар түгел,
Тама хәҙер татлы балдарың.

Башҡортостан! Балҡып тораһың һин
Нурҙарында иле ҡояштың...
Төйнәлдәрҙән сығып, уйың менән,
Буйың менән күккә олғаштың.

Башҡортостан – алтын бишегебеҙ!
Ул бишектә беҙҙең ҡотобоҙ.
И, кешеләр! Затлы шул бәхетте,
Ҡәҙерен белеп, һаҡлап тотоғоҙ.

**4-се алып барыусы**. Тыуған ер! Һинең ни тиклем дә яҡын, ни тиклем дә ҡәҙерле ер булыуыңды бары тик сит-ят ерҙәрҙә йөрөп ҡайтҡан кешеләр генә тәрән аңлай торғандыр. Яу яланында шул ер киҫәге өсөн ҡан түккән батыр ир-егет өсөн был ер тағы ла ҡәҙерлерәк, тағы ла яҡынырак.

Тыуған төйәктең һәр бер сәскәһе, һәр бер үләне менән яңынан осрашыу, уларҙың баштарынан һыйпап уҙыу – илен һағынып ҡайтҡан һалдат өсөн әйтеп бөткөһөҙ оло шатлыҡ.

Ауылымдың туғайҙары аша
Алыҫтарҙан ҡайтып киләмен,
Шишмәләргә ятып һыуҙар эсәм
Һәм эйелеп өҙәм еләген.

Гөлдәр миңә: "Һаумы, һаумы!"– тиҙәр,
Талғын елдәр иҫкән сағында,
Баш эйәләр. Бер мин генә түгел,
Улар ҙа, ахры, мине һағынған.

Айырылыуҙың оҙаҡ йылдарында
Ниндәй яландарҙа йөрөмәнем,
Ләкин, гөлдәр, һеҙҙең шикеллеләй
Хуш еҫ бөркөгәнде күрмәнем.

Хәтерләйем ошо туғайҙарҙа
Бик-бик күптән гөлдәр үҫкәнен;
Ғашиҡ булдым егет йылдарымда,
Тик гөлдәрҙе үрелеп өҙмәнем.

Ғашиҡ булдым. Ләкин мин ғишҡымды
Әйтеп бирҙем ябай тел менән.
Тиңләмәнем уны далалағы

Ғүмерһеҙ һәм матур гөл менән.

Улар һаман: "Һаумы, һаумы", – тиҙәр,
Алдарыма хуш еҫ сәсәләр.
Бик һағындым һеҙҙе, бик һағындым,
Үҙ еремдә үҫкән сәскәләр.

**Юлбирҙина З.Ғ. башҡарыуында йыр «Тыуған ауылым» (Хөсәйен Әхмәтов һүҙҙәре һәм көйө).**

Тыуған ауылым Һаҡмар буйҙарында,
Шунда үтте минең баласаҡ.
Һаҡмар тулҡындары, ҡурай моңо,
Йөрәгемдә мәңге ҡаласаҡ.
Атам-әсәм шунда ғүмер иткән (тыуып үҫкән),
Сал Уралым, йәмле Һаҡмарым.
Мин онотмам һеҙҙе һис бер вакыт,
Тыуған ауылым, тыуған яҡтарым.

**5-се алып барыусы.**

Урал ғына буйы бигерәк йәмле,
Аҡ тирмәләр ҡороп йәйләргә.
Ҡая ташҡа баҫып ҡурай тарттым
Уралымды маҡтап һөйләргә.

**Ҡурай моңо яңғырай.**

**1-се алып барыусы.** Ҡатын-ҡыҙ... Кем ул? Ул иң тәүҙә әсә-кеше быуынын дауам иттереүсе. Унын йөгө үлсәүгә һыймаҫлыҡ, һанап бөткөһөҙ.
Ожмах – әсәләрҙең аяҡ аҫтында . Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙҙең был һүҙҙәрен һуңғы ваҡытта йыш ишетергә тура килә. Был ысынлап та шулай. Ҡатын-ҡыҙҙы төпһөҙ дарьяға ла, ғорур ҡаяға ла, наҙлы елгә лә оҡшаталар. Ҡатын-ҡыҙ – ғаилә усағын һаҡлаусы ла, хәстәрлекле әсә лә, кәрәк икән ҡыйыу, батыр ҙа, нәзәкәтле, һылыу, мөләйем тормош биҙәге лә.Ҡатын-ҡыҙҙың, әсәнең һәр ғәләме, уй-ниәте ғаиләһенең ҡотон арттырыуға, өйөн бөтәйтеүгә йүнәлгән, йөрәк йылыһын һалып, һәр ҡабымы шифа булһын тип һый-ниғмәт әҙерләйме – былар барыһы ла ире, балалары, яҡындары өсөн.

Өс мөғжизә мине әсир алды –
Ер, йәнә күк, йәнә ҡатын кеше.
Өс сер мине уйға, шомға һалды –
Ер, йәнә күк, йәнә ҡатын кеше.
Ерҙең сере бөтә. Күк һайыға.
Төбө күренер бына асылыр ҙа.
Ҡатын кеше генә асылмаҫ сер,
Тылсым булып ҡалыр асылында

**2-се алып барыусы.**М.Кәрим 66 йыл ғүмерен әсәһе менән үткәрҙе.
Мине күптән еңгән булыр ине

Ҡаршы елдәр, ҡаты яралар,
Һин тормаһаң әгәр, ҡалган булыр
Хәүеф менән минең арала.
Бирешмә, зинһар бирешмә,
Терелә күр инде, әсәйем
Тағы бер аҙ һинең ышығында
Хәүеф-хәтер йәшәйем.

**Аҡбашева башҡарыуында йыр.**
**3-сө алып барыусы.**М. Кәримдең һәр бер шиғырында мәңгелек ҡиммәттәр – берҙәмлек, дуҫлыҡ, фәлсәфә, күңел, рух бөтөнлөгө сағылыш таба.
Мәңгелек улы – ҡояш гел янһа ла,
Ҡырҡ эшем ҡырылып ятып ҡалһа ла,
Һуғыр аҡтыҡҡы сәғәтем бер заман,
Һәм мин китеп тә барырмын донъянан.
Яҡтырыр һаман хәүефһеҙ был йыһан,
Ҡуҙғалмаҫ хатта ерҙәге бер туҙан.
Һуңғы юлға дуҫтар алып китерҙәр,
Күтәрһендәр! Тау хәтлеге йөктәрҙе
Тере саҡта эһ тә итмәй күтәрҙем.
Ергә киске эңер төшөп килгәндә,
Дуҫтар ҡайтып ултырырҙар бүлмәмдә.
Ҡараңғыла, һөртмәйенсә күҙ йәшен,
Берәү шул саҡ тыныс ҡына өндәшер:
Арабыҙҙан тик бер кеше юғалды –
Ниндәй тулы донъя буш ҡалды...
**4-се алып барыусы.**
Ҡайһы саҡта хистәр күңелемдән
Шишмә төҫлө сыға урғылып,
Һәм, ашҡынып, шунда, еңел телдән,
Аға башлай дәртле йыр булып.
Бәлки, ул йыр бөйөк түгелдер ҙә...
Тик барыбер бөтә йөрәктән.
Ә йөрәктең һүҙе –ҙур һүҙ беҙҙә,
Тормош үҙе шулай өйрәткән.
**5 - се алып барыусы.**

Өйөрөлә ап-аҡ өйөрмәләр...
Хушлашабыҙ. Тағы ҡалаһың.
Күҙ алдыма килде шул күшеккән
Япа-яңғыҙ болан балаһы.
Аҡ буранға инеп юғалырмын.
Ҡул болғама, барыбер күренмәҫ.
Дауыл барҙа әле сыҙарһың да,

Ни ҡылырһың, ул да һүрелгәс.
Гел аҡ ҡына төҫ тә хафа һалыр.
(Аҡ урмандар, ҡырҙар, түбәләр).
Туй күлдәген генә түгел, бында
Кәфенде лә аҡтан тегәләр.
Ғүмер уҙған һайын, китә бара,
Бөтә бара күңел тынғыһы.
Һәр күрешеү , – гүйә, тәү күрешеү,
Һәр айырылышыу, – гүйә, һуңғыһы.
Өйөрөлә ап-аҡ өйөрмәләр...
Хушлашабыҙ. Тағы ҡалаһың.
Һаҡла, яҙмыш,
Аҙаштыра күрмә
Шул күшеккән болан балаһын...

**Сәйҙә Ильясова башҡарыуында йыр яңғырай («Йылғалар төнөн һөйләшә», М. Кәрим һүҙҙәре, Ю. Үҙәнбаев көйө.)**
**1-се алып барыусы.**
Гармунсы дуҫ, бер һыҙҙырып ебәр,
Беҙ яратҡан дәртле көйҙәрҙе.
Эс бошороп, иртә йоҡлағандар.
Уят әле ҡыҙлы өйҙәрҙе,
Уйнат әле беҙҙең көйҙәрҙе.
**(Баянда бейеү көйҙәре яңғырай).**

**3-сө алып барыусы.**Эйе, Мостай Кәрим мөхәббәт алдында ғүмере буйы баш эйҙе, мөхәббәт уға көс бирҙе. Ә шуға ла уның әҫәрҙәрендә иң иҫтә ҡалғандары – мөхәббәт геройҙары. Аҡйондоҙ менән Мәрәһим, Зөбәржәт менән Аҡйегет, Мария-Тереза менән Любомир. Мин һеҙгә бер нисә быуын тыңлап-йырлап үҫкән Мостай Кәрим һүҙҙәренә яҙылған йырҙы башҡарып үтәм – «Яҙмыштарҙан уҙмыш бар».

**Йыр башҡарыла.**
**4-се алып барыусы.**
Бейегәндә тетрәп торһон тауҙары,
Иҙел тулап, ашып сыҡһын ярҙарын!
Бейһендәр, бейеһендәр таңғаса,
Ай сайҡалып, ҡылып торһон тамаша!
**Мортазина Зөлхизә башкарыуында бейеү.**
**5-се алып барыусы.** Башҡорт йыры, башҡорт моңо... Ул бүтәнсә һис бер нәмә менән тиңе булмаған айырым бер күренеш, һоҡланып туя алмаҫлыҡ матурлыҡ донъяһы. Унда – ысын-ысынында яҡты илаһиәт, саф мөхәббәт балҡышы. Йыр башҡортта фәҡәт мөхәббәт тойғоһонан яралған һәм ул ерҙә мәңгелек моң, һағыш, һыҙланыуҙар һәм инаныуҙар ауазы булып йәшәй.

Башҡорт үҙенең бар булмышын йөрәк түренән урғылып сыҡҡан моңға һалған һәм был моң, әйтерһең, йәйғор булып балҡып, унын уйын, хыялын, теләк һәм ниәттәрен яҡтыртып, барыр юлдарын быуаттарҙан-быуаттарға олғаштырып тора. Ә, хәҙер, әйҙәгеҙ, бергәләшеп, ошо көҙҙөң илаһи бер миҙгелендә үҙебеҙҙең милли ретро йырҙарыбыҙ солғанышына сумайыҡ. Бөтәгеҙҙе лә йыр-моң дарьяһына ҡушылырға саҡырабыҙ.

**Караокеға ҡушылып йырлау.**

**1-се алып барыусы.** Эй,ғүмерҙең сая,ҡабатланмаҫ миҙгелдәре.Һәр кемден үҙ яҙмышы,үҙ тормош юлы,үҙ ҡарашы бар был донъяла. Ә Мостай Кәримдең тормош юлын балҡып янған һәм әле лә үҙенең йылылығы, яҡтылығы менән арбап торған йондоҙға тиңләр инем. Ысынлап та, М. Кәрим – ул яҡты йондоҙ. Тирә – яҡҡа нур бөркөп торған йондоҙ ул. Ғайса ағай Хөсәйенов юҡҡа ғына уны “Милләтебеҙҙең рухи йондоҙо” тип атамаған. Кеше күңелен йылыта ла, күңелдәрҙе күтәрә лә ала унын әҫәрҙәре. Аҙашҡандарға юл күрһәтеп торған йондоҙ ул Мостай ағай.

**2-се алып барыусы.**

Салауатлы, беҙ Мостайлы халыҡ –

Шуның менән бары әйтелә.

Яҙмышыбыҙ шулай – был бәхетте

Алып булмай һорап йә теләп.

Ысынлап та, беҙ Мостайлы халыҡ булыуыбыҙ менән бәхетле. Үҙенең ижады менән ул башҡорт халҡын, Башҡортостаныбыҙҙы юғары бейеклектәргә күтәрҙе.Мостай Кәримдең  ижады беҙҙең күңелдәрҙә артабан да нурландырыр, сөнки Мостай Кәрим беҙҙең һәр беребеҙҙең күңелендә.

**3-сө алып барыусы**. Хөрмәтле тамашасылар! Бөгөнгө байрам тамам. Байрамда ҡатнашыусыларға, саҡырылған ҡунаҡтарға, уҡытыусыларға ихтирамыбыҙҙы һәм рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ! Барығыҙға ла ныҡлы һаулыҡ, ғаилә бәхете, донъялар именлеге теләйбеҙ.  Хушығыҙ, һау булығыҙ.

## ӘҘӘБИӘТ:


1. Мостай Кәрим. Әҫәрҙәр / М. Кәрим. –  Өфө : Башҡортостан китап нәшриәте, 1971.
2. Мостай Кәрим. Айгөл  иле : пьесалар / М. Кәрим. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1979. – 480 бит.
3.Мостай Кәрим. Оҙон-оҙаҡ бала саҡ / М. Кәрим. – Өфө : Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. – 286 бит.
4. Мостай Кәрим. Шиғырҙар поэмалар / М. Кәрим. – Өфө : Башҡ. китап нәшриәте, 1985. – 240 бит.
5. Мостай Кәрим. “... Күкрәгемдән ҡоштар осорам” // Уҡытыусыға ярҙамға. – Өфө, 2009.– 72 бит.

6. Башҡорт халык ижады. 10-сы том. 1-се китап. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. – Өфө: Китап, 2006.
7. Башҡортостан. Ҡыҫҡаса энциклопедия. – Өфө, 1997.
8. Башҡорт халыҡ йырҙары. – Өфө, 1992.

***Сәйетгәрәева Ә.Ф.,***

***Солтанова Ф.Х., Латипова Р.Р.,***

Бөрө ҡалаһының 1-се урта

дөйөм белем биреү мәктәбе

## ХӘТИРӘЛӘРГӘ ҠАЙТЫП

**(Ғәли Соҡорой иҫтәлегенә арналған сәхнәләштерелгән тамаша)**

Маҡсат: уҡыусыларҙы әҙиптең ижады, тормош юлы менән таныштырыу, уның ижады аша башҡорт теленә һөйөү, ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу, балаларҙа илһөйәрлек тойғоһон тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** плакат, китаптар, портрет, компьютер, дисктар,

**Класс:** 4,5

**Сара барышы:**

**Ойоштороу мәле**. Талғын музыка уйнай. (**"190 лет** – башкирскому поэту, просветителю Гали Сокорою (Киикову Мухаметгали Габдельсалиховичу) " (1926–1889) тигән яҙыу эленгән).

Автор: Ғәли Соҡоройҙоң тормош һәм ижад юлы мәктәп программаһы буйынса үтелә, тарихи планда ҡарала.

Ғәли Соҡорой ҡалдырған рухи мираҫтың тормошобоҙҙа тоткан урынын күрһәтеү, уның нәҫеленән артабан да билдәле, тормоштарын мәғариф менән бәйләгән кешеләр сығыуын күрһәтеү – бөгөнгө маҡсатыбыҙ.

Мәғрифәтсе, шағир, ғалим, фәйләсүф Ғәли Соҡоройҙоң етенсе быуын вәкиле Ғилемшина Нурфиә лә үҙ мәлендә беҙҙең мәктәпте уңышы тамамланы (Нурфиә китапханаға килеп инә).

*Өй күренеше. Мулла өйө. Заманына күрә бай кешенең донъяһы.*

*1826. Тәтешле районы Иҫке Соҡор ауылының бер ғаиләһе. Ғаиләлә бәпес тыуған. Атай кеше Ғәбделсәлих:*

– *Улым тыуҙы, улым!*

*Автор: Ҡатыны менән кәңәшләшеп, исем туйы үткәрергә һөйләшәләр.*

*Атаһы уйланып:*

*– Мөхәмәтғәли Кейеков Ғәбделсәлих улы буласаҡ ул. Мөхәмәтғәли – ғәрәп теленән “күтәренке, билдәле” тигәнде аңлата.*

*Ҡатыны:*

– *Һин уйлаған исем менән килешәм.*

*Ғәбделсәлих:*

– *Әйҙә, күрше-күләндәрҙе саҡырып, исем ҡуштырайыҡ. Балаҡың беренсе туйы бит.*

*Өҫтәл әҙерләйҙәр. Һый-хөрмәт ҡуйыла.*

*Ҡунаҡтар килә.*

– *Әссәләмәғәләйкүм, йәмәғәт!*

– *Вәғәләйкүмәссәләм!*

*Бергәләп ултырып доға ҡылалар. Исем ҡушыу йолаһы. “Мөхәмәтғәли” исемен бер нисә тапҡыр бала яғына ҡарап әйтеү, ҡолағына бышылдау. Исем ҡушҡас, табын эргәһенә сәй эсергә ултыралар.*

*Беренсе күрше:*

– *Бигерәк мәғәнәле исем! Ҙур белемгә эйә буласаҡ. Ғилемле кеше булһын улыбыҙ.*

*Икенсе күрше:*

– *Мөхәмәтғәли уҡыу-уҡытыу, ижад өлкәһендә уңыш ҡаҙаныр әле. Ғаиләләре менән уҡымышлылар.*

*Өсөнсө күрше:*

– *Мәғрифәт, белем донъяһы бик ҙур. Уны тырыштар ғына яулай ала.*

Хәҙерге заман. Китапхана. Китапханасы янына Нурфиә килә. Ғәли Соҡоройҙоң етенсе быуын ейәнсәре үҙе хаҡында һөйләй: "Башҡорт дәүләт

университетының инженер факультетына уҡырға индем. Студент йылдарым бик ҡыҙыҡлы булып хәтергә уйылды. Ҡыҙыҡлы кешеләр менән танышыуҙар, “Студент яҙы” фестивалдәрендә ҡатнашыуҙар оҡшай ине. Ҡышҡы каникулдарҙа башҡа студенттар менән Ҡазанға барырға ярата инем. Практиканы Яр Саллылағы Камаз иретеү заводында үттем. Эш бик шаулы, саңлы булып сыҡһа ла, мине сыныҡтырҙы ғына. Аҙаҡ диплом яҡлау мәшәҡәттәре лә килеп етте. Бына хәҙер мин ып-ысын өлкәндәр тормошо менән йәшәп ятам.

Айзат Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжында уҡып йөрөй. Производство барышын автоматлаштырыу буйынса белгес буласаҡ. Рәсил Бөрөлә. Балалар баҡсаһына йөрөй. Аҙнаһына бер-нисә тапҡыр БДУ-ның Бөрө филиалындағы “Аҡ күгәрсен” баланы үҫтереү үҙәгенә йөрөй. Олатайым һау-сәләмәт йәшәй.

Йыраҡ олатайым Ғәли Соҡорой менән бик ғорурланам. Ғаиләбеҙ менән уның шиғырҙарын уҡыйбыҙ. Олатайыбыҙ нимә әйтергә теләне икән килер быуындарға, тип йыш уйланам. “Без урман башкортлары буламыз...” тигән һүҙҙәрен һәр ваҡыт иҫтә тотам.

Уҡытыусы. Балалар, билдәле башҡорт шағиры Ғәли Соҡоройҙоң йыраҡ тоҡомдары, шул иҫәптән беҙҙең элекке уҡыусыбыҙ Нурфиә лә, шағирҙың аманатына һәр саҡ тоғро булырға ынтыла. Ирәкте башҡорттары тоҡомдары бөгөн дә ғилемгә, мәғрифәткә ынтылып йәшәүе – бик ҡыуаныслы күренеш, минеңсә.

Ғәли Соҡоройҙоң ижадын өйрәнәйек, пропагандалайыҡ. Тарихи шәхестәрен ҡәҙерләгән халыҡ ҡына ҡәҙерле булыр, тигәндәр. Шуны онотмайыҡ.

# БАШҠОРТОСТАН МӘҘӘНИӘТЕ ТАРИХЫ БУЙЫНСА ЗАМАНСА ДӘРЕС

***Ғәлиева Д.Р.,***

Бөрө районы Күсәкәй ауылы

урта дөйөм белем биреү мәктәбе

## "НАҒЫШ ФӘЛСӘФӘҺЕ" ТЕМАҺЫНА ДӘРЕС ӨЛГӨҺӨ

Маҡсаттар: 1) Фәлсәфә, орнамент тураһында төшөнсә биреү; 2) Башҡорт орнаменттарын үҙләштереү өҫтөндә эш алып барыу; 3) Үҙебеҙҙең башҡорт милләтенең тарихына ҡарата оло ихтирам тойғоһо тәрбиәләү.
Йыһазландырыу: 7 класс өсөн дәреслек, күсмә таҡта, һүрәттәр.
Класс: 7.
I. Ойоштороу мәле.
– Хәйерле иртә, уҡыусылар! Һаумыһығыҙ!
– Мин һеҙҙе күреүемә бик шатмын! Минең исемем Диана Ришат ҡыҙы һәм бөгөнгө тормош һабаҡтары дәресен мин алып барасаҡмын.
II. Артикуляцион күнегеү.
– Әлегә, әйҙәгеҙ, бергәләшеп артикуляцион күнегеү эшләп алайыҡ. Матур итеп баҫайыҡ һәм башлайыҡ. Башта үҙем уҡып сығам, ә һуңынан инде бергәләп.

Әнисә, Әнисә,
Әйт әле, сәғәт нисә?
Сәғәт бөгөн туҡтаған,
Әллә арып, йоҡлаған. (Таҡтала яҙылған).

Әйҙәгеҙ, хәҙер был тиҙәйткесте көйгә һалып ҡарайыҡ. (Уҡыусылар ҡабатлай).
– Афарин, уҡыусылар. Ултырығыҙ.
III. Өй эшен тикшереү.

– Хәҙер инде беҙ һеҙҙең менән өй эшен тикшерербеҙ. Әйҙәгеҙ, үткән дәрестәге мәғлүмәт өҫтөндә эш эшләп алайыҡ. Һеҙгә бирелгән "Рухи һәм матди мәҙәниәт" темаһы буйынса тест һорауҙарына яуаптар эҙләйек. Ни бары 5 һорау, һәр һорауға 3 яуап. Шуның береһе генә дөрөҫ. Уны һеҙ һайлап алырға тейешһегеҙ. Ошо эшкә 7-8 минут ваҡыт бирәм.
IV. Яңы тема өҫтөндә эш.

– Яуаптарығыҙ дөрөҫтөр, тип ышанам. Теманы яҡшы итеп үҙләштерҙегеҙ. Хәҙер яңы темаға күсәйек. Бөгөнгө датаны һәм теманы яҙығыҙ.

Тема бик ҡыҙыҡлы. Кемгәлер ул бик яҡын, ҡыҙҙарға бигерәк тә. Ә кемгәлер сит-ят кеүек тә тойолор.

– Уҡыусылар, һеҙ сигеү менән танышһығыҙмы?

Әҙәби телдә сигеүҙе нағыш тип әйтәләр. Ни өсөн беҙҙең бөгөнгө дәрес "Нағыш фәлсәфәһе" тип аталамы?! Сөнки, сигеүле, нағышлы әйберҙәр беҙгә ниндәйҙер ваҡиғаны һөйләй. Сигеү 2 этаптан тора: беренсеһе, ерлектән (основа), ә икенсеһе һарауыстарҙан – биҙәктәрҙән. Барыһын бергә <u>орнамент</u> тип исемләйҙәр.

– Һеҙҙеңсә "орнамент" һүҙе нимәне аңлата?

**<u>Орнамент</u> – латин һүҙе, ритмлы тәртиптәге элементтарҙан хасил булған биҙәк.**

– Орнаменттарҙы ҡайҙа йыш осратырға була?

(Балаҫтарҙа, кейем-һалымда, һауыт-һабала, һандыҡтарҙа, түшәк-яҫтыҡтарҙа, өйҙө биҙәгәндә…)

**Башҡорт халҡы орнаменттары төрки, монгол, фин-уғыр, себер һәм иран ҡәбиләләре орнаменттары менән сағылыш таба.** Башҡорттар ҡасандыр 12 Аллаға табынған. Уларҙың барыһы ла матурлыҡты сағылдыра. Шул Аллаларҙың береһе – Ҡояш. Башҡорт орнаментында ҡояш элементы ҙур урын алып тора.

– Ни өсөн тип уйлайһығыҙ?

– Сөнки башҡорттар элекке ваҡытта ҡояшты Алла тип иҫәпләгәндәр. Шуға бронза быуатына ҡараған Арҡайым ҡаласығында табылған биҙәнеү әйберҙәре ҡояш символикаһы менән бәйле.

– Һеҙҙең уйлауығыҙса, башҡорттар тағы нимәгә йәки кемгә табынғандар?

– Әйҙәгеҙ, хәҙер Әхмәт Ибн-Фаҙландың яҙып ҡалдырған яҙмаһы менән танышайыҡ *(уҡытыу)*.

– Шулай итеп, беҙҙең элекке башҡорттар кемдәргә табынғандар?

– Ә хәҙер төҫтәр тураһында һөйләшеп алайыҡ. Һеҙ ниндәй төҫтәрҙе оҡшатаһығыҙ?

**– Ә беҙҙең башкорт орнаменты йылы төҫтәрҙән тора: ҡыҙыл, йәшел, һары, аҡ, ҡара. Ә күк, зәңгәр, алһыу төҫтәр һирәк ҡулланыла. Ғәҙәттә, ерлеге өсөн ҡара, кыҙыл, һары төҫтәр һайлана**.

– Нисек уйлайһығыҙ, ул буяуҙарҙы ҡайҙан алғандар икән?

– Башҡорттар биҙәү өсөн буяуҙарҙы үҙҙәре эшләгән, анилин ҡушып. Анилин – ул буяу эшләү өсөн файҙаланылған шыйыҡса (жидкость).

– Шулай итеп, башҡорттарҙың әүҙем ҡулланған төҫтәре ниндәй?

– Афарин, дуҫтар.

<u>Төп элементтары.</u>

– Орнамент элементтарын иҫкә төшөргәйнек. Ә хәҙер ошо орнаменттарҙың иң киң таралғандары менән танышайыҡ. Иң киң ҡулланылғаны – ☐ ◆, өсмөйөш, зигзаг. Ошо орнаменттарҙа донъяның төп өс башланғысы

сағылдырыла. Улар ниндәй башланғыс икән? Әйҙәгеҙ, был хаҡта дәреслектән уҡып алайыҡ. (12-се бит, 2-се абзац).

– Һеҙҙең уйлауығыҙса, нимә һуң ул йәшәйеш башланғысы?

– Ул йәшәү процесы, кешеләрҙең тормошо, кешеләрҙең нисек барлыҡҡа килеүе. Былар барыһы ла йәшәйеш башланғысы.

– Әйҙәгеҙ, ошоно белер өсөн дәреслек менән эш итеп алайыҡ (12-се бит, 2-се абзацтың аҙағы).

– Шулай итеп, уҡыусылар, нағыш элекке башҡорттарҙа ят күҙҙәрҙән һаҡларға тейеш булған.

V. Нығытыу (һүрәт төшөрөү).

– Хәтерҙә уйылып ҡалһын өсөн бер ижад төрө менән шөғөлләнеп алайыҡ. Мин һеҙгә альбом биттәре таратасаҡмын һәм ошо биттәргә орнамент төшөрөргә кәрәк булыр. Һуңынан инде һәр төркөмдән берәр кеше таҡта алдында үҙ төркөмөнөн һүрәтен яҡларға әҙерләнә.

– Бына беҙ бөгөнгө дәрестә "Нағыш фәлсәфәһе" темаһы менән таныштыҡ. Һеҙ ниндәй яңылыҡ белдегеҙ? Нимәләр менән таныштығыҙ?

VI. Өй эше биреү. Дәреслектән 8-17-се биттәрҙе уҡырға, тест үткәреләсәк.

VII. Баһалау.

Әүҙем ҡатнашыусыларға баһа ҡуйыу.

*Хуснуллина Р.Д.*,

МОАУ «Гимназия №1» г. Нефтекамск

# ПРОСВЕТИТЕЛЬСТВО В ПОЭЗИИ АКМУЛЛЫ

## (Урок по ИКБ в 8 классе)

***Цель урока:*** Знакомство с жизнью и поэзией просветительского характера М. Акмуллы

***Задачи:***

***-обучающие:*** расширение знаний и кругозора обучающихся в области башкирской литературы;

***-развивающие:*** развитие навыков и умений по развитию речи, способности анализировать;

***-воспитательные:*** продолжить работу по формированию чувства гордости и уважения к своей Родине, сформировать уважительное отношение к литературе своей республики.

***Необходимое техническое оборудование*** интерактивный комплекс (экран и компьютер), оценочные листки.

*Урок проводится по технологии развития критического мышления.*

*Структура урока:*

1. Организационный момент.
2. Целеполагание и мотивация.
3. 1 этап технологии «Вызов».
4. 2 этап технологии «Осмысление».
5. 3 этап технологии «Рефлексия».
6. Оценивание работы учащихся на уроке.
7. Информация о домашнем задании и инструктаж учащихся по его выполнению.

**Ход урока**

1. **Организационный момент.** Приветствие учеников.
2. **Целеполагание и мотивация**

**Учитель:** Добрый день! (СЛАЙД 1) Начнем урок с эпиграфа: (СЛАЙД 2)

«Башкиры, всем нам нужно просвещенье!
Невежд немало, редкость – обученье.
Страшней медведя-шатуна незнанье –
Усилим, братья, к знанию влеченье!»

–Отрывок из какого стихотворения? – «Башкиры мои, ученье нужно!»
Кто автор? М. Акмулла

Почему я взяла эти слова эпиграфом к уроку? – Акмулла обращал большое внимание к просвещению.

**Учитель:** Как вы думаете, какова тема нашего урока?

– Верно «Просветительство в поэзии Акмуллы» (СЛАЙД 3) Напишите в тетрадях число и тему урока.

3. **1 этап технологии «Вызов» (актуализация знаний).**

**Учитель:** Что вы знаете о Мифтахетдине Акмулле?

**Ученики:** отвечают.

(СЛАЙД 4) Мифтахетдин Акмулла – поэт-просветитель, выдающийся мыслитель и педагог XIX века

(Слайд 5) Кто такие просветители? К чему они призывали народ? Почему они активизировались именно во второй половине 19 века? Выдвигайте свои гипотезы.

– это люди с передовыми мыслями, им характерен исторический оптимизм – верили, что после разложения феодального строя в крае восторжествует демократический строй жизни.

-призывали народ к просвещению, прогрессу, воспитывать в себе чистые, благородные помыслы

– потому что во второй половине 19 века в крае развиваются капиталистические отношения и просветители активизировались, чтобы защитить народ, они с ненавистью относились к крепостному праву, феодальному строю

(Приготовьте оценочные листочки, здесь вы будете оценивать себя и друг-друга в течение всего урока)
Оценочные листки
ФИО
Биография
Творчество
Итого

**4. 2 этап технологии «Осмысление» (приобретение новых знаний и их первичное закрепление).**

**Учитель:** Для изучения жизни и творчества просветителя, предлагаю вам совершить виртуальную экскурсию на Родину просветителя в Миякинский район. Слайды будут на башкирском языке. Я думаю, вы поймете, т.к. уже 7 лет изучаете башкирский язык, а если где-то, что-то будет не понятно переведем вместе. (Просматриваем слайды «Мифтахетдин Аҡмулла музейына экскурсия»)
Проверка знаний, как вы усвоили биографию просветителя. В слайдах будут вопросы, вы,используя учебник, отвечайте на них.
(Слайд 13)
– Каким был Акмулла? Опишите его характер. – Бунтарный, смелый, решительный.
-Какие были отношения у Акмуллы с отцом? Почему? – Непростые, натянутые. Акмулла был человеком с передовыми взглядами, он много знал, а его отец все еще держался старых взглядов, поэтому между отцом и сыном возникали разногласия.
-С каким видным просветителем он состязался в поэтической импровизации? – М. Уметаевым
-В чем видел Акмулла совершенство человека?
В просвещении. В духовном развитии. В умении трезво относится к жизни. Здраво воспринимать ее явления. Думать о будущем благополучии народа.
**Учитель**: Теперь каждый оцените себя, как вы поняли биографию поэта. Поставьте себе оценки в графе «Биография»
**Учитель**: Я вам задавала на дом познакомиться с творчеством Акмуллы.
**Учитель**: В каких жанрах писал Акмулла?
*Выступления обучающегося с сообщением по теме «Поэзия Акмуллы».*
(Презентация «Поэзия Акмуллы»)
**Учитель**: Делаем вывод: в каких жанрах работал Акмулла? (Слайд 14). Айтыш, хитап, мактуп, мадхия, насихат, рубаи.
**Учитель**: Акмулла ведь много сочинял. А почему поэтическое наследие Акмуллы невелико? – Потому что, его стихи не были напечатаны. Акмулла часто их импровизировал, они часто жили в устной форме, поэтому и были забыты. Рукописные варианты не сохранились.

**Учитель**: Сколько книг он издал при жизни? Как называется? (Слайд 15) Одна книга - «Элегия в честь Шигабутдина Марджани» (Казань, 1892 год)
**Учитель**: Кем был Шигабутдин Марджани, что Акмулла посвятил ему свое величайшее произведение? (*Выступление обучающегося с сообщением по теме «Шигабутдин Марджани»*) Шигабутдин Марджани (1818—1889) — татарский философ, историк, просветитель, этнограф. Просветительские идеи Марджани охватывают самые различные стороны обновления общественной жизни татарского народа, включая в себя мысли о необходимости получения татарским населением светского образования, усвоения прогрессивного наследия прошлого (античной, арабской мысли) и настоящего (русской и западноевропейской культур). Считая просвещение самым мощным орудием прогресса, ученый пытался вызволить свой народ из «спячки». Ученый стремился «обновить веру», поднять социально-политический и культурный уровень татарского народа, приобщить его к современной цивилизации. Именно он заложил его основы — реформу преподавания в медресе, способствовавшую усвоению татарским народом передовых достижений мировой культуры и науки.
**Учитель**: В каком жанре Акмулла начал ее писать? В жанре мадхия (ода). Потому что Акмулла восторгался деятельностью Марджани.
**Учитель**:Что такое мадхия? Стих-возвеличивание.
**Учитель**: В каком жанре закончил? В жанре марсии (элегия). Потому что он не успел дописать свое мадхия, как услышал весть о том, что великий просветитель скончался. Тогда Акмулла переделал ее в марсию.
**Учитель**: Что такое «марсия» или «элегия»? **Элегия** — лирический жанр, содержащий в свободной стихотворной форме какую-либо жалобу, выражение печали или эмоциональный результат философского раздумья над сложными проблемами жизни. Почему?
**Учитель**: Отрывок из элегии нам расскажут наизусть (*обучающийся рассказывает наизусть отрывок из элегии*)
**Учитель**: Эту элегию мы можем отнести к просветительской теме? Да. Почему? Потому что в ней говорится о просветителе.
**Учитель**: Следующее стихотворение-обращение «Башкиры мои, нужно просвещение» (*обучающийся рассказывает наизусть отрывок из стихотворения*)
**Учитель**: Как поэт обращается к народу? Мои башкиры.
**Учитель**: Кто еще так обращался к башкирам? С.Юлаев.
**Учитель**: В учебниках, на стр. 178. даны вопросы. Прочитайте и ответьте на них.
**Учитель**: Еще одно стихотворение, которого нет в учебниках, расскажет нам …. «Обращение к друзьям».(*обучающийся рассказывает наизусть стихотворение*)
**Учитель**: (СЛАЙД 16) К чему он призывает своих друзей? Не только знать по-русски и писать, неплохо бы французский понимать. – Это говорит о том, что неплохо было бы знати и другие языки.

**Учитель**: «Но прежде важно в языке своем как рыба плавать, свой восславить дом» – Как вы понимаете эти слова?

**Учитель**: И сейчас нам расскажет стихотворение «Нәсихәттәр» (*обучающийся на башкирском языке рассказывает наизусть стихотворение*)

(Слайд 17, когда ученик рассказывает, учитель показывает все 7 назиданий в таблице)

**5. Рефлексия (обобщение и систематизация знаний).**

**Учитель:** Сравним. Что знали и что знаем сейчас.

**Ученики:** отвечают.

Тест (Слайды18-28)

**6. Учащиеся проверяют тесты друг-друга, выставляют оценки в оценочных листочках. Оценивание теста учащихся на уроке.**

**7.Информация о домашнем задании и инструктаж учащихся по его выполнению.**

– Акмулла писал не только о просвещении, у него были и другие темы. Эти темы вы сами определите, прочитав дома все его стихи в книгах на страницах 178 – 195. Одно стихотворение на выбор проанализировать.

**Учитель.** Урок окончен. До свидания. (Слайд 30)

Литература:

1.Вильданов А. Х., Кунафин Г. С. Башкирские просветители-демократы XIX в. – М., 1981.

2. Шакуров Р. З. Звезда поэзии. – Уфа, 1981.

3. Вильданов Ә. Х. Аҡмулла — яҡтылыҡйырсыһы. – Өфө, 1981.

4. Башҡорт әҙәбиәте тарихы, 6 томда. 2-се том.– Өфө, 1990.

***Чулпанова А. Р., Кунц Т.В.,***

МБОУ ШКОЛА № 23 г. Уфа

## «БЕССТРАШНЫЕ ЗАЩИТНИКИ НЕБА»

интегрированный урок

(ИКБ, музыка и литература),

посвященный 71-годовщине Великой Победы и Году кино

**Цель:**

Сформировать чувство патриотизма у обучающихся, на примере героев России и Башкортостана, осознать причастность к его истории через судьбу своей собственной семьи, личного отношения к прошлому и настоящему.

**Задачи:** 1.Расширить представления учащихся о Великой Отечественной войне;
2.Формировать у учащихся интерес к истории страны;
3. Пополнить знания детей о героических подвигах летчиков ВОВ;
**Оснащенность урока:** плакаты, компьютер, мультимедийный проектор, фотографии военных лет, презентация 1
**Литература:**


1. Гареев М.Г. Штурмовики идут на цель. – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1973.
2. И чтобы помнилась война. – Уфа: Китап, 2005.
3. Полевой Б. Повесть о настоящем человеке.
4. Узиков Ю. Это надо знать живым.– Уфа: Башкирское кн. изд-во, 1986.


**Интернет- ресурсы:**


Режим доступа: http://www.bashinform.ru
Режим доступа: infourok.ru›urok…na-temu…maresevcheloveklegenda…
Режим доступа: infourok.ru›konspekt_uroka_vneklassnogo_chteniya
Режим доступа: unecha-pu6.narod.ru
Режим доступа: metod-kopilka.ru›konspekt_patriotizm__duhovno
Режим доступа: https://ru.wikipedia.org/wiki/
Режим доступа: http://www.youtube.com/watch?v=vDybUkaP8pA&download=dm
Режим доступа: http://www.aphorisme.ru
Режим доступа:http://fb.ru/article/194741/podvig-viktora-talalihina---kratko


**Чтобы подвиги не затерялись,**
**чтобы советские люди**
**узнали в полной мере,**
**как боролись с фашизмом**
**их сограждане, -**
**нужно все записывать.**
*Борис Полевой*

**Ход урока**

**Учитель музыки:** Музыкальное приветствие. (Здравствуйте, ребята!)
**Слайд (эпиграф)**

Эпиграфом урока, мы выбрали слова из вступления к «Повести о настоящем человеке»: «Чтобы подвиги не затерялись, чтобы советские люди узнали в полной мере, как боролись с фашизмом их сограждане, - нужно все записывать…»

1. Что вы видите? (Показ головной убор летчика, планшет, макеты самолета «ИЛ-2» и иллюстрацию птицы в полете)

**Слайд (орел)**

2. Что их связывает? (самолет и птицу связывает небо, они могут летать)

Сегодня мы прикоснёмся к страницам жизни настоящих людей, который прославил нашу страну на весь мир, на все века.

3. Какое событие отражено в этом фрагменте?

**Слайд видео (из худ. фильма «В бой идут одни старики»)**

– Я думаю нетрудно догадаться, о чём пойдёт речь сегодня на уроке.

– Как вы думаете, о чём? (о войне)

– О какой войне? (О Великой Отечественной войне)

– Как бы Вы назвали тему нашего урока? (ответы детей)

Тему урока мы назвали так: **«Бесстрашные защитники неба»**

**Слайд «Бесстрашные защитники неба»**

**Слайд (71-летие Великой Победы)**

В году наша страна будет отмечать самый главный праздник в нашей жизни 71-годовщину Великой Победы нашего народа. Значение этой победы со временем только растет.

**Слайд (фото передачи знамя Победы в школе)**

21 марта 2016 года в нашей школе состоялась торжественная линейка, посвященная встрече Знамени Победы и Знамени Уфимского Бессмертного полка. Эта акция прошла в 110 школах города Уфы. Ни один ученик, нашей школы не остался равнодушным, потому что в жилах каждого из вас течет кровь воинов-победителей той жестокой и кровопролитной войны.

**Слайд (Бессмертный полк)**

В этом году в акции «Бессмертный полк» запланировано участие 15 тысяч уфимцев и гостей столицы Башкортостана, чтобы увековечить память наших родных, воевавшие в годы ВОВ.

4. У каждого на груди георгиевская лента, что она символизирует?

**Слайд «Георгиевская ленточка»**

**Ученик 1:**

Георгиевские ленточки стали раздавать в 75 странах мира. В прошлом году по всей России разлетелись восемь миллионов ленточек в этом году их число, безусловно, увеличится.

Патриотическая акция «Георгиевская ленточка» будет проходить в каждом районе города, планируется раздать более 20 тысяч Георгиевских лент.

Георгиевская лента – это символ доблести и мужества. Мы хотим, чтобы каждый из Вас носил их на груди в знак памяти о том, какой ценой далась Велика Победа.

**(Звучит героическая музыка)**

Все дальше уходят годы Великой Отечественной, но эти годы не изгладят из нашей памяти величия духа и героические дела отцов, дедов, прадедов.

Это война принесла неизмеримое горе в каждую семью, принесла колоссальные страдания людям и неисчислимые разрушения. Войны были всегда, но такой жестокой и разрушительной, какой была Великая Отечественная, еще не было.

**Слайд (Великой Победы)**

Этот урок мы посвящаем 71-годовщине Великой Победы и Году кино.

**Слайд (летчики)**

**Исполнение песни «Если завтра война»** (Муз. бр. Покрасс, сл. В Лебедев-Кумач)

**Учитель Литературы:**

Дорогие ребята! Все вы прочитали повесть Бориса Николаевича Полевого о лётчике – герое Советского Союза Алексее Маресьеве. О каком времени рассказывается в этой повести?

Эта повесть была написана Полевым ещё в годы Великой Отечественной войны после одной встречи. Об этой встрече расскажет нам Алсу.

5. Какие эпизоды, повествующие о жизни фронта и тыла, особенно запомнились вам после прочтения повести? Какие герои произвели на вас неизгладимое впечатление?

Внимательно прочитайте план, в котором отражены события повести:

1. Воздушный бой. Самолёт Мересьева сбит.

2. События в партизанском лесу.

3.Расправа фашистов над жителями деревни Плавни.

4. Картины передовой линии фронта – «огонь великого сражения»: Мересьев снова в строю.

5. Ожесточённые воздушные бои. Спасение Петрова.

6. Бой Мересьева с немецким асом. Лобовая атака.

– Что позволило автору дать Алексею Мересьеву высокое звание Настоящего советского человека?

– Что помогло лётчику найти силы и преодолеть все трудности?

– Охарактеризуйте душевное состояние Мересьева до и после ампутации ног?

– Как Мересьев узнаёт о подвиге Карповича?

– О каких человеческих качествах свидетельствует тот путь, который Мересьев избрал для достижения своей цели – вернуться в строй и продолжить летать, чтобы бить фашистов и приближать Победу?

– Какую роль в жизни Мересьева сыграл комиссар Воробьёв?

– Как вы думаете, почему, описывая жизнь Алексея Петровича Мересьева, писатель несколько изменил его фамилию?

6. Какой смысл мы вкладываем в слова «Настоящий Человек»?

**Учитель музыки:**

Сейчас вы услышите, какую роль сыграла песня в жизни героя из оперы С. С. Прокофьева «Повесть о настоящем человеке»

С. С. Прокофьев по книге Б.Полевого написал свою последнюю оперу «Повесть о настоящем человеке». В этой опере есть сцена: Алексей Маресьев находится в госпитале в очень тяжелом состоянии – ему ампутировали обе ноги. Он бредит. Но страдает он не столько от физической боли, сколько от мысли, что никогда не сможет летать. «Летчик без ног – эта

птица без крыльев, жить и клевать ещё может, а летать – никогда, никогда».

У постели Алексея сидит медсестра Клавдия. Она понимает состояние Алексея. Желая облегчить его боль, успокоить его, она поёт ему песню. Давайте послушаем, о чем поёт Клавдия.

**Слайд (видео «Зеленая рощица» из оперы ««Повесть о настоящем человеке», С. С. Прокофьев)**

**Слайд (медсестра Клавдия)**

– Как называется песня, которую вы услышали? (“Зеленая рощица”)

– О чем эта песня? Найдите в ней главные слова. (Настроение печали, тоски, скорби, слышим вздохи человека. Что не выскажешь словами – споёшь в песне. В старинных песнях в образе птицы подразумевается человек, его душевные переживания. В этой песне тоска о свободе. В неволе не поётся)

– Почему Клавдия не стала утешать Алексея словами, а обратилась к песне?

7. Почему такая печальная песня успокоила его? (Песня успокоила Алексея, после долгих бредовых ночей, он впервые заснул под эту ласковую песню)

**Слайд (ратные подвиги)**

В годы войны совершались невероятные подвиги: на земле, в небе, на железных дорогах, в госпиталях. Тысячи участников Великой Отечественной были награждены орденами и медалями за человеческий, гражданский подвиг. Некоторые стали героями Советского Союза.

– Назовите имена героев, совершивших ратные подвиги на фронтах Великой Отечественной Войны? (ответы детей)

8. Какие подвиги совершили ваши прадеды?

**Сообщение (учеников о своих прадедах)**

**Салават:**

Мой прадедушка Рахманов Хайдар Галлямович род. 20 апреля 1926 года в Буздякском районе.

В 23 года пошёл на фронт добровольно. Семь лет служил в воздушной авиации. На войне получил серьёзную травму, в ногу попал осколок от гранаты. Им было подбито множество фашистских самолетов, за это он был награжден Медалью за Отвагу. Умер мой прадедушка в возрасте 47 лет, разбившись на самолёте.

**Долгих Максим**

Мой прадедушка Васильев Геннадий Сергеевич, родился в 1921 году в Бугуруслане. Во время войны участвовал в военных действиях. Был летчиков и летал на истребителе. При выполнении особого задания был сбит и попал в плен. Пока он находился в плену добыл важные сведения о вражеских самолётах и танках. При побеге был ранен в ногу. Добравшись до частей Красной Армии, попал в госпиталь.

После долгого лечения, едва не лишился ноги, но он вернулся на фронт и продолжать воевать. На счету было много сбитых вражеских самолетов. Он уверенно шёл к победе и достиг её, добравшись до Берлина.

Был награждён орденом «Красной Звездой» за отвагу и мужество, проявленные в годы Великой Отечественной войны.

**Учитель музыка:**

**Слайд ( А. Покрышкин)**

Наша Родина является героической страной. Советские воины проявляли себя наилучшим образом, совершая подвиги во имя своей страны. Одним из таких был Александр Покрышкин.

Конец марта победного 1945 года Германия. Наши войска взламывают оборону противника, шаг за шагом приближаясь к Берлину. В небе господствует советская авиация. Кажется ничто не может остановить натиск отступающих, но вдруг наши бомбардировщики и штурмовики остаются без воздушного прикрытия. Грунтовые аэродромы раскисли, и истребители не могут взлететь, положение критическое. Командир 9-ой гвардейской истребительной авиадивизией полковник Покрышкин упорно ищет выход из создавшейся ситуации.

**Ученик 2:**

В первые годы войны самолет Покрышкина был дважды сбит, приходилось неделю пробираться к своим через вражеские тылы. Вспоминая потом эти дни Александр Иванович скажет: « Кто в 1941и 1942 не воевал, тот войны по настоящему не видел».

В это тяжелое время одаренный летчик начинает разрабатывать новый тактические приемы воздушного боя. Он неоднократно обращает внимание командование на недостаточность наших истребителей и отсутствие радиосвязи. Однако его идеи вызывают только раздражение у командование дивизии.

В мае 1942 года полк, в котором воюет Покрышкин, становится гвардейским. Это был период немецкого господства в воздухе. Нередко гвардейцы вступают в бой с многократными превосходящими силами противника.

**Слайд (Покрышкин)**

**Ученик 3**

Летом 1942 года пятерка самолетов под командованием Покрышкина противостоят 33 самолетам врага. Три из них на счету командира. И тут проявляется еще одна особенность Покрышкина. Пока велся бой пятеркой, и всего было сбито 5 самолетов, он записывал по одной победе каждому летчику. И в дальнейшем Покрышкин будет поступать также, именно поэтому до сих пор неизвестно точное количество побед самого асса. Вскоре полк выводят на отдых в Махачкалу, а Покрышкина представляют к званию героя Советского Союза. С этого момента начинается его восхождение на вершину славы.

**Ученик 4**

Именно на Кубани немцы окончательно теряют своё превосходство в воздухе.

Победа наших летчиков подтверждают блестяще разработанные Покрышкиным приёмы и тактику введения воздушных боев.

24 мая 1943 года Александр Иванович Покрышкин становится Героем Советского Союза, а через три месяца он награжден второй медалью «Золотая звезда».

Весной 1944 года Покрышкина назначают командиром его родного полка, а с июля он командует 9-ой гвардейской истребительной авиадивизией. К лету 1944года боевой счет Александра Ивановича достигает 50 сбитых самолетов.

19 августа он становится первым в стране Трижды Герой Советского Союза.

**Учитель музыки**:

Покрышкина всегда отличало нестандартный подход любому делу. Вот и тогда в марте 1945 года при поиске подходящих аэродромов его решение было совершенно необычным. Он предлагает взлетать с автострад. Командир дивизии лично пробует новый способ взлета. Все удачно и через час аэрокоброй взлетает на боевое задание с шоссе.

24 июня 1945 года он участвует в параде Победе на Красной площади, а через месяц становится слушателем Военной Академии им. Фрунзе.

В июле 1968 года Покрышкина переводят Москву он становится заместителем главкомом ПВО.

Вскоре новое назначение, в декабре 1971 генерал полковник авиации Покрышкин возглавил ДОСААФ страны.

За 10 лет страны его руководство появилось множество аэроклубов, взлетных учебных центров. Тысячи молодых ребят получили путевку в небо. Вот таким был первый трижды Герой Советского Союза Маршал авиации Александр Иванович Покрышкин сделавший так много для этой Победы.
– Какие черты характера Покрышкина вы могли бы воспитывать в себе?
– Можно ли быть героем в мирное время?
– Есть ли у современных молодых людей качества, позволяющие совершить подвиг?
–Считаете ли вы себя наследником воинской славы Покрышкина?

**Учитель литературы:**

**Слайд (Живое пламя)**

Ребята, на уроке литературы мы прочитали рассказ Евгения Носова «Живое пламя». Каково содержание этого рассказа?

В рассказе тётя Оля произносит такие слова: «Да, сгорел… Короткая у него жизнь. Зато без оглядки, в полную силу прожита. И у людей так бывает…»

– Что имела в виду тётя Оля?

– О чём этот рассказ Евгения Ивановича Носова и как можно объяснить его название?

9. Сын тёти Оли погиб, спикировав на своём крошечном «ястребке» на спину тяжёлого фашистского бомбардировщика.

Многие лётчики в годы Великой Отечественной войны совершали в небе подобные подвиги. История хранит для нас их бессмертные имена.

**Учитель музыки:**

Наиболее известный из них подвиг экипажа бомбардировщика во главе с капитаном **Николаем Францевичем Гастелло**. Стремительно для Николая Гастелло началась война и… так же стремительно закончилась. Он погиб 26 июня, в первую неделю войны.

**Ученик 5:**

26 июня 1941 года, вылетев со своей эскадрильей на очередное боевое задание, Николай Гастелло обнаружил в районе Радошковичи в Белоруссии механизированную колонну гитлеровцев. Эскадрилья отважного летчика начала точно и мощно бомбить врага, но была встречена ответным огнем фашистских зенитчиков. Николай Гастелло устремил подбитый и уже объятый пламенем самолет на скопление автобензоцистерн. Это был первый «огненный таран», который впоследствии во время войны не раз повторили многие отважные летчики. За это он был посмертно удостоен звания «Герой Советского Союза» с вручением медали «Золотая звезда» и ордена Ленина.

**Учитель музыки:**

– Какой подвиг совершил в годы Великой Отечественной войны Герой Советского Союза Николай Гастелло? (Николай Гастелло героически погиб, направил свой подбитый самолёт на позиции противника)

–**Что думал в свои последние минуты Николай Гастелло, принимая решение направить свой горящий самолет на скопление немецких танков, машин и бензоцистерн?**

**Гастелло стал поистине народным героем Башкирии, несмотря на то , что в Уфе жил сравнительно недолго.**

**Памятник Николаю Францевичу Гастелло** установлен в Уфе в одноимённом сквере на Сельской Богородской улице в Калининском районе города.

**Слайд (Стадион Гастелло)**

**10.** Знакомо ли вам это место? (спортивный клуб им. Гастелло, раньше он назывался стадион им. Гастелло)

В столице Башкортостана послевоенные годы появился стадион им. Гастелло, по футболу выступала уфимская команда «Гастелло», к сожалению сейчас нет такой команды.

Его именем назван спортивный клуб им. Гастелло у нас в Уфе, как вы думаете почему?

В жизни Николай Гастелло занимался спортом, был центральным нападающим в футбольной команде, прыгал с парашютом, вместе с комсомольцами построил стадион «Локомотив» в Муроме. Но жизнь посвятить решил небу.

**Слайд**

**Стихотворение Леонида Чикина «Молодость»**

Тебе все дороги открыты по праву,
Пути не заказаны к славе тебе.
Но только в труде обретается слава,
И счастье приходит в упорной борьбе.
Смотри, выбирай, чтоб по сердцу. Их много –
Не пройденных и не открытых дорог.
На север – дорога, на запад – дорога,
Уходит на юг и спешит на восток.
Рассветы встают и пылают закаты,
Как нашего красного знамени шёлк…
Скажите: не этой ли степью когда-то
С бригадою Павка Корчагин прошёл?
Дороги покорны лишь смелым да стойким,
Кто грудью идёт на большие дела.
Вот эта – на дальневосточные стройки,
А та – молодых на Магнитку вела.
А небо над нами! Скажите: не здесь ли,
Дорогой не этою ли голубой
Бессмертный Гастелло,
Бесстрашный Маресьев
Вели самолёты в решительный бой!

**Слайд (А. С. Экзюпери)**

Все вы, ребята, знаете повесть – сказку «Маленький принц». Кто написал это замечательное произведение? Да. Это французский писатель Антуан де Сент Экзюпери. Но не все знают, что он тоже был военным лётчиком, антифашистом и погиб, выполняя боевое задание. Фашистский лётчик из «Люфтваффе», сбивший самолёт Экзюпери, уже после войны признался: « Если бы я знал, что штурвалом этого самолёта управляет известный всему миру писатель, то сам бы предпочёл погибнуть или быть преданным военному суду, но предпринял бы всё возможное, чтобы сохранить для мира такого человека».

**Слайд (Виктор Талалихин)**

**Учитель музыки:**

11. А теперь внимание на экран.

**Слайд (Виктор Талалихин)**

Он был невысокого (рост 1 м 55 см), обаятельный (сегодня его улыбку назвали бы, наверное, гагаринской) Подвиг этого героя назвать случайным невозможно: к такому событию человек идет всю свою жизнь, пусть иногда и недолгую, но он просто не мог поступить иначе.

12. О каком герое сейчас пойдет речь? Какой подвиг он совершил?

**Слайд (видео Подвиг Виктора Талалихина)**

–О каком герое шла речь? Какой подвиг он совершил? (Виктор Талалихин в ночном бою таранил фашистский бомбардировщик. Это был

первый в мире ночной таран. В. Талалихину было присвоено звание Героя Советского Союза)

Отважные летчики в годы войны жадно слушали радио, вчитывались в скупые строки газет, называвших все новые и новые имена героев. Каждому из них хотелось следовать их примерам.

13. Каким летчиком прославилась наша республика? (Муса Гареев)

**Слайд (Муса Гареев)**

**Ученик 6:**

Муса Гайсинович Гареев родился в деревне Илякшиде, ныне Илишевского района. В годы Великой Отечественной войны Муса Гайсинович сражался в штурмовой авиации на самолете Ил-2 и совершил 250 успешных боевых вылетов. За мужество и героизм, проявленные в боях с немецко-фашистскими захватчиками, отважный летчик был отмечен многими правительственными наградами. Начав войну в Сталинграде в звании сержанта, он закончил ее в Германии майором, штурманом полка, дважды Героем Советского Союза.

**Учитель музыки:**

Ил-2, на котором летал Муса Гареев – был прекрасным и поистине универсальным самолетом. На вооружение частей штурмовой авиации в небольшом числе он стал поступать еще накануне Великой Отечественной войны одноместным, но его усовершенствовали, сделали двухместным, добавили кабину для стрелка.

Это была грозная, вооруженная бомбами, пушками и пулеметами машина. Кабина летчика и двигатель мощностью к 1600 лошадиных сил прикрывались надежной броней. Штурмовик обладал хорошей маневренностью, высокой живучестью и мощным огневым воздействием, что делало его незаменимым на поле боя.

Несколько позже наш Ил-2 сравнили с немецкими самолетами. Но даже лучшие из них во многом уступили ему. Советские «илы» были грозой для фашистов. Не зря они называли их «черной смертью»! Многие летчики мечтали о таком «коне».

14. А чем занимались летчики во время отдыха? (ответы детей)

**Слайд видео (фрагмент из фильма «В бой идут одни старики»)**

15. Какие слова Вам запомнились больше всего?

(Пилотом можешь ты не быть, летать научим все равно, но музыкантом быть обязан!)

После тяжелых ожесточенных боёв Муса Гареев и многие другие летчики, очень любили

напевать хорошо известную песню, а какую вы сейчас скажете сами.

**Исполнение песни «Летят перелетные птицы»**

– О чем песня? (о верности и любви к Родине)

– Как вы считаете, почему летчики испытывали большую потребность в музыке?

– Почему так велика роль музыки, роль слова и театра в жизни человека? (для солдат роль музыки и театра была как хлеб. Именно культура обогащала и питала душевный и боевой дух отважных летчиков) **(Класс делится на 7 групп, каждая группа получает конверт с заданием)**

-Сейчас каждая группа получает конверт с заданием. Ваша задача собрать пазлы с изображением картины и ответить на вопрос, каким наградами был награжден Муса Гареев:

**Слайды**

**Награждён орденами:**

1. Ленина, Красного Знамени ( трижды ),
2. Богдана Хмельницкого 3-й степени,
3. Александра Невского,
4. Отечественной войны 1-й степени ( дважды ),
5. Трудового Красного Знамени,
6. Красной Звезды (трижды ); медалями.
7. «Золотая Звезда» и Орден Ленина

Бронзовый бюст установлен на родине дважды Героя.

16. Где установлен памятник Мусе Гарееву у нас в Уфе? (на бульваре Славы)

**Слайд (Бульвар Славы)**

Не только скульптуры увековечивают память нашего легендарного летчика Мусы Гареева, но и художники. Одним из таких известных уфимских художников стал, автор многих масштабных граффити Олег Кайбышев.

17. Где мы можем увидеть этот портрет?

**Слайд (ул. Худайбердина, Дом Гареева)**

**Слайд (портрет “Муса Гареев”, граффити)**

18. Почему образ Гареева и по сей день волнует поэтов, скульпторов и художников? (они его любили, уважали, восхищались его героической натурой)

**Слайд (Парк Победы)**

Батыра похоронили в Парке Победы. Не зарастает тропа у могилы отважного орла. Однажды к ней пришёл доблестный сын нашей республики, джигит из Архангельского района, герой Советского Союза, маршал авиации Иван Иванович Пстыга.

**Слайд ( И. И.Пстыга)**

Он побывал у вечной обители своего брата по оружию, настоящего верного друга, возложил цветы. А потом спросил:

19. А песню о Мусе Гарееве сложили?

Увидев смятение на лицах сказал:

20. У башкир есть традиция увековечивать имя и славу своих батыров песней. Это очень хорошая традиция. А наш орел достоин и песен, и легенд, и романов.

А кто написал песню о Мусе Гарееве?( Ф. А. Даутова)

**Исполнение песни «Муса Гареев», (Муз и сл.  Ф. А. Даутовой)**

– С какими чувствами вы исполнили эту песню? ( с чувством гордости)

– Кто такой Муса Гареев? (Прославленный летчик-штурмовик, Герой Советского Союза)

21.Каким вы представили себе этого героя?

Нарисуйте его словесный портрет.(молодой, незаурядный, волевой и решительный)

**Слайд (видео интервью Мусы Гареева)**

**Учитель литературы:**

**(Показ книги «Штурмовики идут на цель» М. Г. Гареева)**

За плечами Мусы Гайсиновича большая и интересная жизнь. В книге **«Штурмовики идут на цель»** он живо и увлекательно рассказывает о своей комсомольской юности, о поисках призвания, о своих первых удачах и огорчениях на пути к суровой, трудной, но романтической профессии летчика. Главное место в книге, естественно, занимает война. С большой теплотой и искренностью автор вспоминает о фронтовой дружбе и братстве, о своих боевых товарищах и командирах, с кем вместе сражался в небе Сталинграда, на Миус-фронте, в Крыму, на Украине и в Белоруссии, Прибалтике и Восточной Пруссии… Многие из них погибли в жестоких боях с заклятым врагом, многие стали прославленными летчиками, удостоенными звания Героя Советского Союза.

Время летит с неумолимой быстротой. Одно поколение людей приходит на смену другому, но мы всегда будем помнить о тех, кто отстоял Мир!

**Исполнение  песни  «Два Орла»**

Сейчас для вас прозвучит песня «Два орла». Она посвящена подвигам наших предков в этой войне, мы ценим их героическую волю и стремление к свободе, мы чтим память тех, кто подарил свободу своим потомкам.

**Исполнение  песни  «Два Орла» (Муз и сл. О. Газманова)**

**Учитель музыки и учитель литературы:**

– Какие впечатления сложились у вас?

– Как вы думаете чего мы достигли на уроке?

– Как вы себя оцениваете на уроке?

– Чьи ответы вам больше всего понравились?

–Какую исследовательскую работу вы можете предложить?

**Учитель музыки:**

-За активное участие на уроке, за исполнение песен всем ставлю оценку «пять».

**Домашнее задание:**

Рассказать родителям о героях Великой Отечественной войны о маршале авиации А. Покрышкине, А. Маресьеве,  Н. Гастелло, В. Талалихине, М. Гарееве  и исполнить песни. Прочитать книгу Мусы Гареева «Штурмовики идут на цель»

**Благодарим всех за урок!**

**Слово гостям.**

На уроке присутствовали почетные гости:

Даутова Фания Абдулхаировна, поэт и композитор, автор прозвучавшей на уроке песни «Муса Гареев»; заместитель председателя Башкирского республиканского отделения российской общественной организации ветеранов «Боевое Братство», ветеран боевых действий Афганской войны - Шагимуратов Альберт Ниязович; а также начальник отделения предназначения, подготовки, аттестования и учета офицеров запаса военного комиссариата Республики Башкортостан, ветеран военной службы – Кабиров Эрнест Камилович; учитель физики Медведева Алла Николаевна, которая рассказала о своем отце-участнике ВОВ, летчике-технике, обслуживавшем боевые истребители.

# БАЛАЛАР БАҠСАҺЫНДА ЗАМАНСА ДӘРЕС

***Абдуллина Р.Ә.,***

Хәйбулла районы Бүребай ауылының

“Ҡояшҡай” муниципаль автономиялы

мәктәпкәсә мәғариф учреждениеһы

## ҠУЯН БЕҘҘӘ ҠУНАҠТА

**(урта йәштәге төркөмдә телмәр үҫтереү эшмәкәрлеге)**

**Үткәреү формаһы** : белем биреү эшмәкәрлеге
**Йүнәлеше :** телмәр үҫтереү.
**Бурыстар :**
*Белем биреү:*балаларҙы мнемотаблица ярҙамында йомаҡ ҡойорға өйрәтеү.
*Үҫтереүсе :* телмәр, аң-зиһенде, иғтибарлылыҡты үҫтереү.
*Тәрбиәүи :* йәнлек-ҡоштар донъяһына һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.
**Эш формаһы:** артикуляцион гимнастика “Кем матур йырлай?”, хәрәкәтле уйын “Ҡуянды эҙләп тап!”, һүҙлек уйыны “Ҡуян тураһында һөйлә”, ял минуты “Ҡуян сәпәкәй итә”, мнемотаблица ярҙамында йомаҡ ҡойоу.
**ТСО**: музыкаль үҙәк.
**Йыһазландырыу:** обруч (балаларҙы өс командаға бүлер өсөн), йомшаҡ уйынсыҡ ҡуян,мнемотаблица, оригами-ҡуян.

**Белем биреү эшмәкәрлеген ойоштороу:**

**Тәрбиәсе:**

– Һаумыһығыҙ, балалар! Хәлдәр нисек?

**Балалар:**

– Һаумыһығыҙ! Хәлдәребеҙ шәп!

**Тәрбиәсе:**

– Мин һеҙгә әкиәт алып килдем. күбәләк, сиңерткә, ҡуңыҙ кем матур йырлай икән, тип һөйләшеп торалар, ти. Ҡуңыҙ: “Мин матур йырлайым”, – тип йырлап күрһәткән: “Оооооооо”. Күбәләк: “Юҡ, мин матур йырлайым, ааааааааа”, – ти икән. Ә сиңерткә тыңлап торған да: “Барыбер мин матурыраҡ йырлайым, иииииииии”, – тигән. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, кемеһе

матурыраҡ йырлай икән? Быны белер өсөн беҙ үҙебеҙ йырлап ҡарайыҡ. Өс командаға бүленәбеҙ: һеҙ – ҡуңыҙҙар, һеҙ – күбәләк, ә һеҙ – сиңерткә. Ниндәй командаға күрһәтәм, шулар йырлап күрһәтә.

**Артикуляцион гимнастика “Кем матур йырлай?”**
(командалар йырлап күрһәтә)

**Тәрбиәсе:** Кемеһе матурыраҡ йырланы? Улар барыһы ла матур йырлай икән. Афарин!
**Тәрбиәсе:**
– Иртәнсәк килә ятҡанда ниндәйҙер йәнлек беҙҙең төркөмгә инеп киткәйне. Беҙҙә ул ҡайҙалыр йәшенгән. Эҙләп табайыҡ әле. Бына ҡарағыҙ әле, ниндәйҙер хат ята. Асып уҡып ҡарайыҡ әле.Бында таҙа әйткес бар икән. Бергәләшеп минең арттан ҡабатлағыҙ, шунан белерһегеҙ.

**Таҙа әйткес:**
Ян-ян-ян, аҡҡуян, йомшаҡ ҡуян,
Гән-гән-гән, беҙгә ҡунаҡҡа килгән.
На-на-на, ҡойроғо ҡыҫҡа ғына,
Гән-гән-гән,ҡолағы ергә тейгән.
**Тәрбиәсе:**
– Ниндәй йәнлек килгән беҙҙең төркөмгә? Эйе, ҡуян килгән. Йәшенгән икән беҙҙән, эҙләп табайыҡ.

**“Ҡуянды эҙләп тап!” уйыны**
(балалар төркөм буйлап ҡуянды эҙләй)

**Ҡуян:** Һаумыһығыҙ, балалар! (Ҡуян илап ебәрә) И-и-и, мин үҙемдең кем икәнемде белмәйем бит, и-и-и!
**Тәрбиәсе:** Нисек инде белмәйһең? Беҙ хәҙер һиңә балалар менән ҡуян башҡа йәнлектәрҙән нисек айырыла икәнлеген өйрәтәбеҙ.
**Тәрбиәсе:** Ҡуяндың ҡолаҡтары ниндәй?
**Балалар:** Ҡуяндың ҡолаҡтары оҙон, ергә тейеп тора.
**Тәрбиәсе:** Ә уға оҙон ҡолаҡ нимә өсөн кәрәк икән?
**Балалар:** Бүре, төлкө килә ятҡанын һәйбәт ишетер өсөн.
**Тәрбиәсе:** Ә ул ҡайҙа йәшәй?
**Балалар:** Ҡуян урманда йәшәй.
**Тәрбиәсе:** Тағы ла ҡуян тураһында нимәләр беләһегеҙ?

**Һүҙлек уйыны. “Ҡуян тураһында һөйлә”**
(тәрбиәсе ярҙамында балалар ҡуян тураһында һөйләп бирәләр)
**Ҡуян:** Рәхмәт, балалар! (Ҡыуанып балаларҙың ҡулдарын ҡыҫа)

**Тәрбиәсе:** Ә хәҙер ҡуян менән бергә ял итеп алайыҡ. Беҙҙең балалар ҡуян тураһында ла ял минуты беләләр. Ҡуянға күрһәтәбеҙме?

**Ял минуты. "Ҡуян сәпәкәй итә"**

Тейен сәпәкәй итә (сәпәкәй итеү),
Ҡуян иҙәнде тибә (иҙәнгә бер аяҡ менән тибеү).
Ә айыу – тайыш табан (ҡулдарҙы йәйеп атлап күрһәтеү)
Башын ғына һелкетә (баш һелкетеү).
Ҡуян йүгереп китә (урында йүгереү),
Ул да башын һелкетә (баш һелкетеү).
Йән- яғына ҡаранып,
Ағас төбөнә боҫа (һикереп, иҙәнгә ултырыу).

**Ҡуян:**

– Ҡалай шәп! Онотоп торам әле, мин дә бит һеҙгә уйын алып килдем. Балалар менән уйнарға яратам, иң беренсе һеҙгә килеп эләктем. Ул уйын ябай түгел, ә тылсымлы. Карточкалағы һүрәткә ҡарап, йомаҡ уйлап һөйләргә тейешһегеҙ. Әммә мин алып килгән таблица ярҙамында йомаҡ ҡойор кәрәк.

**Ҡуян:**

– Беренсе карточкаға ҡарап ҙурмы, бәләкәйме икәнлеген әйтер кәрәк. Икенсе карточкала – төҫөн, өсөнсө карточкала – нимә ашағанлығын әйтер кәрәк. Мәҫәлән: миңә ҡуян һүрәте эләкте икән, ти. Мин һөйләй башлайым: ул бесәй ҙурлығында, ҡышын аҡ, ә йәйен – һоро, кишер, кәбеҫтә ашарға ярата.  Аңланығыҙмы? Үҙегеҙ алған карточканы бер кемгә лә күрһәтмәйбеҙ.

–

**Мнемотаблица ярҙамында йомаҡ ҡойоу**

**Ҡуян:**

– Ҡайһылай шәп балалар булып сыҡтығыҙ! Барыһын да беләһегеҙ икән.

**Тәрбиәсе:** Бөгөн бик актив булдылар:...., ә башҡаларға ҡыйыуыраҡ булыр кәрәк. Хәҙер бөтәбеҙ ҙә үҙебеҙҙе һөйөп алабыҙ. Кемдәр актив ҡатнашты, уларға сәпәкәй һуғайыҡ. Беҙ бөгөн нимә эшләнек?

**Ҡуян:** Рәхмәт, балалар! Ә миңә артабан юлымды дауам итер кәрәк.

Әҙәбиәт:


1. Гөлбостан. Методическое пособие по развитию речи для детских учреждений / Азнабаева Ф.Г., Елкебаева Г.Р., Нарынбаева А.З. – Уфа: Китап, 2010.

2. Ләйсән: балалар баҡсаһында башҡорт телен өйрәнеү өсөн дәреслек. 2-се баҫма. –  Өфө: Китап, 2008. – Һүрәттәре менән 176 бит.

3. Физминутки для детей дошкольного и младшего школьного возрастов: учебно-методическое пособие / Издание Сибайского института Башкирского государственного университета. – Сибай, 2000. – 38 с.

***Кәримова Г.К.,***

Хәйбулла районы Бүребай ауылының

“Ҡояшҡай” муниципаль автономиялы

мәктәпкәсә мәғариф учреждениеһы

# БАҠЫР ТАУ БАТШАЛЫҒЫНА СӘЙӘХӘТ

**(өлкәндәр төркөмө өсөн)**

**Төп белем биреү өлкәһе**: физик тәрбиә.

**Маҡсаттар:**

**Белем биреүсе:** балаларҙы Хәйбулла районы тәбиғәте, тауҙары, мәғдән, баҡыр сығарыу, Таналыҡ йылғаһы менән таныштырыу, хәрәкәтле уйындар, йомаҡтар аша белемдәрен киңәйтеү.

**Үҫтереүсе:** бүрәнә буйлап әйберҙәр аша атлауҙы, йүгереп үтеүҙе, аяҡ һәм ҡул хәрәкәттәренең тап килеүен камиллаштырыу. Кәүҙәне дөрөҫ тотоп, күнегеүҙәр эшләүгә күнектереү, фекерләүҙе, уйлауҙы, телмәрҙе, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Тәрбиәүи:** балаларҙы тәбиғәткә ҡарата һөйөү, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Һүҙлек эше:** мәғдән, баҡыр, руда, шахта.

**Эш алымдары:** әңгәмә, «Баҡыр тау батшалығы» хәрәкәтле уйыны, һаулыҡ һуҡмағы аша үтеү, мәғдән, таштар, шахта иллюстрацияларын күрһәтеү, йомаҡ сисеү.

**Йыһазландырыу:** башҡорт көйө, флаг, түңәрәк дуғалар, кегли, туп ташлау өсөн кәрзиндәр.

**Техник саралар:** музыкаль үҙәк,музыка ҡоштар тауышы, яҙҙырылған тауыш.

**Үткәреү:**

1. **Инеш өлөш:**

*Балалар теҙелешеп спорт майҙансығына сығалар.*

**Физик тәрбиә биреү етәксеһе**: Һаумыһығыҙ, балалар! Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙҙе сәләмләп алайыҡ.

*“Сәләмләү”*

*Һаумы, ҡояш!*

*Һаумы, зәңгәр һауа!*

*Һаумыһығыҙ, дуҫтарым!*

*Сәләмләйем мин һеҙҙе,*

*Сәләмәт булһын өсөн.*

**Физик тәрбиә биреү етәксеһе** :*Балалар! Мин бер тауыш ишетәм (микрофондан тауыш ишетелә).*

**Сыңғыҙхан**: Балалар! Мин Сыңғыҙхан исемле малай булам. Йүгерергә, көрәшергә, уктан атырға яратам, шуға күрә һеҙҙең янға килергә сыҡҡайным. Юлда килгәндә, ҡапыл көслө ел-дауыл күтәрелеп китте лә, мине мәғдән батшаһының вәзирҙәре урлап алып китте. Баҡыр тау батшалығына алтын йозаҡ менән бикләп ҡуйҙылар. Уғым да ҡайҙалыр төшөп ҡалған, бәлки һеҙ миңә ярҙам итерһегеҙ! Ҡотҡарығыҙ мине, зинһар!

**Физик тәрбиә биреү етәксеһе**: Ни эшләргә инде хәҙер? Балалар, Сыңғыҙханға ярҙам итә алабыҙмы?

**Балалар:** Эйе!

**Физик тәрбиә биреү етәксеһе**: Баҡыр тау батшалығында беҙгә төрлө ҡаршылыҡтар, көтөлмәгән хәлдәр осрауы мөмкин. Һеҙ барыһына ла әҙерһегеҙме?

**Балалар:** Эйе!

Балалар бер-бер артлы теҙелеп атлай.

*Бер,ике,өс.*

*Беҙҙә шундай көс.*

**2.Төп өлөш.**

– Беҙҙең сәйәхәт һаулыҡ һуҡмағы буйлап дауам итә.

1. йылға ҡомо аша атлап үтеү (ҡулдарҙы билгә ҡуйып,аяҡ ослап атлап йөрөү).

2. ҡырсын таш аша үтеү (тубыҡтарҙы юғары күтәреп атлап йөрөү).

3. ҡыҙыл ҡомдан үтеү (гимнастик аҙым менән атлап барыу).

4. бүрәнәләр өҫтөнән үтеү (аяҡты өҫкә күтәреп,ҡулды билгә ҡуйып).

*Ҡытыршы юлдан атлап үтеү.*

Сүгәләп атлау, ҡулдарҙы тубыҡҡа ҡуйыу.

– Артабан юлыбыҙҙы дауам итеп, йүгереп үтәйек.

**Тын алыу күнегеүе.**

*Тәрән итеп, танау аша тын алып, ҡулдарҙы күтәреү, тынды танау аша сығарып, ҡулдарҙы төшөрөү.*

**Физик тәрбиә биреү етәксеһе**:Балалар һеҙҙең менән сәскәле аҡланға килеп еттек физик күнегеү эшләп алайыҡ.

**Дөйөм үҫеш күнегеүе: “Сәскәләр”.**

**1. Матур-матур сәскәләр үҫә икән аҡланда.**

Тәүге торош: аяҡтар яурын киңлегендә, ҡулдар ирекле төшөрөлгән:

1-2 – ҡулдарҙы өҫкә күтәреү;

3-4 – тәү торошҡа ҡайтыу.(4-5 тапҡыр)

***2. Сәскәләр елгә бәүелә.***

Тәүге торош: аяҡтар яурын киңлегендә, ҡулдар юғары күтәрелгән:

1-2 – кәүҙә менән уңға эйелеү;

2-3 – тәү торошҡа ҡайтыу;

5-6 – кәүҙә менән һулға эйелеү.

7-8 – тәү торошҡа ҡайтыу (4-5 тапҡыр)

***3. Сәскәләр йоҡлайҙар, һабаҡтарын эйәләр.***

Тәүге торош: аяҡтар яурындан киңерәк, ҡул күкрәк тапҡырында.

1-2 – сүгәләп ултырыу.

3-4 – тәү торошҡа ҡайтыу.

***4. Сәскәләр ҡояшҡа ынтыла.***

Тәүге торош: тубыҡланып ултырыу, ҡулды билгә ҡуйыу.

1-2 – тубыҡҡа тороу,ҡулды юғары күтәреү;

3-4 – тәү торошҡа ҡайтыу (5-6 тапҡыр)

***5. Матур сәскәләрҙе күреп беҙ шатланабыҙ.***

Тәүге торош: аяҡ осонда һикереү, ҡулдарҙы өҫкә күтәреп сәпәкәйләү (5-6 тапҡыр*)*

***6. Сәскәләрҙең хуш еҫтәрен еҫкәйек.***

Танау аша тын алып, ҡулдарҙы юғары күтәреү, тынды сығарғанда, төшөрөү.

**Физик тәрбиә биреү етәксеһе**: Балалар, көс тупланыҡ. Юлыбыҙҙы дауам итәйек.

*Ҡытыршы юлдан атлап үтеү.*

Беҙҙең алда Таналыҡ йылғаһы ағып ята. Уны үтер өсөн, ҙур күпер аша сығыр кәрәк. Тик был ябай күпер түгел, әгәр ҙә йомаҡтар сисһәк, күпер аша үтә алабыҙ.

1. Ем-ем итә емелдәп китә. (Йәшен)

2. Күктән килде, ергә китте. (Ямғыр)

3. Аллы-гөллө көйәнтәмде йылға аша ташланым. (Йәйғор)

4. Төн тыуҙыра, көн йыуҙыра. (Ысыҡ)

**Физик тәрбиә биреү етәксеһе**: Иғтибар менән ҡарағыҙ , бәлки беҙ Сыңғыҙхандың уғын табып алырбыҙ. (Күперҙең икенсе осонда уҡ күреп ҡалалар). Беҙгә уҡты алыр өсөн күперҙән һаҡ ҡына аҙымдар менән атлап үтергә кәрәк.

*Тар эскәмйә аша атлап үтеү.*

*Музыка яңғырай, балалар һаҡ ҡына күперҙе үтеп сығалар һәм уҡты үҙҙәре менән алалар.*

**Физик тәрбиә биреү етәксеһе**: Ҡарағыҙ әле, беҙ тау-таштар араһына килеп сыҡтыҡ. Ниндәй матур таштар! Алтын-көмөш күҙҙең яуын алып, ялтырап тора. Бындай таштарҙы, балалар, ер аҫтынан табып алалар һәм Буребай ауылындағы шахтанан сығаралар.

**Фотоһүрәттәр ҡарала** .

Мәғдән, баҡыр, руда, шахта. Һүҙлек өҫтөндә эш.

**«Ҡырҡылған һүрәттәрҙе өлөштәрҙән йыйыу» дидактик уйыны**

Ә хәҙер ике төркөмгә бүленеп, ҡырҡылған таш һүрәттәрен йыяйыҡ.

Артабан юлыбыҙҙы дауам итәбеҙ. (Ҙур таштар урынына дүңгәләктәр һалына). Хәҙер беҙ ошо ҙур таштарҙан үтергә тейешбеҙ. Ә нисек үтергә икән, һеҙ нисек уйлайһығыҙ? (Яуаптар)

Балалар ҡулдарын билгә ҡуйып, ике аяҡта дүңгәләктән дүңгәләккә һикереп үтәләр.

**Физик тәрбиә биреү етәксеһе**: Балалар, бында беҙҙе тағы ла ниндәйҙер һынауҙар көтә!

Ике командаға бүленеп уйын ярыш үткәрелә.

***1-се ярыш. «Кем мәргән?»***

Балалар икешәрләп ярыша.Тура һыҙыҡтан алыҫыраҡ торған кәрзингә туп ырғыталар.

Тупты ташлаған пар кире урынына барып баҫа, икенсе пар туп ырғыта.

***2-се ярыш. «Кем етеҙ һәм сос?»***

Һәр команда алдына дуға ҡуйыла. Балалар уның аҫтынан шыуып үтергә тейеш.

***3-сө ярыш. «Кемдең уғы сәпкә тейер».***

***“Баҡыр тау батшалығы” хәрәкәтле уйыны***

***Маҡсат: хәрәкәт әүҙемлеген, сослоҡто, етеҙлекте үҫтереү.***

Баҡыр тау биләмәһе түңәрәк формаһында билдәләнә.

Һанашмаҡ буйынса батша һайлана , батша үҙенең биләмәһен һаҡлай, башҡаларҙы үткәрмәй, кемде тота, ул уйындан сыға. Кем дә кем баҡыртау батшалығына үтеп инә ала – шул еңеүсе тип һанала.

**Физик тәрбиә биреү етәксеһе**: Балалар, ниһәйәт, беҙ уйын уйнап, көс туплап, Баҡыр тау батшалығына ла килеп еттек. Сыңғыҙханды нисек ҡотҡарырға асҡысты ҡайҙан табырға, бәлки берәй таш аҫтына йәшергәндәрҙер, әйҙә эҙләйек, кем иғтибарлы ,шул беренсе таба.

***«Асҡысты тап» уйыны***

Күңелле музыка ишетелә, асҡыс таш аҫтына йәшерелгән. Балалар ташҡа яҡын килһәләр, музыка шәбәйә. Алыҫ йөрөһәләр, шым ғына яңғырай.

**Физик тәрбиә биреү етәксеһе**: Афарин, балалар! (Ишекте асалар. Сыңғыҙхан килеп сыға, балаларға рәхмәт әйтә. Уҡты балаларға бүләк итеп бирә).

**3.Йомғаҡлау.**

**Физик тәрбиә биреү етәксеһе**: Балалар, беҙгә ҡайтырға ваҡыт. Сыңғыҙханға ярҙам иттек, тыуған ауылыбыҙҙа мәғдән, баҡыр сыҡҡан ергә сәйәхәт ҡылдыҡ. Ҙур үҫкәс, һеҙ ҙә ошо урында – ата-бабаларығыҙ эшләгән ерҙә уларҙың һөнәрен дауам итерһегеҙ, тип уйлайбыҙ. Һау булығыҙ!

## Ҡулланылған әҙәбиәт:


1. Аҙнабаева Ф.Ғ., Шафиҡова Г.Р. Тәбиғәт һәм кеше. Методик ҡулланма. – Өфө: Китап, 2012.

2. Нафиҡова З.Ғ. Уйнай-уйнай үҫәбеҙ. Методик ҡулланма. – Өфө: Китап, 2010.

3.Аҙнабаева Ф.Ғ., Еникеева Д.У., Яфаева В.Г. Хәрәкәттә үҫәбеҙ. Балалар баҡсаһында физик белем биреү эшмәкәрлеге буйынса методик ҡулланма. – Өфө: Китап, 2013.

4.Галяутдинов И.Г. Башкирские народные детские игры (на русском и башкирском языках). – Уфа: Китап, 2002.

***Әлбәкова З.Й.,***

Хәйбулла районы Бүребай ауылының

“Ҡояшҡай” муниципаль автономиялы

мәктәпкәсә мәғариф учреждениеһы

# ФАТИМА ИНӘЙҘӘ ҠУНАҠТА

## (Башҡорт халҡының милли ашы – ҡорот)

(Уртансылар төркөмө)

**Үткәреү формаһы:** белем биреү эшмәкәрлеге (шөғөл)
**Йүнәлеше:** телмәр үҫтереү.
**Интеграция:** баланың донъяны танып белеү үҫеше, физик үҫеш.
**Бурыстар:**
*Белем биреү:* балаларҙы башҡорт халҡының милли аш-һыуҙары менән таныштырыуҙы дауам итеү, ҡорот менән яҡындан таныштырыу, уға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу, эшләү ысулдары менән таныштырыу: ҡоротто нимәнән, нисек эшләгәнде аңлатып биреү;

*Үҫтереүсе:* балаларҙың иғтибарлылығын, бәйләнешле телмәрен, һорауҙарға яуап биреү оҫталығын үҫтереү;

*Тәрбиәүи:* башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәренә, милли аш-һыуҙарға ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм һөйөү тәрбиәләү.
**Эш формаһы:** тел төҙәткестәр; “атта барыу”; Фатима инәй менән осрашыу; йомаҡтар сисеү; «Аҡ ҡалас», «Тирмә» башҡорт халыҡ уйындары; ҡорот эшләү тәртибе менән танышыу; шиғыр ятлау.
**ТСО:** музыкаль үҙәк, телевизор.
**Йыһазландырыу:** тел төҙәткестәр һүрәттәре; «ауыл йорто» макеты; камзул; яулыҡ; “ҡорот эшләү” презентацияһы; “ҡорот эшләү” мнемотаблицаһы; «Тирмә» уйынына ҡурай моңо, яулыҡтар, ултырғыстар; ҡорот, эремсек.
**Белем биреү эшмәкәрлеге барышы:**
**Тәрбиәсе:** Һаумыһығыҙ, балалар!
**Балалар:** Һаумыһығыҙ!
**Тәрбиәсе:** Беҙ бөгөн, балалар, ҡунаҡҡа барабыҙ. Юлға сығыр алдынан телебеҙгә гимнастика эшләтеп алайыҡ. Тел төҙәткестәрҙе ҡабатлайыҡ.
**Тел төҙәткестәр.**
**Тәрбиәсе:** Балалар, беҙҙе бөгөн ауылға Фатима инәй ҡунаҡҡа саҡырҙы. Барайыҡмы? Нимә менән барыу уңайлы булыр? (Балаларҙың яуаптары)

**Тәрбиәсе:**

– Әйҙәгеҙ, ат менән барайыҡ!

Сабабыҙ беҙ сабабыҙ,
Беҙ ауылға барабыҙ
(ат хәрәкәте эшләү)
Аттар ҡасты яланға,
Үлән һутлы булғанға.
(бармаҡтарҙы тоташтырып ҡулдарҙы һуҙырға, кәүҙәне алға бөгөргә)
Ә бына тора ҡоҙоҡ,
Һыуы тәмле һәм һыуыҡ.
*(«ауыл йортона» барып туктайҙар)*

**Тәрбиәсе:** Бына, балалар, ауылға килеп тә еттек. Ә Фатима инәй ҡайҙа икән? (Саҡыра). Мин уны эҙләп киләйем әле, ә һеҙ шым ғына ултырып тороғоҙ. (Тәрбиәсе, өй артына инеп, камзул кейеп, яулыҡ ябынып сыға).

**Фатима инәй:** Һаумыһығыҙ, балаҡайҙар! Нисек килеп еттегеҙ?

**Балалар:** Һаумыһығыҙ, инәй! Һәйбәт килеп еттек.

**Фатима инәй:** Ҡайһылай уңайлы ғына килеп еттегеҙ, самауырым да әҙер, бәләкәстәрем. Һеҙгә тип төрлө ризыҡтар әҙерләгәйнем. Ниндәй ризыҡ икәнлеген йомаҡтарҙы сисһәгеҙ генә белерһегеҙ.

(Балалар дөрөҫ яуап биргән һайын, тәрбиәсе мольбертка һөт аҙығы һүрәтен ҡуя).

1. Аҡ шишмәнән тамсы булып тама,
Һауытка ҡойһам – ҡуйы булып ҡала. (Ҡатыҡ)

2. Бәләкәй генә йомроҡайҙың мине туҡландырғыһы килә.
Уны иҙгәндәр, һыҡҡандар, ваҡыт биргәндәр – киптерергә ҡуйғандар. (Ҡорот)

3. Була ҡыҙыл, була аҡ.
Балалар уны бигерәк ярата.
Уның менән аҙыҡланһа,
Һөйәк-тештәре ныҡ була. (Эремсек)

4. Һәүкәш ҡайтҡас көтөүҙән,
Әсәй сепарат айыртҡан.
Килеп сыҡты тәмле аҙыҡ
Уның исеме ….(ҡаймаҡ)

5. Кеше икмәккә һылай.
Унһыҙ хатта табын ҡормай.
Бутҡа өҫтөндә ялтырай.
Ул – һап-һары ғына …..(май)

6. Алма тиһәң, алма түгел,
Ҡыяр тиһәң, түңәрәк.
Бик ҡәҙерләп кенә телеп,
Ашъяулыҡҡа һалалар,
Ул өҫтәлдә иң бөйөк аш.-
Был ни була,балалар? (Икмәк)

**Фатима инәй:** Афарин, аҡыллыларым, бик тә шәпһегеҙ! Йомаҡтар сисеп арып та киткәнһегеҙҙер, балаҡайҙарым. «Аҡ ҡалас» уйынын уйнап алайыҡ әле.

**“Аҡ ҡалас” уйыны**

Балалар түңәрәккә баҫа. Берәүһе – уртала.
Рәүилдең тыуған көнөндә
Беҙ бешерҙек аҡ ҡалас;
Бына шулай ул бейек,
(балалар ҡулдарын юғары күтәрәләр)
Бына шулай тәбәнәк,
(балалар сүгәләп, ҡулдарын аҫҡа төшөрәләр)
Бына шундай киңлеге,
(балалар ҡулдарын ян-яҡҡа йәйәләр)
Бына шулай тарлығы,
(балалар ҡулдарын һуҙып,
Урталағы балаға яҡынаялар)
Аҡ ҡалас, аҡ ҡалас,
Теләгәнеңде һайлап ҡас.
*Урталағы бала үҙе урынына берәүҙе һайлап сығара ла, үҙе түңәрәктәгеләргә ҡушыла һәм уйын-йыр шулай дауам итә.*
**Фатима инәй:** Ярай, бәләкәстәрем, урындарығыҙға ултырығыҙ. Ошо ризыҡтарҙың араһынан минең иң яратҡаным – ҡорот, ул нимәнән эшләнгәнен беләһегеҙме? (Ҡороттоң һүрәтен күрһәтә). Ул ниндәй төҫтә, нисек эшләнә икәнлеген беләһегеҙме? (Балаларҙың яуаптары)

Ә, бына мин, һеҙгә күрһәтеп, һөйләп бирәйем тип уйлағайным, миңә ярҙамлашаһығыҙмы?

**Ҡорот эшләү презентацияһы**
1слайд. «Ҡорот эшләү»
**Фатима инәй:** Ҡорот әҙерләр өсөн беҙгә нимә кәрәк?
**Балалар:** Һөт кәрәк.

2 слайд

**Фатима инәй:** Әлбиттә, һөт. Сөнки һөт аҙыҡтары туҡлыҡлы ла, витаминдарға ла бик бай. Ҡорот эшләр алдынан ҡатыҡ эшләйҙәр. Ҡатыҡ – башҡорттарҙың һәр урында ла киң файҙаланылған һәм яратып ҡабул ителгән хөрмәтле ризығы. Ул былай әҙерләнә: һөттө талғын утта ҡайнатаһың.
3, 4, 5 слайд
Һөт ҡайнап сыҡҡас, һыуытырға ҡуяһың. Яңы һауылған һөт кимәленә еткәс, ойотҡо һалаһың да, йылы ергә ултыртаһың. Ойоп сыҡҡас та, өҫкә ҡалҡҡан һыуын ала биреп, һалҡынға ҡуяһың.
6 слайд
Ҡатыҡ – көндәлек ризыҡ. Уны оҙаҡ һаҡлап булмай, 2- 3 көндән ул әсей, күпсей башлай. Күпереп әсегән ҡатыҡ (эркет) йәнә бер ҡәҙерле һәм ҡиммәтле

ризыҡ – ҡорот яһау өсөн ҡулланылған. Ул былай әҙерләнгән: эркетте талғын ғына утта ҡайнаталар.
7, 8 слайд
Төйөрһөҙ генә ҡайнатып алғандан һуң, һыуытырға ултыртаһың һәм һыуынып сыҡҡас, киндер йәки таҫтамалдан тегелгән тоҡҡа ауҙараһың.
9 слайд
Ике көн һарҡҡас, ҡоротто тоҡтан алып, ҙур табаҡҡа ауҙараһың да баҫаһың. Озаҡ һаҡларға, ашҡа һалырға кәрәк булһа, тоҙ һалаһың. Баҫҡас, йомғаҡҡа әүәләйһең дә киптерәһең.

10 лайд

**Фатима инәй:** Балалар, мин нисек ҡорот эшләргә кәрәген күрһәттем, әйҙә һеҙ ҙә һөйләп, күрһәтегеҙ.
**Мнемотаблица менән эш итеү** (3-4 баланан һөйләтеү)
Ҡатыҡ ҡойҙоҡ ҡаҙанға,
Ҡатыҡ ҡайнай ҡаҙанда.
Тап-таҙа тоҡҡа ҡойҙоҡ,
Ҡоротто теҙеп ҡуйҙыҡ.
**Фатима инәй:**
– Бына ҡорот әҙерләнек бергәләп, ауыҙ итеп алығыҙ әле. (Тәрбиәсе балаларға ҡорот тәмләргә бирә).

Беҙҙең балалар Рәсимә Ураҡсинаның һөт аҙыҡтары тураһында ҡайһы бер шиғырҙарын өйрәнеп килгәйнеләр.

Ойом-ойом, ойомос,
Ҡатыҡ булды ойомос.
Тәмле ҡатыҡ тамаҡҡа,
Бейеп киттем таҡмаҡҡа.
Ҡатыҡ ҡаймаҡ ярата,
Ҡаймаҡ ҡатыҡҡа бата.
Ҡалаҡ ҡатыҡ ашата,
Ҡаймаҡ ҡалаҡ ярата.
Ҡатыҡ эстем ҡалаҡлап,
Ҡатыҡ эстем ҡаймаҡлап.
Күңелем көр, ҡыуанам,
Бейеп торам уйнаҡлап. (“Ҡатыҡ”)

Эй эремсек, эремсек,
Эремсек яратабыҙ.
Аҡ эремсек туйҙырһа,
Ҡыҙылын ҡайнатабыҙ. (“Ҡыҙыл эремсек”)
**Фатима инәй:** Ҡорот эшләнек, шиғыр менән нығыттыҡ. Эш бөткәс, уйнарға ярай, тигән боронғолар. «Тирмә» уйынын уйнап алайыҡтар.

**«Тирмә» уйыны**

**Фатима инәй:** Рәхмәт, һеҙгә, балалар, миңә ҡунаҡҡа килгәнегеҙгә. Мине ҡыуандырып, күңелемде күтәрҙегеҙ. Һеҙгә балалар баҡсаһына ҡайтырға ла

ваҡыттыр. Башҡорт йолаһы буйынса ҡунаҡтарҙы күстәнәс менән оҙаталар. Бына һеҙгә эремсек. Һау булығыҙ! (Тәрбиәсе йорт артында яулыҡ, алъяпҡысын сисә).

**Тәрбиәсе:** Фатима инәй йорт мәшәкәттәре менән булыша. Ә беҙ аттарға атланып, ҡайтыу яғына юлланайыҡ. Минең арттан ҡабатлағыҙ:

Сабабыҙ беҙ, сабабыҙ,
Балалар баҡсаһына ҡайтабыҙ.
(Атта сабыу хәрәкәте эшләү)

**Тәрбиәсе:** Балалар, һеҙ бөгөн ҡайҙа ҡунаҡҡа барҙығыҙ? Нимә белдегеҙ? Ниндәй уйындар уйнанығыҙ? (Балаларҙың яуаптары)

**Рефлексия**

**Тәрбиәсе:** Һеҙгә бөгөнгө шөғөл оҡшаһа, ҙур бармаҡтарығыҙҙы күрһәтегеҙ. Ә инде оҡшап бөтмәһә, бер аяҡ менән ҡаты итеп баҫығыҙ.

Әҙәбиәт:


1. Осҡон (Искра). Программа-руководство для обучения государственному башкирскому языку детей в детских садах / З.Г.Нафикова. – Уфа: Китап, 2010.
2. Земля отцов. Программа-руководство / Р.Х.Гасанова. – Уфа: Издательство БИРО, 2004.
3. Хеҙмәт – тормош сығанағы / Аҙнабаева Ф.Г. – Өфө: Китап, 2010.
4. Тәмле-тәмле тәмлекәс / Ураҡсина Р.М. – Өфө: Китап, 1996.



***Сөләймәнова М.Х.,***

Йылайыр районы Йылайыр ауылының
“Ҡояшҡай” муниципаль бюджет
мәктәпкәсә мәғариф учреждениеһы


## “МИНЕҢ МАТУР БАРМАҠТАРЫМ”

(Уртансылар төркөмөндә асыҡ дәрес)

Йыһазландырыу: бармаҡтарға махсус кейем: олатай, өләсәй, атай, әсәй, бала бармаҡтар; һары буяу, ҡағыҙ.

Маҡсат: балаларҙы бармаҡтарҙы һаҡларға, уларҙы нығытырға өйрәтеү; балаларҙың хәтерен, фекерләй белеү һәләттәрен үҫтереү. Балаларҙа башҡорт халыҡ ижадына һөйөү тәрбиәләү.

Дәрес барышы:
– Балалар, бармаҡтар өсөн күнекмә эшләп алайыҡ әле:
*Бына тора өй, ишегендә йоҙаҡ.*
*Кем уны аса алыр?*
*Бороп ҡарайбыҙ, һуғып ҡарайбыҙ,*
*Тартып ҡарайбыҙ – асылды.*
*Өй эсендә өҫтәл тора, ултырғыс.*
*Өҫтәл өҫтөндә сынаяҡ,*
*Сынаяҡта тәмле бал,*
*Ирендәрҙе ялап алайыҡ.*
– Мин һеҙгә йомаҡ ҡоям. Кемегеҙ сисер икән? Кемегеҙ зирәк икән?
Бер әсәлә биш бала. (Бармаҡтар).

– Эйе, дөрөҫ, зирәк икәнһегеҙ.

– Балалар, бөгөн беҙ һеҙҙең менән бармаҡтар тураһында һөйләшәбеҙ. Әйтегеҙ әле, бармаҡтар беҙгә ни өсөн кәрәк?
– Бармаҡтар яҙа, тегә, сигә, бәйләй, сәс үрә, утын яра, ҡалаҡ тота белә.
– Афарин! Иршат менән Әлиә беҙгә бармаҡтарҙың ни эшләүе тураһында әйтеп китмәкселәр.
Иршат:
*Биш бармағым – биш туған.*
*Һәр ҡайһыһы бик уңған:*
*Иҙән йыуа, керҙәр элә,*
*Он иләй, икмәк телә.*

Әлиә:
*Һәр эштең яйын белә,*
*Дәфтәргә хәреф теҙә.*
*Баҡсала үлән өҙә,*
*Энә тотоп, сәскә сигә,*
*Матур итеп күлдәк тегә.*

– Бармаҡтар – беҙҙең иң беренсе ярҙамсыларыбыҙ. Уларһыҙ беҙ бер нәмә лә эшләй алмаҫ инек. Һеҙ беләһегеҙме, балалар, һәр бер бармаҡтың исеме бар:

*Мин баш бармаҡ, баш бармаҡ,*
*Һәр эште мин башлайым.*
*Өй эсендә тиҙ генә*
*Йыйыштырып ташлайым.*
*Сығанаҡ тип аталам,*
*Сығып китәм туғайға.*
*Сығып түгел, осоп китәм*
*Атланып буҙ турғайға.*
*Урта бармаҡ мин үҙем.*
*Һәр эштә лә мин түҙем.*
*Сүп утайым, һыу һибәм,*

*Керҙәрем, ана, кибә.*
*Мин һуҡ бармаҡ, һуҡ бармаҡ,*
*Һуҡ тигәнгә һуҡмайым.*
*Кескәйҙәрҙе илатҡанды*
*Туҡмарға ла ҡурҡмайым.*
*Минең исемем сәтәкәй,*
*Үҙем бигерәк бәләкәй.*
*Ҡаймаҡ ашап, һөт эсәм,*
*Ҡасан инде ҙур үҫәм?*
(Балалар һөйләй).

– Бармаҡтарҙың исемдәрен иҫтә ҡалдырайыҡ: баш бармаҡ, сығанаҡ бармаҡ, урта бармаҡ, һуҡ бармаҡ, сәтәкәй бармаҡ.

– Афарин, балалар! Ҡыҙҙар, малайҙар, һеҙҙең бар үҫешегеҙ бармаҡтарға бәйләнгән. Бәләкәй саҡтан бармаҡтар хәрәкәтсән, һығылмалы, төҙ булып үҫергә тейеш. Бының өсөн беҙҙең олатай-өләсәйҙәр бармаҡтар менән төрлө уйындар үткәргәндәр:

*Уң ҡулда ла биш бармаҡ,*
*Һул ҡулда ла биш бармаҡ.*
*Бармаҡтарым һеҙҙең менән*
*Уйнамаҡ та шаярмаҡ.*

– Әйҙәгеҙ, балалар, беҙ ҙә бармаҡтар менән уйнап алайыҡ:

*Бутыр- бутыр бутҡа бешкән,*
*Эсенә ҡалаҡ төшкән.*
*Уны алам тигәнсе*
*Биш бармағын бешергән.*
Бармаҡтар бик күп эштәр башҡара, тип әйткәйнек. Әйҙә күрһәтәйек әле:
*Баш бармаҡ бөрлөгән йыя,*
*Сығанаҡ бармаҡ салбар кейә,*
*Урта бармаҡ утын яра,*
*Һуҡ бармаҡ һыйыр һауа,*
*Сәтәкәй бармаҡ сәй эсә.*
Һәр бармаҡты кешеләр менән дә сағыштырырға була:
*Был бармаҡ – олатай,*
*Был бармаҡ – өләсәй,*
*Был бармаҡ – атай,*
*Был бармаҡ – әсәй,*
*Был бармаҡ – мин.*
*Бөтәбеҙ татыу ғаилә.*
(Һәр бармаҡҡа махсус кейем кейендерелә).
Тәрбиәсе: – Минең сәтәкәй бармаҡтың исеме – Миңһылыу. Ә һинеке кем?
Бала: – Минең сәтәкәй бармағымдың исеме – Әлиә. ( Башҡа балалар ҙа исемдәрен әйтеп сығалар).
Тәрбиәсе: – Беҙҙең һаулығыбыҙ бармаҡтарға бәйләнгән. Бармаҡтарҙы һаҡларға кәрәк. Ҡайһы бармағығыҙ йыш йәрәхәтләнә, иғтибар итегеҙ, баш

бармаҡ икән – тамаҡ, баш, тын юлы ауырыуҙары бар, урта бармаҡ йышыраҡ ауыртһа, ашҡаҙаның ауырта, тигән һүҙ. Бармаҡтарҙы таҙа тоторға, тырнаҡтарҙы ҡырҡып йөрөргә кәрәк. Сөнки тырнаҡтар аҫтына бысраҡ йыйыла.

Ишек туҡылдаталар. Тыртыр инә. Ул кәйефһеҙ.

Тәрбиәсе: – Балалар, беҙгә кем килгән? Тыртыр, ә һиңә ни булды?

Тыртыр: – Мин һүрәт төшөрәйем, тигәйнем. Буяуым бар ҙа ул, ә бумаланы онотҡанмын. Миңә ни эшләргә? Ярҙам итә алмаҫһығыҙмы?

Тәрбиәсе: – Балалар, әйҙәгеҙ Тыртырға ярҙам итәйек. Тыртыр, ә бумалаң булмаһа, бармаҡтар менән дә һүрәт төшөрөп була бит. Файҙалы ла.

Тыртыр: – Бөгөн көн болотло. Ә мин ҡояшты төшөргөм килгәйне.

Тәрбиәсе: – Әйҙәгеҙ, балалар, Тыртыр ҙа беҙҙең менән эшләһен.

Балалар, Тыртыр бармаҡтар менән һүрәт эшләйҙәр.

Тыртыр:

– Вәт шәп килеп сыҡты! Мин эшләп бөттөм.Ҡайҙа һеҙҙең эшегеҙҙе лә ҡарайым. Һеҙҙеке лә шәп килеп сыҡҡан!

Балалар Тыртыр менән бергә һүрәттәрҙе ҡарайҙар.

– Ысынлап та, балалар, бик тырышып эшләгәнһегеҙ. Ҡарағыҙ әле, һеҙ эшләгән ҡояштарҙан көн асылып, тирә-яҡ яҡтырып китте.

– Бармаҡтар менән дә һүрәт төшөрөп була икән. Дуҫтарыма барып күрһәтәйем әле. Һау булығыҙ, балалар.

Тыртыр сыға.

Тәрбиәсе: – Ҡыҙҙар, малайҙар, һеҙгә бөгөнгө дәрес оҡшанымы? Нимә тураһында һөйләштек? Ниндәй яңылыҡтар белдегеҙ?

Балаларҙың яуабы.

– Афарин, балалар. Рәхмәт.

***Сәйетханова Г.Ф.,***

***Мәсәлимова В.В.,***

Бөрө ҡалаһының

9-сы һанлы «Аленушка»

балалар баҡсаһы

# БАШҠОРТОСТАН – ТЫУҒАН ЕРЕМ, ҒӘЗИЗ РЕСПУБЛИКАМ

**(асыҡ сара)**

***Социализация:*** Балаларҙы тыуған ер, тыуған ҡала төшөнсәһе менән нығыраҡ таныштырыу. Башҡорт халҡының тормошо, сәнғәте, көнкүреше, байрам-йолалары менән менән таныштырыуҙы дауам итеү.

Күп милләтле Тыуған илебеҙгә һөйөү, милләт-ара татыулыҡ тойғолары тәрбиәләү.

Башҡортостан Республикаһының флагы, гербы тураһындағы белемдәрҙе нығытыу.

***Коммуникация***: Хәтер, фекерләү, интонация, телмәр тасуирилығын, эстетик тойомлауҙы үҫтереү.

Балаларҙың телмәрен башҡортса һүҙҙәр менән тулыландырыу (ҡурай, камзул, тәңкә һ.б).

***Мәғлүмәт:*** Әйләнә-тирәләге донъя: тыуған яҡ тәбиғәтенә ҡарата һөйөү тәрбиәләү. Тәбиғәткә һаҡсыл мөнәсәбәт булдырыу.

***Музыка:*** Милли музыкаль ҡоралыбыҙ (ҡурай) менән таныштырыу.

Музыкаль әҫәрҙәр тыңлау, йырлау, музыкаль-ритмик хәрәкәттәрҙе өйрәнеү.

**Йыһазландырыу:**

1. Һүрәтле кубиктар:

- ✓ Башҡортостан Республикаһы картаһы
- ✓ Өфө ҡалаһының иҫтәлекле урындары
- ✓ Башҡортостан Республикаһы гербы
- ✓ Башҡортостан Республикаһы флагы
- ✓ милли кейемдәге кешеләр
- ✓ музыкаль ҡоралдар
- ✓ «Һабантуй» байрамы

Музыкаль оҙатыу.

**Алдан башҡарылған эш.** Башҡортостан халыҡтары, республиканың баш ҡалаһы Өфө, тыуған яҡ, Бөрө ҡалаһы тураһында әңгәмәләр;

- Башҡорт һәм рус телдәрендә яттан шиғырҙар һөйләү.

Башҡортса музыка яңғырай, балалар үҙәк стена буйлап теҙелешә.

**Алып барыусы**: Һаумыһығыҙ, балалар! Һаумыһығыҙ, ҡунаҡтар! Башҡортостан Республикаһының тыуған көнө айҡанлы саҡырылған ҡунаҡтарыбыҙҙы ихтирам менән ҡабул итәбеҙ.

– Ҡарағыҙ әле, беҙҙең залыбыҙҙа ғәҙәти булмаған кубиктар ҡуйылған. Беҙ уларҙан «Дуҫлыҡ йорто» төҙөргә тәҡдим итәбеҙ. Был яраткан республикабыҙға бүләгебеҙ булыр. Тәүге кубикка ниндәй һүрәт төшөрөлгән икән?

(Башҡортостан картаһы)

– Картабыҙға диҡҡәт менән ҡараһаҡ, беҙ бында бөтә ҡалаларҙы, ауылдарҙы, тыуған ҡалабыҙ Бөрөнө, баш ҡалабыҙ Өфөнө, урман-тауҙарҙы, йылғаларҙы күрә алабыҙ. Тыуған ил тураһында шиғырҙар уҡып үтәйек.

Ер шарының картаһына
Ҡараһаң яҡшы ғына.
Башҡортостан шул картала
Бер япраҡ саҡлы ғына.
Эйе, япраҡ, аҡ ҡайындың
Бер япрағы ни бары.
Ә ҡайыны – бөйөк Рәсәй –
Шундай йәшел, юғары.
(М. Кәрим)

2. Там, где сладко пахнет смородиной,
Там, где дом и родная семья –
Это все называется родина,
Дорогая родная земля!
Даже солнце здесь светит теплее,
И ромашки красивей растут,
И горжусь я землею своею,
Здесь хорошие люди живут..
(Гузель Терегулова)

**Тыуған ил тураһында йыр яңғырай.**

**Алып барыусы**: Тағы ла бер кубикты ҡуябыҙ. Нисек уйлаһығыҙ: бында нимә төшөрөлгән икән? (Өфө ҡалаһы)

– Новый день над городом рождается,
И по свету катится молва:
С монумента «Дружбы» начинается,
С дружбы начинается Уфа.

– Башҡорт шағирҙары үҙҙәренең шиғырҙарында Өфөгә нисек итеп дан йырлайҙар икән? Шиғырҙарҙы рус теленә тәржемәлә тыңлап үтәйек.

**Бала.** Как люблю тебя, Уфа,
Ты – моя столица,

И красива, и стройна,
Мы с тобой гордимся.
Наши парки и дома
И светлы, и чисты.
Ну, а жители дружны
Честь тебе столица!
(М. Карим)

**Алып барыусы:** Балалар, ә һеҙ республикабыҙҙың тағы ла ниндәй ҡалалары тураһында беләһегеҙ? (Балаларҙың яуаптары). Ә беҙ йәшәгән ҡала нисек атала? (Бөрө ҡалаһы). Ҡалабыҙ тураһында шиғыр тыңлап үтегеҙ.

Я люблю свой край родной,
Край мой благодатный.
Восхищаюсь всем душой
Красотою знатной.
Бельские просторы
Рощи и луга
Реки и озера –
Родина моя!

Һинең йәшлек – Ағиҙелдән, ахыры,
Ә ҡартлығың һинең – Уралдан...
Ағиҙел бит ана йәш ҡыҙ булып
Иңдәреңә килеп уралған.
Метролар юҡ һиндә, трамвайҙар юҡ
Ығы-зығылар юҡ, шау-шыуҙар.
Ниндәй тыныс әкиәттәй ҡала!
Яҡындыр ҙа, бәлки, һин шуға.
*Роберт Миңнуллин*

Бирских яблок слаще нет,
Меда нет вкуснее,
Полевых цветов букет
Не найдешь нежнее.
Люди добрые живут
В бирском нашем крае,
Песни звонкие поют,
Город прославляя.

**Алып барыусы** герб төшөрөлгән кубикты күрһәтә:
– Һүрәттә нимә күрәһегеҙ? (Башҡортостан Республикаһы гербы)
– Ҡалҡып килгән ҡояш фонында кемдең һыны төшөрөлгән? (Салауат Юлаевтың һәйкәле) Салауат Юлаев кем ул? (Ул – башҡорт халҡының милли геройы, шағир, яугир)

Башҡорт халҡы үҙенең данлыҡлы улы Салауат Юлаевтың батырлығы тураһында борон-борондан йырҙарында йырлаған, ҡобайырҙарында данлаған.
Салауаттың үҙенә арналған бер шиғырҙы тыңлап үтәйек.

**<u>Салауат батыр тураһындағы йырҙан:</u>**

Салауаттың менгән кир аты
Батыр ғәскәрҙәргә юл башлай.
Кир ат өҫтөндәге Салауат,
Яуға дәртләндереп, йыр башлай.

Салавата могучий конь,
Первым устремился в бой,
Его хозяин – живой огонь –
Воинов песней зовет за собой.

**Алып барыусы**: Башҡорт халҡы батыр яугирҙарын йырҙарында һәм ҡобайырҙарында ғына данламаған, хатта бейеүҙәрендә лә сағылдырған.

**<u>«Толпарҙар» бейеүе</u>** (өлкән төркөм балалары башҡара)

**Алып барыусы** тағы ла бер кубикты ҡуя.

– Бында нимә һүрәтләнгән? (<u>Флаг)</u> Ҡарағыҙ әле, флагыбыҙ ниндәй матур. Ул ниндәй төҫтәрҙән тора? (<u>Зәңгәр, аҡ, йәшел</u>). Улар нимәне аңлата?

– <u>Флаг йәшел, аҡ һәм зәңгәр төҫтәрҙәге (аҫтан өҫкә) горизонталь тигеҙ буйлы тура мөйөшлө туҡыманан ғибәрәт: йәшел төҫ – азатлыҡты, йәшәйештең мәңгелеген; аҡ төҫ – республика халыҡтарының тыныслыҡты һөйөүен, асыҡлығын, үҙ-ара хеҙмәттәшлеккә әҙерлеген; зәңгәр төҫ уларҙың уй-ниәттәренең сафлығын белдерә. Шул уҡ ваҡытта йәшел төҫ Ислам төҫө лә булып һанала</u>

<u>Флагтың уртаһында – ҡурай сәскәһе – ул ете ырыуҙы белдерә. Флаг менән герб – былар дәүләт символикаһы. Символикаға гимн – байрамдарҙа баҫып тыңланыла торған тантаналы музыка ла инә.</u>

**Алып барыусы** милли кейемдәге кешеләр һүрәте төшөрөлгән кубикты күрһәтә.

– Бында кемдәр төшөрөлгән? (<u>Милли кейемдәрҙәге кешеләр</u>).

– Беҙҙең тыуған еребеҙ бик бай һәм матур. Беҙҙәге тауҙар, йылғалар, күлдәр, урмандар иҫ киткес. Шулай ҙа республикабыҙҙың төп байлығы – кешеләр.

Беҙҙең республика территорияһында ниндәй халыҡ вәкилдәре йәшәй? (<u>башҡорттар, татарҙар, рустар, мариҙар, сыуаштар һәм башҡалар</u>) Эйе, республикабыҙҙа бик күп халыҡ вәкилдәре дуҫ һәм татыу йәшәй.

Уж так повелось у нас на свете
Мог народ без хлеба и сапог,
Мог без солнца и огня на свете,
Лишь без песен наш народ не мог.

**Алып барыусы:** Беҙҙең тәрбиәселәребеҙ башҡарыуында татар телендә йыр яңғырай.

**Алып барыусы** башҡорт музыка ҡоралдары төшөрөлгән кубикты күрһәтә. – Был кубикта ниндәй уйын ҡоралын күрәһегеҙ? (Ҡурай) Ул нимәнән эшләнгән? (Ул ҡурай үләненең һабағынан эшләнгән). Әйҙәгеҙ, ҡурай тураһында шиғырҙар тыңлап алайыҡ.

Курай

Там, где родились мы,
И тростник поет.
Спросите, что это,
Каждый назовет!
Мелодичный мой курай,
Прославляй любимый край!

(М. Хасимова)

Ҡурайҙы мин бик беләм:
Ағайым уйнай гелән.
Бейетеп тә, йырлатып
Була ул ҡурай менән.

(М. Ғәли)

**Алып барыусы**: Хәҙер мин һеҙгә «Ҡурай» уйынын уйнарға һәм беҙҙең ҡунағыбыҙ тарафынан башҡарылған ҡурай моңон тыңларға тәҡдим итәм. (Уйын 2 тапҡыр үткәрелә).

**Алып барыусы** Һәр халыҡтың үҙенә генә хас уйын ҡоралы бар. Мариҙар, мәҫәлән, бик тә тальян гармунда уйнарға яраталар. (Мари бейеүе башҡарыла).

**Алып барыусы**: Рус халҡы ағас ҡалаҡтар ярҙамында көйҙәр сығарыуға әүәҫ. (Өлкән төркөм балалары рус бейеүен башҡара).

**Алып барыусы** киләһе кубикты ала: Бында «Һабантуй» байрамы һүрәтләнгән.

Был байрамда төрлө уйындар, бәйгеләр үткәрелә. (Ярыштар, көрәш, аттарҙа сабышыу, бағанаға менеү, тоҡтар кейеп йүгереү һәм башҡалар).

Бына беҙгә лә әҙерлек төркөмөнән ҡунаҡтар килгән, улар «Үҙ тирмәңде тап!» тигән уйынды уйнап күрһәтәсәктәр.

**Алып барыусы**: Ҡарағыҙ әле, ҡәҙерле балалар, беҙ һеҙҙең менән Дуҫлыҡ йортон төҙөп тә ҡуйҙыҡ. Йортобоҙҙо биҙәр өсөн, әйҙәгеҙ, башҡорт орнаменттары менән балаҫ һуғайыҡ. (**«Балаҫ һуғыу» бейеүе**).

**Алып барыусы**: Афарин, балалар, бергәләшеп тырыша торғас, бына ниндәй күркәм Дуҫлыҡ йорто төҙөнөк. Әйҙәгеҙ, рус телендә «Дом дружбы» йырын башҡарайыҡ (Н. Гизбрехт шиғыры һәм музыкаһы).

**Алып барыусы**: Беҙ бөгөн һеҙҙең менән тыуған Башҡортостаныбыҙ тураһында һөйләштек. Беҙҙең уртаҡ теләгебеҙ ошо: Республикабыҙҙа һәр саҡ тыныслыҡ һәм дуҫлыҡ хөкөм һөрһөн!

Учебно-методическое издание

# Педагогический дебют – 2016

Материалы
Всероссийского конкурса методических разработок

Выпуск 1

Компьютерная верстка и оригинал-макет *А.Р. Набиуллин*

Материалы публикуются в авторской редакции

---

Подписано в печать 18.06.2016 г. Формат 60х84 1/8
Бумага ксероксная, компьютерный набор.
Отпечатано на ризографе, гарнитура Times.
Усл.-печ.л. Уч.изд. л…

Заказ … Тираж 100 экз. Цена договорная

---

452450, Республика Башкортостан, г. Бирск, ул. Интернациональная, 10

Бирский филиал Башкирского государственного университета

Отдел множительной техники Бирского филиала БашГУ